ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

17-23 октябрь (карасай) 2025

№41 (1185)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Нигеҙе ныҡтың - киләсәге ныҡ**



6

**Һәр бер яугир әсәһе...**

хәүеф-хәтәрһеҙ тандарҙы көтә



8-9

**Күңелдәргә...**

рухи күпер һалына



11

**Алға, белем иленә!**



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Ваҡытлыса ғына булһа ла тереләрҙең үлгәндәр тураһында яҙғандарын уҡыуҙан туҡтағыҙ ҙа, күптән үлгән кешеләрҙең тереләр тураһында яҙғандарын уҡығыҙ әле.***
***(Г. Честертон).***

КЕМ АЛЫҠ!

# ИҢ ШӘП БҮЛӘК - КИТАП!

**Баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл - 2026 йылдың 1-се яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы бара. Күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле "Киске Өфө"гә яҙылырға ашығығыҙ - үкенмәҫһегеҙ. ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә ярты йылға яҙылыу хаҡы - 1054 һум 50 тин.**



"Киске Өфө" менән бергә булыусы аңлы, зыялы, уҡымышлы, вайымлы уҡыусыларыбыҙға рәхмәтлебеҙ. "Аңлы уҡыусы" тип атауыбыҙ юҡҡа түгел, сөнки хәҙер гәзит-журнал-китап уҡыусылар тамам һирәгәйҙе. Күрәһең, аҡ ҡағыҙ битендәге һүҙҙе һанлаусы, уның әһәмиәтен баһалаусы аңлылар сафы һирәгәйә бара. Ә шулай ҙа бындай статустағы уҡыусыларыбыҙҙы юғалтып бөтмәгәнбеҙ әле. Бар әле гәзит һүҙен үҙ итүсәләр - улар беҙҙә ҡағыҙ баҫмаларҙың киләсәктә лә йәшәйәсәгенә өмөт уята. Ә беҙ был өмөттөң аҡланыуынан дәртләнеп, уҡыусыларыбыҙҙы рухиәт менән һуғарыуҙы, кәрәкле мәғлүмәттәр еткереүҙе дауам итербеҙ, йөкмәткеле яҙмаларыбыҙ менән танһыҡтарын ҡандырырға тырышырбыҙ, тиғән вәғәҙәбеҙҙе яңыртабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ПЕНСИЯ АЛЫУСЫЛАРҒА

**2026 йылда пенсия 1 ғинуарҙан индексацияланa. Был хаҡта Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығынан хәбәр иттеләр.**

Ведомство мәғлүмәте буйынса, пенсия түләү өсөн бөтәһе 13 триллион һумға яҡын аҡса йүнәлтелә. "Быйылғы кеүек үк, пенсияны ваҡытынан алда арттырыу тураһында ҡарар ҡабул ителәр: бер юлы 1 ғинуарҙан - инфляциянан юғарыраҡ. Страховка пенсияһы 7,6 процентка индексацияланa, һөҙөмтәлә ҡартлыҡ буйынса страховка пенсияһының уртаса күләме 2 мең һумға тиерлек арта һәм 27,1 мең һум була", - тиелә Хеҙмәт министрлығының белдереүендә. Социаль пенсия 1 апрелдән 6,8 процентка индексацияланa.

## ЭСКӘҺЕҢ ИКӘН, ЯҘА АЛ!

**Рәсәй Юғары суды электр самокатында эскән килеш йөрөгән осраҡта водитель таныҡлығынан мәхрүм итергә мөмкин булыуын белгертте.**

Суд аңлатмаларына ярашлы, 0,25 кВт ҡеүәтенән юғары двигателле электр самокаты менән идара итеү өсөн водитель танығлығы кәрәклеге билдәләнгән. Эскән килеш машина йөрөткән осраҡта водитель танығлығынан мәхрүм ителергә мөмкин булған кеүек, иҫерткес эсемлек эскән көйөнсә электр самокаты менән идара иткән осраҡта ла таныҡлыҡтан ҡолаҡ ҡағырға мөмкин. Башҡортостанда ярты йыл эсендә электр самокаттары менән бәйле 400-ҙән ашыу юл-транспорт ваҡиғалары теркәлгән.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

## *Һеҙ ниндәй китаптарға өҫтөнлөк бирәһегеҙ, улар Өфөнөң Ленин урамындағы "Китап" магазинында бармы?*

***Луиза ФАРХШАТОВА, журналист, радио һәм телевидение ветераны, Башҡортостан дәүләт телерадиокомпанияһының "Тамыр" балалар студияһын ойоштороусы:*** Бөгөнгә рус әҙәбиәтендә мин иҫтәлектәргә, хаттарға, ғөмүмән, эпистоляр жанрға өҫтөнлөк бирәм. Унан башҡа, үҙ тормошом туранан-тура кино, телевидение менән бәйле булғас, режиссерҙар тормошо, Рәсәй кино тарихы тураһында яратып уҡыйым. Башҡортостаныбыҙҙың кино тарихы әле яҙыла ғына, үсешә генә бит инде. Әмир ағай Абдразаков тураһында мәғлүмәте әле бик аҙ булған, киң ҡолас менән эшләмәгән китап ҡына донъя күрҙе. Ә бит уның тормошо хаҡында шул хәтлем бай, сағыу китап сығарырға булыр ине. Был турала уның улдарына ла хәбәр иттем мин. Бәлки, киләсәктә был хыялдар тормошҡа ашыр.

Үҙем әлеге ваҡытта намаҙҙа булмаһам да, өҫтәлемдә һәр саҡ Ҡөрьән-Кәрим асыҡ ята. Яңы ғына Ғофран мәсете имам-хатибы Усман хәҙрәт рус теленә тәржемә ителгән Ҡөрьән-Кәрим китабы бүләк иткәйне, шуны бирелеп китеп уҡыйым, шул хәтлем аңлайышлы һәм мауыҡтырғыс итеп тәржемәләнгән. Көн һайын бер-ике битен генә уҡып сыҡһам да күңеләмә рәхәтлек һәм тыныслыҡ табам.

"Китап" нәшриәтендә сыҡҡан башҡортса тәржемәле Ҡөрьән-Кәрим дә бар - өйҙәге китапханамдың бер биҙәге ул. Был Изге Китаптың инглиз, француз, немец, рус телендә тәржемәләрен күп йыйғайным, бүләккә лә күп тараттым. Аллаһ Тәғәлә сауаптарын үҙе насип итһен.

Башҡорт әҙәбиәтенә килгәндә, Яңыбай Хаматов, Зәйнәб Биишева әҫәрҙәрен ҡабат-ҡабат уҡып торам - улар беҙҙең тарихыбыҙ, хәтерҙә яңыртып тороу зыян түгел. Ғайса ағай Хөсәйеновтың ғилми хеҙмәттәрен ярат уҡыйым. Былардан башҡа минең һәр саҡ ҡул осонда булған, бер ҡасан да саң ҡунмаҫ китаптарым - һүҙлектәр. Һуңғы иң бирелеп уҡығаным - уҡытыусым Мөхтәр Хөснөлхаҡ улы Әхтәмовтың хеҙмәттәре. Башҡа һыймаслыҡ ҙур эш атҡарып сыҡҡан кеше ул. Иҫем китеп, шаҡ ҡатып уҡыным мин уларҙы. Һәр һүҙе ынйы бөртөгөләй берәмләп йыйылған, алтынға торошло. Тап шундай монументаль хеҙмәттәр Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡлы тиғән фекерҙәмен. Заманында "Китап" магазинынан алып ҡайтҡан иң ҡәҙерле китаптарым улар.

12+

ҠЫҪҠАСА

# АУЫЛ МӘҘӘНИӘТЕНӘ

✓ **"Земство мәҙәниәт хеҙмәткәре" федераль программаһы буйынса түләүҙәрҙе 2026 йылда 59 кеше аласаҡ. Был ағымдағы йыл менән сағыштырғанда 34 процентҡа күберәк - быйылғы ошо квота 44 кешегә генә ҡағыла.** Был турала республика Хөкүмәте ултырышында мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова белдерҙе. Ауылға йәки ҙур булмаған ҡалаға мәҙәниәт учреждениеһына эшкә килгән кешегә бер тапҡыр бер миллион һум аҡса бирелә. Түләү конкурс нигеҙендә башҡарыла. Дәғүәселәрҙең йәше сикләнмәй. Конкурс раҫланған исемлек буйынса мәҙәниәт учреждениеһындағы вакансияны биләгән һәм программала ҡатнашҡан белгестәргә ҡағыла. Алынған аҡсаны торлаҡ шарттарын яҡшыртырға, ер майҙаны йәки автомобиль һатып алыуға тотонорға мөмкин. Түләүҙе алған кеше ошо уҡ урында йәнә биш йыл эшләргә бурыслы. Башҡортостан "Земство мәҙәниәт хеҙмәткәре" программаһын 2021 йылда илебеҙҙә беренсе булып тормошҡа ашыра башланы. Уның һөҙөмтәһендә 150 мәҙәниәт хеҙмәткәре торлаҡ шарттарын яҡшыртты.

✓ **1 октябрҙән Рәсәй эшҡыуарҙары кредит каникулдары алырға мөмкин. Элекке шарттарҙан айырмалы рәүештә, быға теләһә ниндәй предприятие хоҡуҡлы (килеме кәмегәнме-юҡмы, мөһим түгел).** Кредит каникулдарының категориялары бар. Уның күләме түбәндәге сумманан артмаһа, каникулдар бирелә: үҙмәшғүлдәр өсөн - 10 миллион һум, микропредприятиелар өсөн - 60 миллион һум, бәләкәй предприятиелар өсөн - 400 миллион һум, урта предприятиелар өсөн - 1 миллиард һум. Каникулдарҙы 2024 йылдың 1 мартынан бирелгән һәр кредит буйынса (әгәр бер нисә булһа) биш йылға бер тапҡыр алты айға алырға була. Был осорҙа процент килешеүҙә яҙылған ставка буйынса иҫәпләнә һәм ай һайын капитализациялана (йәғни займдың төп суммаһына өҫтәлеп бара), әммә ул саҡта дөйөм бурыс арта.

✓ **Өфөлә 22 балала Коксаки вирусын йоҡтороу осрағы теркәлгән. Сирлеләрҙең барыһы ла - балалар.** Энтеровирус инфекцияһы - энтеровирустар тыуҙырған йоғошло сир, уларҙың 100-ҙән ашыу төрө бар, әммә Коксаки вирусы нығыраҡ таралған. Был вирус менән йышыраҡ балалар ауырый. Ул һыу, яҡшылап йыуылмаған йәшелсә, емеш-еләк, бысраҡ ҡулдар, уйынсыҡтар аша йоға. Инфекция сығанағы - ауырыу кеше. Инкубация осоро - яҡынса 1-10 көн. Коксаки билдәләре төрлө: тән температураһы 39- 40 градусҡа тиклем күтәрелә, ныҡ итеп баш ауырта, ҡоҫтора, сабыртҡылар сыға, йүткертә, тамаҡ ауыртып тора, мускулдар ауырта, дөйөм хәлһеҙлек. Энтеровирус инфекцияһына ҡаршы вакцина юҡ. Сир билдәләре беленеү менән табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ТАЖИКСТАНДА...



**Үткән аҙнала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Тажикстандың баш ҡалаһы Дүшәнбелә ил Президенты Владимир Путин етәкселек иткән Рәсәйҙең рәсми делегацияһы составында эшләне.**

Төп ваҡиға - ул 9 октябрҙә Башҡортостан һәм Тажикстан хөкүмәттәре араһында Рәсәй - Тажикстан индустриаль паркын төҙөү тураһында инвестиция килешеүенә ҡул ҡуйыу булды. Был мөһим сара ике дәүләт башлығы - Рәсәй Президенты Владимир Путин һәм Тажикстан Президенты Эмомали Рахмон ҡатнашлығында үтте. "Буласаҡ парк 9,3 гектар майҙанда урынлашҡан. Беҙҙең үҫеш Корпорацияһы алдында федераль бюджет иҫәбенә ике этапта производство корпустарын реконструкциялау һәм яңыртыу бурысы тора. Тағы бер бурыс - индустриаль паркка резиденттарҙы йәлеп итеү. Республиканың ҡайһы бер предприятиелары был йәһәттән ҡыҙыҡһыныу белдерҙе лә инде. Шулай итеп, Башҡортостан менән Тажикстандың иҡтисади мөнәсәбәттәрен үҫтереүҙә яңы этап башлайбыҙ", - тип яҙҙы был хаҡта Радий Хәбиров социаль селтәрҙәрҙә.

Индустриаль парк биләмәһендә майҙаны 23,5 мең квадрат метрлыҡ өс етештереү корпусын реконструкциялау күҙаллана. Уларҙа металлургия һәм станоктар эшләү производстволарын, шулай уҡ еңел һәм медицина сәнәғәте предприятиеларын урынлаштырыу ҡарала. Тажикстандың сәнәғәт һәм яңы технологиялар министры Шерали Кәбир менән осрашыу барышында был мәсьәлә тураһында ентекле һөйләшеү булды.

Башҡортостан Башлығы туризм өлкәһендә хеҙмәттәшлекте үҫтереү өсөн Дүшәнбенең иҫтәлекле урындарының мөһим ролен билдәләне. Мәҫәлән, "Кохи Навруз" һарайы бында ял итеү өсөн иң популяр урын. 40 мең квадрат метр майҙанлы комплексты милли архитектура стилендә төҙөгәндәр, донъяла ундай ҡоролма башҡа юҡ. Һарайҙа 12 зал бар, улар тажик халҡының халыҡ кәсептәре әйберҙәре менән биҙәлгән. 2019 йылда "Кохи Навруз" Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының һигеҙ заман мөғжизәләренең береһе тип таныла.

"Бер урында торорға ярамай, халыҡ-ара аренала яңы партнерҙар эҙләргә кәрәк. Тажикстан хеҙмәттәшлеккә бик әүҙем саҡыра һәм уның төрлө форматтарын тәҡдим итә. Ил үҫеш динамикаһы менән һоҡландыра. Һәм беҙ бында ла үҫеш башланғыстарын табырбыҙ тип уйлайым", - тине республика етәксеһе журналистар менән осрашыу мәлендә һәм Башҡортостандың Тажикстан менән сауҙа-иҡтисади, мәҙәни, гуманитар хеҙмәттәшлек, туризм өлкәһендә берлектәге проекттарҙы үҫтереүҙе планлаштырыуын билдәләне.

Әйткәндәй, бөгөн Башҡортостан 110-дан ашыу ил менән тышҡы сауҙа бәйләнештәре булдырған. Тажикстан Республикаһы тауар әйләнешендә 15-се урынды биләй. Башҡортостандан был илгә минераль продукттар (65,5 процент), ағас һәм целлюлоза-ҡағыҙ изделиелары (24,4 процент), химия сәнәғәте продукцияһы һәм каучук (5,4 процент), аҙыҡ-түлек тауарҙары һәм сеймал (2,4 процент) сығарыла.

# ТРЕНЕРҘАРҒА...

**Республикала 32 тренерға миллион һумлыҡ грант тапшырыла. Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов ошо турала белдерҙе.**

Руслан Хәбибов һүҙҙәренсә, республикала спортсыларға һәм тренерҙарға һөҙөмтәле ярҙам системаһы булдырылған. Быйыл 32 тренер "Ауыл тренеры" һәм "Ҡала тренеры" проекттарында ҡатнашҡан. Уларҙың һәр береһенә 1-әр миллион һум аҡса тапшырыла. Башҡортостанда 141 спорт төрө үҫтерелә, 129 аккредитацияланған спорт федерацияһы эшләй. Вице-премьер әйтеүенсә, республикабыҙҙан 400-ҙән ашыу атлет Рәсәйҙең йыйылма командалары составына инә. Алты ай эсендә улар меңдән ашыу миҙал яулаған.

Шулай уҡ тренер-уҡытыусыларҙың эш хаҡын уҡытыусыларҙың уртаса хеҙмәт хаҡына еткереү ярҙам сараларының береһе булып тора. Беҙҙең төбәктә иһә 52 мең һумдан ашыу. Был маҡсатҡа муниципаль берәмектәргә 208 миллион һумдан ашыу субсидия бүленгән.

Республикала лайыҡлы спорт инфраструктураһы булдырыла, тип өҫтәне вице-премьер. "Бизнес-спринт (Мин спортты һайлайым)" федераль проекты сиктәрендә Октябрьский ҡалаһында бассейн һәм Стәрлетамаҡта "Алға" физкультура-һауыҡтырыу комплексы төҙөлә башланы. "Ыңғай динамика күҙәтелеүенә ҡарамаҫтан, беҙ өлгәшелгәндәр менән генә туҡтап ҡалмайбыҙ. Көйөргәҙе һәм Федоровка райондарында - бассейндар, Ауырғазы районының Талбазы ауылында стадион төҙөлөшөн тамамларға кәрәк", - тип өҫтәне Руслан Хәбибов.

# ИШЛЕ БУЛҺЫН ҒАИЛӘЛӘР!

**Башҡортостанда 21 декабрь Ишле ғаилә көнө булыуы ихтимал. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары көҙгө сессияның беренсе пленар ултырышында ошондай ҡарар ҡабул итте. "Башҡортостан Республикаһында күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында" законға үҙгәрештәр проекты тәүге уҡыуҙа ҡаралды.**

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, Ишле ғаилә көнөн 21 декабрҙә билдәләү планлаштырыла. Был дата осраҡлы ғына һайланмаған. Башҡортостанда декабрь аҙағында күп балалы ғаиләләрҙе, "Йыл ғаиләһе" Бөтә Рәсәй конкурсы һәм башҡа ғаилә конкурстары еңеүселәрен бүләкләү йолаһы йәшәп килә. Ә рәсми байрам булдырыу был эштең логик дауамы буласаҡ, уны ҡануни кимәлдә нығытасаҡ һәм уға яңы импульс бирәсәк.

Декабрь айы, Яңы йыл һәм Раштыуа алдынан, ғаилә ҡиммәттәрен, ғаилә усағын һәм быуындар берләшеүен символлаштыра, тип билдәләне парламент спикеры. Яңы байрам республиканың мәҙәни календарында үҙ урынын аласаҡ. "Ишле ғаилә көнөн булдырыу ғаиләнең абруйын нығытыуға, традицион ҡиммәттәрҙе пропагандалауға, өс һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ата-әсәләрҙең социаль статусын күтәреүгә булышлыҡ итер тип ышанам. Был әсәлекте һәм балалыҡты яҡлау буйынса эҙмә-эҙлекле дәүләт сәйәсәте сиктәрендә тағы ла бер мөһим сара булып тора", - тине Константин Толкачев.

# СИКЛӘҮ КӘРӘК ШУЛ...

**Рәсәйҙә быға тиклем айырыуса ауыр енәйәттәр өсөн хөкөм ителгән мигранттарға илгә инеүҙе сикләүҙәре ихтимал.**

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары ошондай тәҡдим менән сығыш яһаны. Был критерийға кешеләрҙе туҡмау, талау, көсләү, дәүләттең конституцион ҡоролошо нигеҙҙәрен ҡаҡшатыу һәм Рәсәй Федерацияһы биләмәһендә, унан ситтә лә ҡылынған башҡа законһыҙ ғәмәлдәр ҡарай. Дәүләт Думаһы закон проектын хупалһа, бындай мигранттарға ваҡытлыса йәшәү, уҡыу, ВНЖ алыу һәм эшкә урынлашыу тыйыла. "Һуңғы ике йылда хоҡуҡ һаҡлау органдары Рәсәй биләмәһендә мигранттар ҡылған енәйәттәрҙең артыуын билдәләй. Закон боҙоу осраҡтарының күбәйеүе, шулай уҡ йәмғиәт милли именлекте тәьмин итеү буйынса сараларҙы көсәйтеүҙе талап итә. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығы статистикаһына ярашлы, 2025 йылдың 7 айында миграция өлкәһендә 1111 енәйәт эше ҡуҙғатылған. Закон проекты Рәсәйҙә илебеҙҙең традицияларына, тарихына, мәҙәниәтенә һәм закондарына хөрмәт менән ҡараған кешеләргә йәшәү мөмкинлеген биреүгә йүнәлтелгән", - тип белдерҙе Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Республика көнөн байрам итеү саралары сиктәрендә Өфөнөң Совет майҙанында мәктәп уҡыусыларын йәш шайморатовсылар сафына ҡабул итеү тантанаһы булды. "Бөгөн, Республика көнөндә, милли геройыбыҙ Миңлеғәле Шайморатов исемен ғорур йөрөткәндәрҙең татыу ғаиләһенә ҡушылаһығыҙ. Был - ҙур баһа ла, оло яуаплылыҡ та", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең ҡотлау һүҙендә. Уҡыусылар "Йәш шайморатовсылар анты"н ҡабул итте һәм "Шайморатов генерал" йырын башҡарҙы, ә Махсус хәрби операцияла булған яугирҙар йәш шайморатовсылар отрядтары командирҙарына 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы байрағының күсермәһен тапшырҙы.

✓ Өфөләге вуз-ара кампуста Рәсәй сит ил студентары ассоциацияһының XIII съезы үтте. Сарала донъяның 45 иленән 250 сит ил студенты ҡатнашты. Улар Рәсәйҙең 13 төбәгендәге вуздарҙа уҡый. Сараны вуз-ара студенттар кампусы резиденты булған Өфө фән һәм технологиялар университеты ойошторҙо һәм делегацияларҙы ҡабул итте. Съезды асыу тантанаһында Рәсәй сит ил студенттары ассоциацияһының Попечителлек советы рәйесе, Патрис Лумумба исемендәге Рәсәй халыҡтар дуҫлығы университеты президенты Владимир Филиппов һәм башҡа юғары ҡунаҡтар ҡатнашты.

✓ Планға ярашлы, "Башҡортостанда оҙон ғүмерлелек" проектында 2025 йылда 10 521 өлкән быуын вәкиле ҡатнашырға тейеш. Республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Светлана Веращагина хәбәр итеүенсә, был маҡсатҡа 33 миллион һумдан ашыу аҡса бүленгән. Әлеге ваҡытта проектҡа 9714 кеше йәлеп ителгән. Бер көнлөк турҙар сиктәрендә пенсионерҙар республика буйлап сәйәхәт итә, уның иҫтәлекле урындары менән таныша, шулай уҡ һаулығын һәм социаль бәйләнештәрен нығыта ала.

✓ Башҡортостан аграрийҙары Мәскәүҙә "Алтын көҙ - 2025" Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһендә ҡатнашты. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостан сираттағы тапҡыр күргәҙмәнең Гран-приһына лайыҡ булған. Республиканың тиҫтәләгән предприятиеһы һәм ойошмаһы төрлө дәрәжәле наградалар алған. Был Рәсәй баҙарында Башҡортостан продукцияһына ихтыяждың булыуы тураһында һөйләй, тип белдерҙе Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә вице-премьер - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов.

✓ Туристар һаны буйынса республикабыҙ Волга буйы федераль округында - 3-сө, Рәсәйҙә 17-се урында тора, тип хәбәр итте Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Светлана Верещагина. Башҡортостанға йышыраҡ - Силәбенән (28 процент), Татарстандан (16,5 процент), Ырымбурҙан (10 процент), Свердловск өлкәһенән (7 процент), Удмуртиянан (6 процент) киләләр.

*✓ Ниндәй генә заманса гаджеттар булдырылмаһын, үҙ ҡулың менән тотоп, еҫен еҫкәп уҡыған китапҡа бер ни ҙә етмәй. Рус классикаһын да яратып, ҡабат-ҡабат уҡыйым мин.*

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# ТАҒЫ БЕР СПОРТ ҮҘӘГЕ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Рәсәй Өҫтәл теннисы федерацияһы президенты һәм Дәүләт Думаһы рәйесе урынбаҫары Александр Бабаков Өфөлә Өҫтәл теннисы үҙәгенә нигеҙ һалыу тантанаһында ҡатнашты.**

Ике мең квадрат метрлыҡ яңы объект Затон биҫтәһендә Рима Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәге янында төҙөләсәк. Унда 150 тамашасыға иҫәпләнгән спорт залы, кейенеү-сисенеү бүлмәләре, күнекмәләр бүлмәләре, административ һәм ярҙамсы биналар урынлашасаҡ. "Өҫтәл теннисы - бик әүҙем һәм мауыҡтырғыс спорт төрө. Александр Михайлович Бабаковҡа республикабыҙҙа Өҫтәл теннисы үҙәге төҙөлөшөнә булышлыҡ итеүе өсөн республика халҡы исеменән рәхмәт белдерәм, - тине Радий Хәбиров тантанала сығыш яһап. - Был беҙҙең өсөн ҙур шатлыҡ, беҙҙең балалар спорт менән теләп шөғөлләнә. Уларға был мөмкинлекте булдырыу өсөн беҙ тырышасаҡбыҙ. Беҙҙә ҙур еңел атлетика аренаһы проекты әҙер, унда яҡынса 30 спорт төрө үҫешәсәк, спорт залдары, көрәш, футбол майҙансыҡтары һәм теннис стадиондары буласаҡ".

Александр Бабаков Башҡортостан етәкселегенә уртаҡ башланғыстарҙы тормошҡа ашырыуҙа ярҙам күрһәтеүе өсөн рәхмәт белдерҙе. "Беҙҙең бөтә проекттар ҙа халыҡ өсөн. Бөгөн мин күп йәштәрҙе күрәм - тимәк, бында Олимпия бейеклектәренә өлгәшергә теләүселәр йә үҙ ғүмерен өҫтәл теннисы кеүек иҫ киткес спорт төрөнә бағышларға теләүселәр күп буласаҡ, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Өҫтәл теннисы федерацияһы президенты. - Беҙҙең дәүләт башлығы йыш ҡына Рәсәй үҙенең бөйөклөгөн күп милләтле халҡы арҡаһында һаҡлай, ти. Һеҙ илебеҙҙе бәхетле иткән кешеләр. Бөйөк дәүләт граждандары булыуығыҙҙы һәр саҡ иҫегеҙҙә тотоуығыҙҙы теләйем".

Тантана барышында шулай уҡ Радий Хәбиров һәм Александр Бабаков Башҡортостан менән Рәсәй Өҫтәл теннисы федерацияһы араһында хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Документ өҫтәл теннисын республикала төп спорт төрө булараҡ үҫтереүҙе, халыҡтың һаулығын нығытыу өсөн шарттар булдырыуҙы, спортсылар резервын һәм юғары спорт оҫталығы мәктәбен әҙерләүҙә булышлыҡ итеүҙе, илдең инфраструктураһын нығытыуҙы күҙ уңында тота. Сара аҙағында хөрмәтле ҡунаҡтар махсус арт-объектҡа ваҡыт капсулаһын урынлаштырҙы.

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ?

## *Һеҙ ниндәй китаптарға өҫтөнлөк бирәһегеҙ, улар Өфөнөң Ленин урамындағы "Китап" магазинында бармы?*

***Нәфисә ТУЛЫБАЕВА, Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директор урынбаҫары:*** Ғаиләбеҙҙә үтә ҙур булмаған, әммә ҡыҙыҡһындырған, эшебеҙгә ҡағылышлы, халыҡ ижады, фольклор, этнография, тарих, әҙәбиәт, кинорежессура һ.б. буйынса хеҙмәттәр йыйылған китапханабыҙ бар. Ваҡыты менән уны тулыландырырға кәрәк булһа, "Китап"ҡа килеп әйләнәбеҙ. Магазин яңы урынға күскәне бирле беҙгә яҡынайҙы, шуныһы бигерәк тә уңайлы, лекторийҙар залында үткәрелгән сараларҙа ла булырға тырышам. Мин үҙемде ҡайһы бер яҙыусыларҙың фанаты тип иҫәпләйем хатта. Бигерәк тә Хәйҙәр Тапаков, Талха Ғиниәтуллиндарҙы яратып уҡыйым. Яҡташым Гөлсирә Ғиззәтуллинаның, Тамара Ғәниеваның әҫәрҙәре минең китап кәштәмдә айырым урын биләп тора, электән бирелеп китеп уҡыйым мин уларҙы. Ғөмүмән, нәшриәт яңылыҡтарын күҙәтеп барам, яңы китаптарҙың презентацияларын да ҡалдырмаҫҡа, форсат булғанда һатып ала һалырға тырышам. Һуңғы осорҙа заман һулышы булған яңы китаптарға өҫтөнлөк бирәм. Беҙ бит филолог, ә филологтар бер нимәнән дә артта ҡалмаҫҡа, барыһын да күҙәтеп, уҡып барырға тейеш.

Сибайҙа мәктәптә эшләгән йылдарҙа Өфөнән күп китап ташылды, үҙемә тигәндең һәр береһен бишәрләп ала торғайным. Беҙ унда биш уҡытыусы инек, китаптар "һә" тигәнсе тарала ине. Ниндәй генә заманса гаджеттар булдырылмаһын, үҙ ҡулың менән тотоп, еҫен еҫкәп уҡыған китапҡа бер ни ҙә етмәй.

Рус классикаһын да яратып, ҡабат-ҡабат уҡыйым мин. Шуға күрә хатта Санкт-Петербургка барған саҡта китап йәрминкәһенән Вознесенский һ.б. шиғыр китаптарын һатып алып, йөкмәп ҡайтҡан кеше мин. Пушкин, Фет, Блок шиғырҙарын йыш уҡып алам. Ә үҙебеҙҙең башҡорт әҙәбиәте классикаһы тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Салауат Юлаев, Шәйехзада Бабичтан башлап, Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Тимер Йосоповтарҙың бәләкәс кенә матур китаптары теҙелеп киткән минең китап кәштәләремдә. Зәйнәб Биишеваның әҫәрҙәрен бала саҡтан яратам. Мин үҫкән Ейәнсура районының бәләкәй генә Юнай тигән ауылында уның китаптары ҡулдан-ҡулға йөрөп, тетелеп, туҙып бөтә торғайны. Беҙҙең яҡтар шәлдәре менән данлыҡлы бит инде. Кис ултырғанда еңгәләр үҙҙәре эш менән булһа, бер баланы уҡырға ултыртып ҡуялар ине. Бына шул ваҡыттарҙа беҙ китапҡа әүрәгәнбеҙ, уны яратырға, хөрмәт итергә өйрәнгәнбеҙҙер ул.

Ә эшемә килгәндә, Матди булмаған мәҙәни мираҫҡа ҡағылышлы бик күп китаптар уҡырға тура килә. Һәм эҙләнгән саҡта барлыҡ этнографтарҙың: Янғужин, Кузеев, Шитова һ.б. хеҙмәттәрен аҡтарабыҙ. Уларҙың китаптары был магазинда әле лә булыуы бик яҡшы. Әммә балаларға бәләкәй, ҡыйбатлы булмаған, сағыу китаптар күберәк сығып торһа ине. Ололарҙы тәрбиәләргә кәрәкмәй, ә балаларҙа патриотлыҡ тойғоһо уятыр өсөн бындай китаптар бик файҙалы. Мин яңыраҡ ҡына "Китап" магазинынан Азат Ҡужиндың буямдарын алғайным, балаларға ныҡ оҡшай: буяп ултыралар, шул уҡ ваҡытта һорауҙарҙа яуҙыралар, ҡыҙыҡһыналар. Беҙҙең бала саҡтағы һымаҡ, уларҙың да күңелендә китапҡа ҡарата һөйөү тойғоһо уятайыҡ, ситкә ебәрмәйек тиһәк, шундай китаптар күберәк кәрәктер, тип уйлайым.

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ҒИЛӘЖЕТДИНОВ ТАЖЕТДИН БАҺАУЕТДИН УЛЫ

Т.Ж. Ғиләжетдинов - Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, майор, уҡсылар полкының взвод командиры. Советтар Союзы Геройы. Ул 1924 йылдың 2 майында Башҡорт АССР-ының Бөрө кантоны Оло Баҙраҡ ауылында тыуған (хәҙерге Борай районы). Нәҫел-нәсәбе - эске йылан башҡорттарынан. Мәктәпте тамамлағас, фермала, мәктәптә эшләй. Һуғышҡа 1942 йылдың февралендә алына, уға 18 йәш тә тулмаған була. Гурьев ҡалаһында хәрби пехота училищеһын тамамлай.

1943 йылдан башлап Көньяҡ, 4-се Украин фронттарында хеҙмәт итә. Фронтта миномет взводы командиры вазифаһын башҡара. 1943 йылдың мартында ул хеҙмәт иткән 665-се уҡсылар полкы Ростов ҡалаһына яҡын Солтансалы һәм Ҙур Кирсановка ауылдарын дошмандан азат итә. Артабан - Таганрог, Мариуполь, Мелитополь ҡалалары өсөн барған яуҙарҙа ҡатнаша.

Ҡырымды немец-фашист илбаҫарҙарынан азат итеү өсөн алыштарҙа ҡаһарманлыҡ өлгөләрен күрһәтә. Артиллерия батареяһының лейтенант Тажетдин Ғиләжетдинов етәкселегендәге ут взводы (4-се Украина фронты, 51-се армия, 216-сы уҡсылар дивизияһы) 1944 йылдың 7 апреленән 9 апрелгә тиклем Тархан ауылы өсөн алыштарҙа дошмандың өс дзотын, ике ауыр миномет батареяһын һәм танктарға ҡаршы өс пушкаһын ҡыйрата, күрһәткән батырлыҡтары өсөн ул Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән бүләкләнә.

1944 йылдың 9 майында Севастополь ҡалаһы өсөн алыштарҙа Ғиләжетдиновтың ут взводы ике танкты һәм ике штурмлау орудиеһын юҡҡа сығара. Орудие расчетынан бер үҙе генә иҫән ҡалһа ла, тағы бер танкты шартлата, әммә үҙе лә бик ауыр яралана. 1945 йылдың 24 мартында СССР Юғары Советы Президиумы Указы менән уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Һуғыштан һуң Башҡорт дәүләт университетын тамамлай, тыуған ауылында уҡытыусы, унан һуң район мәғариф бүлеге мөдире, партияның район комитетының икенсе секретары вазифаларын башҡара, оҙаҡ йылдар Баҙраҡ мәктәбе директоры була. Был вазифала булғанда, яңы мәктәп бинаһы төҙөтә. Башҡортостан геройҙарының иң һуңғыһы булған Тажетдин Баһауетдин улы Ғиләжетдинов 2012 йылда Өфө ҡалаһында вафат була, тыуған ауылында ерләнгән.

Ул йәшәгән йорт һәм ауыл мәктәбе биналарына мемориаль таҡтаташтар ҡуйылған. 2020 йылда Оло Баҙраҡ мәктәбенә Тажетдин Ғиләжетдинов исеме бирелә. Шулай уҡ геройҙың бюсы тыуған ауылында Еңеү паркында урынлаштырылған. Борай ауылының бер урамы уның исемен йөрөтә.

Наградалары: Ҡыҙыл Йондоҙ ордены (11.05.1944), "Алтын Йондоҙ" миҙалы (24.03.1945), Ленин ордены (24.03.1945), I дәрәжә Ватан һуғышы ордены (06.04.1985), боевой миҙалдар.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда һуғыш балалары өсөн льготалар киңәйтелде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 30 сентябрҙә тейешле законға ҡул ҡуйҙы. Документ республиканың рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Яңы законға ярашлы, "һуғыш балалары" статусына эйә булған граждандарға республиканың Күп функциялы үҙәктәрендә дәүләт хеҙмәттәре сираттан тыш күрһәтелә. Бынан алдараҡ Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы беренсе уҡыуҙа һуғыш балалары өсөн льготалар исемлеген киңәйтеүҙе күҙ уңында тотҡан закон ҡабул иткәйне.

✓Башҡортостан Башлығы бойороғо менән 11 районда (Бөрө, Благовар, Благовещен, Иглин, Илеш, Ҡалтасы, Ҡыйғы, Краснокама, Мишкә, Тәтешле һәм Шишмә) ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелде. 8 августан 15 сентябргә тиклем тупраҡтың артыҡ дымланыуы сәбәпле сәсеүлектәрҙең һәләк булыуы теркәлгән. Был райондарҙың агросәнәғәт комплексы предприятиелары етәкселәре республиканың Ауыл хужалығы министрлығына килтерелгән зыянды һәм уларҙы үҫтереү өсөн тотонолған сығымдарҙы дәлилләгән документтар тапшыра ала

✓Башҡортостанда Ҡарман ДРЭС-ының реконструкцияланған 1-се энергия блогы сафҡа индерелде. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров телекүпер режимында блокты сафҡа индереүгә рөхсәт бирҙе. Яңыртыу эштәренән һуң Ҡарман ДРЭС-ы 1-се энергия блогының номиналь ҡеүәте 14,8 МВт арттырылып, 330 МВт еткерелә. Башҡарылған эштәр энергоблоктың иҡтисади һөҙөмтәлелек күрһәткестәрен яҡшыртырға, төп ҡорамалдарҙың ресурсын 30 йылға оҙайтырға һәм уның ышаныслы, аварияһыҙ эшләүен тәьмин итергә мөмкинлек бирергә тейеш.

✓Башҡортостан Башлығы МХО-ла ҡатнашыу өсөн контракт төҙөгәндә бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәрҙең (1-шәр миллион һум) ғәмәлдә булыу ваҡытын 2025 йылдың 31 октябренә тиклем оҙайтты. Бынан алдараҡ Радий Хәбиров Оборона министрлығы менән МХО биләмәһендә хеҙмәт итеү өсөн контрактҡа ҡул ҡуйған яҡташтарыбыҙға бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәрҙең ғәмәлдә булыу ваҡытын 30 сентябргә тиклем оҙайтҡайны. Республикала контрактсыларға түләүҙәр күләме 1 миллион һум тәшкил итә. Бөгөн МХО биләмәһендә хеҙмәт итергә теләүселәргә бер тапҡыр бирелә торған түләүҙең суммаһы - 1 700 000 һум. Шуның 1 300 000 һумы - республиканан, ҡалғаны иһә федераль аҡса.

✓Башҡортостандың Салауат районы Арҡауыл ауылында СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы Хәнифә Искәндәроваға бюст асылды. Был хаҡта муниципалитет башлығы Марс Кашапов хәбәр итте. Хәнифә Искәндәрова бар ғүмерен уҡытыусылыҡ эшенә бағышлай. Ул СССР Юғары Советының һигеҙенсе һәм туғыҙынсы саҡырылыш депутаты була, өс тапҡыр Совет ҡатын-ҡыҙҙары комитетына һайлана. 1968 йылда уға балаларҙы уҡытыуҙа һәм тәрбиәләүҙә ҙур ҡаҙаныштары өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә.

✓ *Психологтар әйтмешләй, автохамдар бындай ҡылыҡтары менән үҙ баһаларын күтәрергә, үҙ алдына ҡоролған "ҡыуышыу"ҙа еңеүсе булып күренергә теләй. Тап шуға күрә лә улар башҡа водителдәрҙең дә ҡуҙғыуын, яуап реакцияһын көтә.*



ҮӘТ БИТ ӘЙ!

# ГЕНИЙ БУЛҒЫҢ КИЛӘМЕ?

## Гений кеүек туҡлан!

**Генийлыҡ йомағы өҫтөндә бөтә быуын ғалимдары ла баш вата. Берәүҙәр барлыҡ "сәбәпте" гендар үҙенсәлегендә һәм мейе төҙөлөшөндә күрһә, икенселәр быңдай һәләтте ниндәй ҙә булһа һирәк ауырыуға япһара. Өсөнсөләр иһә генийҙар бары тик ҡыш көнө генә тыуа, тип иҫбат итә. Ләкин был гипотезаларҙың береһен дә дөрөҫлөккә тап килә, тип иҫбат итеп булмай.**

Тикшеренеүселәр бөйөк кешеләрҙең нисек туҡланыуын тикшергән һәм шундай һығымтаға килгән: уларҙың барыһы ла гурман булған һәм ашҡаҙандары тулы булғанда ғына ижад иткән. Шуға күрә "Ижадсы ас булырға тейеш", тигән хәҡиҡәт ысынбарлыҡҡа тап килмәй, тип әйтергә була.

Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, дөрөҫ булмаған туҡланыу иң тәүҙә мейегә тәьҫир итә һәм ҡайһы бер билдәле матдәләрҙең етмәүе мейе эшмәкәрлеге үҙгәрештәренә килтерергә мөмкин. Ниндәй ҙә булһа матдәнең етешмәүе тиҙ арыуға, ә был үҙ сиратында хәтерҙең насар булыуына килтерә. Шул уҡ ваҡытта белгестәр тәмле һәм файҙалы ашамлыҡтар ашау аҡылдың үҫеүенә килтерә, тип тә билдәләй. Һынамыш һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, ҡайһы бер аҙыҡ-түлек төрҙәре интеллектуаль һәләттәрҙе бер-нисә тапҡырға күтәрергә һәләтле икән.

Кешенең ҡулына ҡәләм алыр йәки сәхнәгә сығыр алдынан тәмле итеп ашау телеген белгестәр түбәндәгесә аңлата: баш эше менән шөғөлләнгән кешеләргә мейе эшмәкәрлеген ҡәнәғәтләндереүсе аҙыҡ-түлек ашау мөһим. Ундай аҙыҡ-түлектәр рәтенә, беренсе сиратта, мүк еләге, ҡара көртмәле, финик, йөҙөм, кәбеҫтә, сөгөлдөр, шпинат, кишер инә. Шулай уҡ балыҡ, тауыҡ ите ашау һәм һөт, сәй, кофе эсеү ҙә файҙалы. Бар донъяға билдәле кешеләрҙең аҙыҡ-түлек рационына нәҡ ошо ашамлыҡтар ингән икән.

Мәҫәлән, **Леонардо да Винчи** составында кишер, сельдерей, бәрәңге, цуккини, кәбеҫтә, помидор, пармезан сыры булған ашты яратып ашаған.

**Федор Достоевский** иһә сәтләүек ярырға яратҡан. Шулай уҡ ул йыш ҡына тауыҡ ите ашаған һәм йылы һөт эскән. Кәйефе күтәренке ваҡытта языусы сыр, апельсин, лимон, икра һәм француз гәрсисе, ә күңеле төшкәндә һурпа эскән. Тағы ла ул сәй һәм вино яратҡан.

Ит ашамаған **Лев Толстой** төшкө ашҡа, гәҙәттә, һыуыҡ сөгөлдөр ашы һәм итһеҙ щи, ә кискелеккә макарон, йәшелсә-емеш ашаған. Баллы икмәкте һолонан эшләнгән кисель менән ашарға яратҡан. Ләкин яҙыусының иң яратҡан аҙығы - ул ҡыяр булған.

Бөйөк шағир **Александр Пушкин** да тәмле итеп ашарға яратҡан. Уның яратҡан аш-һыуҙары исәбендә быҡтырылған бәрәңге, ебетелгән алма һәм шпинат, ҡуҙғалаҡ һәм йәш кесерткән япраҡтарынан, йомортҡа, шпинаттан эшләнгән котлеттан торған щи булған. Шулай уҡ ул аҡ крыжовник ҡайнатмаһын да үҙ иткән.

КӨНҺҮҘӘК



**Быға ышаныуы ла ҡыйын, әлбиттә, ләкин "Башинформ" һәм "Республика Башкортостан" гәзите сайттарының Башҡортостан буйынса Дәүләт автоинспекцияһы мәғлүмәттәренә һылтанып, 26 сентябрҙә тәүлек эсендә республика юлдарында 1500 юл-транспорт ҡағиҙәләрен боҙоу факты теркәлеүе һәм 62 иҫерек водителдең тотолоуы хаҡындағы хәбәрен аҡыл ҡабул итмәй.**

# ТӘҮЛЕК ЭСЕНДӘ - КҮПМЕ ИҪЕРЕК!

Ведомство етәксеһе Владимир Севастьяновтың, быйылғы 8 ай эсендә республикала һәм Өфөлә яһалған юл-транспорт ваҡиғалары ауыр әҙемтәләре менән айырылып тора, тигән һүҙҙәренә лә уйланырмай ҡалмай. Уның әйтеүенсә, Башҡортостанда барған әлеге "Хәүефһеҙ юл" иҫкәртеү рейды мәлендә тағы ла 49 кеше руль артына транспорт йөрөтөүгә хоҡуғы булмаған килеш ултырһа, 16 кешенең билән алда водитель таныҡлығынан мәхрүм ителеүенә ҡарамаҫтан, бер ни булмағандай машинала йөрөгән дауам итеүе мәғлүм була. Ә бына Өфө ҡалаһы буйынса шул уҡ тәүлек эсендә 476 юл-транспорт ҡағиҙәһен боҙоу осрағы теркәлһә, 6 водителдең алкоголь тәьҫирендә булыуы асыҡлана.

Әҙме был, күпме? Был һорауҙың, ғөмүмән, булыуы ла мөмкин түгел, сөнки был тик законды һанлаған, аңлы һәм тәрбиәле йәмғиәт өсөн генә хас-тыр. Ә беҙҙәгесә, ҡыҙмаса хәлдә автомобилгә ултырып алып, кемдәрҙеңдер ғүмерен ҡыйырға, ғәрип яһарға йә үҙ башына етергә сығып китеү аҡылһыҙлыҡ ҡына түгел, вәхшилектер ҙә ул. Был турала күп яҙыла, автоинспекция даими рәүештә рейдтарға сығып, юл ҡағиҙәләрен боҙоусыларға ҡарата яза саралары күреп тора, шуға ҡарамаҫтан, нимә этәрә кешене аңлы рәүештә енәйәт аҙымына баҫырға?

Белгестәр раҫлауынса, илебеҙ юлдарында асыулы, үсле, аҡылға "һайыраҡ" водителдәр һаны артҡандан-арта бара икән. Был - хәүефле симптом. Психологтар иһә күптән инде үҙ гәмәлиәттәрендә "автохам" тигән төшөнсә-диагноз менән файҙалана. Был ҡушамат айырыуса юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен аңлы һәм яуыз рәүештә боҙоусыларға ҡарата әйтелә. Ошо холоҡтары менән улар юл хәрәкәтенең башҡа ҡатнашсылары һаулығы һәм нервылары иҫәбенә мин-минлектәрен раҫларға маташа, ти психологтар. Ябай һүҙҙәр менән тураһын әйткәндә, меҫкенлек булып сыға түгелме был? Үҙен башҡа кешеләрҙә: эш коллективында, ғаиләһендә һәм башҡа мөхиттә раҫлай алмаған әҙәм ошондай юл менән эсендә йыйылған агрессияһын сығара. Юлда быңдай әҙәмдәр әллә ҡайҙан танылып тора: улар туҡтауһыҙ бер юл һыҙатынан икенсеһенә күсә, дөйөм хәрәкәттән шәберәк тиҙлеккә һала, билдәләрҙе һанға һуҡмай һ.б. Психологтар әйтмешләй, автохамдар быңдай ҡылыҡтары менән үҙ баһаларын күтәрергә, үҙ алдына ҡоролған "ҡыуышыу"ҙа, йәнһе лә, еңеүсе булып күренергә теләй. Тап шуға күрә лә улар башҡа водителдәрҙең дә ҡуҙғыуын, яуап реакцияһын көтә. Ғәҙәттә улар ҡарар ҡуҙға ябайыраҡ, ҡаршылашыуы көтөлмәгән, баҫалҡы кешеләрҙе һайлай, ти Fresh Auto автосалондар селтәре директоры Денис Мигаль. Быңдай осраҡта, әлбиттә, автохам менән бәйләнеп тормау хәйерле.

Психотерапевт Андрей Смирнов әйтмешләй, тәжрибәле водителдәр араһында яҡшы таныш өс "Д": "Дай дорогу дураку!" ҡағиҙәһен ҡулланырға ҡала, сөнки күрәләтә конфликтҡа барған әҙәмдең нервылары ҡаҡшаған йә ул алкоголь, наркотик тәьҫирендә булыуы бик ихтимал. Ә ундайҙарҙан теләһә ниндәй хәүеф көтөргә була. Мәҫәлән, шундай зарарлы матдәләр тәьҫирендә булған Евгений Лихачев (исеменә күрә есеме, тигәндәй, хатта фамилияһы ла был әҙәмдең кем

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

## *Һеҙ ниндәй китаптарға өҫтөнлөк бирәһегеҙ, улар Өфөнөң Ленин урамындағы "Китап" магазинында бармы?*

***Гөлдәр АҠСУЛПАНОВА, "Тенгри" турагентлығы менеджеры:*** Һуңғы осорҙа динебеҙгә ҡағылышлы китаптар ҡыҙыҡһындыра башланы. Мөхәммәт саллаһуғәләйһис-сәләм бәйғәмбәребеҙҙең, хәлифтәрҙең тормошо хаҡында китаптарҙы бик ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Бигерәк тә башҡортса яҙылғандарына өҫтөнлөк бирәм. Күп осраҡта рус телендә аралашырға тура килә, шуға тел байлығым кәмемәһен, яңы һүҙҙәр белер өсөн тап башҡортса дини китаптар уҡыйым да инде.

Үҙем туризм өлкәһендә эшләгәнлектән, уҡыған күпселек китаптарым шуға ҡағылышлы. Иң яратҡаным - С. Синенконың "Неспешные прогулки по Уфе" китабы. Ул ваҡытта БДУ-ның Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетында уҡығанда уҡытыусым Әхмәтшина Алла Салауат ҡыҙы тәҡдим иткәйне миңә уны. Әле яңы эшләй башлаған ваҡытта ҡалабыҙ буйлап үткәргән тәүге экскурсияларым тап ошо китапҡа таянып ойошторолғайны. Хәҙер мин уны кибеттәрҙә осратҡаным юҡ. Унан башҡа өҫтәлемдә, әлбиттә, республикабыҙҙың хозур тәбиғәтен һүрәтләгән альбомдар, путеводителдәр һәр саҡ ята. Уларҙың күпселеге тап "Китап" магазинында алынған да инде. Яңылары сығыу менән дә тиҙерәк килеп ҡарарға, ала һалырға тырышам.

Заман талабы микән, белмәйем, әммә һуңғы йылдарҙа йышыраҡ электрон китаптарға мөрәжәғәт итергә тура килә. Тик күңелем тап ҡағыҙ китаптарға бәйләнгән. Уларҙың һәр битен асып, ентекләп, ҡәләм менән төртөп уҡып, киләсәктә туристарға һөйләй алырлыҡ ҡыҙыҡлы урындарын билдәләп ҡуйыу үҙе бер кинәнес бит ул. Башҡортостанға төрлө төбәктәрҙән килгән, Калининградтан алып, Камчатҡаға тиклем күп ерҙәрҙе үткән, уҡымышлы туристар килә, уларға тыуған еребеҙҙе лайыҡлы кимәлдә күрһәтер өсөн хатта цитаталарҙы махсус ятлап ала торғайным. Беҙҙең диплом эше яҙған ваҡыт пандемия осорона тап килде, хатта шул ваҡытта ЮНЕСКО китаптарын ҡулыма тотоп ҡарап эшләр өсөн генә Стәрлетамаҡ районының "Китап" нәшриәтенә килеп, инглиз, ҡытай телендәге китаптарҙы алып йөрөнөм.

Мин уҡыған күпселек әҙәби башҡорт китаптары халҡыбыҙҙың бик ҡыҙғаныс тарихын сағылдыралар, шуға күрә лә мин уларҙы ҡабатлап уҡырға баҙнат итмәйем, күңелемә ауыр.

**Айһылыу ДАУЫТОВА яҙып алды.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республиканың сауҙа һәм хеҙмәт министры Азат Аҫҡаров белдереүенсә, Башҡортостанда 19 меңдән ашыу кеше "Һөт кухняһы" аша һөт ризыҡтары ала. Бөгөнгө көндә 135 таратыу пункты, шул иҫәптән "Һөт кухняһы"ның үҙенең 63 пункты, дарыуханалар эргәһендә 7 пункт эшләй. Балалар өсөн тәғәйенләнгән һөт ризыҡтарын 65 ауылға йөрөп тараталар. Бынан тыш, хеҙмәт күрһәтеү сифатын яҡшыртыу маҡсатында 10 пункт сауҙа үҙәктәренә күсерелгән.

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә Өҫтәл теннисы үҙәге асылды. Башҡортостанда өҫтәл теннисы 1928 йылдан алып үҫешә, әле был спорт төрө менән 25 мең кеше шөғөлләнә. 1990 йылдан алып республика Рәсәйҙең 11 спорт мастеры, 400-ҙән ашыу спорт мастерлығына кандидат, төрлө категориялағы 12 мең спортсы әҙерләнгән. Республикабыҙ командаһы Рәсәйҙә иң яҡшы унау иҫәбенә инде - 2022 һәм 2024 йылдарҙа Рәсәй чемпионатында өсөнсө, ә 2022 йылда Рәсәй кубогында кәмеш миҙал яулап, башҡорт өҫтәл теннисы тарихында рекорд ҡуйҙы.

✓Иглин районының Орондо ауылында фельдшер-акушерлыҡ пункты эшләй башланы. Был хаҡта Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр иттеләр. Ул 260-тан ашыу кеше йәшәгән Орондо, Белорет һәм Резвов ауылдары халҡын хеҙмәтләндерә. Ошо көндәрҙә яңы ФАП Мәләүез районының Бәләкәй Шәрип ауылында ла асылды. Ул ауылда йәшәгән 183 кешегә тәүге медицина-санитар ярҙамы күрһәтәсәк.

✓Республиканың транспорт министры Любовь Минакова хәбәр итеүенсә, йыл башынан Башҡортостанда дөйөм оҙонлоғо 150 саҡрымлыҡ 56 республика һәм муниципаль-ара юл участкағы ремонтланған. Ремонт миҙгеле аҙағына тиклем тағы 350 саҡрым юлды тәртипкә килтереү ҡуҙаллана. Бынан тыш, төҙөүселәр 31 күперҙе ремонтлай. 12 объекты йыл аҙағына тиклем нормати хәлгә килтерергә планлаштыралар.

✓Уҙған туғыҙ айҙа республиканың автомобиль юлдарында яңы 129 юл буйы хеҙмәтләндереү объекты сафҡа ингән. Инвестицияларҙың дөйөм күләме 1,8 миллиард һумдан ашыу тәшкил иткән. 330 миллион һумдан күберәк суммаға 147 объект яңыртылған. Был хаҡта район һәм ҡала хакимиәттәре башлыҡтары һәм ведомство етәкселәре ҡатнашлығындағы кәңәшмәлә республика Премьер-министры Андрей Назаров хәбәр итте.

✓Кушнаренко районында 1,3 саҡрым арауыҡта Иҫке Тукмаҡлы - Мәмәк юлы ремонтланды. Республиканың Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Шәрип ауылы янында асфальт япмаһы яңыртылған, юл ситтәре нығытылған, юлға тамғалар һалынған. Иҫке Тукмаҡлы - Мәмәк юлынан халыҡ Р-240 трассаһы аша М-12 "Көнсығыш" федераль трассаһына сығa ала.

✓ ***Европала штраф балдары системаһы ҡулланыла. Уның буйынса юл ҡағиҙәһен боҙоуҙың һәр осрағы балл юғалтыуға сәбәпсе була һәм балдар һаны бөткәс, водитель транспорт йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм ителә.***



икәнлеген әйтеп тора) дуҫиштәре менән кәйеф-сафа ҡороп алғандан һуң, машинала елдереп ҡайтырға уйлай һәм 8 йәшлек малайҙы бәрҙереп китә, ләкин туҡтап, баланың хәлен белеүҙе лә кәрәк тапмай, юлын дауам итә. Өйөнә ҡайтып, кәйеф-сафаны дауам итеп ултырғанда, уның артынан полиция наряды килеп етә. Ауыр йәрәхәттәр алған бала дауаханаға оҙатыла. Уның һаулығына килтерелгән зыянды, өҫтәүенә эскән килеш рулгә ултырғанын һәм енәйәт урынынан ҡасып китеүен иҫәпкә алғанда, Өфө районы Нагаево ауылы автохамын ғәҙел хөкөм ҡарары көтә. Һәр хәлдә баланың әсәһе адвокат менән берлектә тикшереү органдарына ғариза бирергә йыйына. Тик шуныһы: тейешле язаһын алырмы ул әллә, һәр ваҡыттағыса, еңелсә ҡурҡыу менән ҡотолормо? Ҡайһы берәүҙәрҙең хөкөм ҡарарынан зыян күреүсегә аҡса түләп тә ҡотолоуы билдәле. Ә бит ул зыяны өсөн дә түләргә, хөкөм язаһын да алырға тейеш! Юғиһә язанан еңел ҡотолған енәйәтсе бындай "батырлыҡ"ты тағы һәм тағы ла ҡабатлауы мөмкин.

Дәүләт автоинспекцияһында юл-хәрәкәт ҡағиҙәләрен яуыз һәм даими рәүештә боҙоусыларҙы махсус контролдә тоталар тотоуын, ләкин еңелсә яза саралары һөҙөмтә бирмәй. Хөкөм ҡарары, ғәҙәттә, юл-транспорт фажиғәһендә зыян күреүсе, йә күреүселәрҙең үлем осраҡтары менән тамамланған сағында ғына бойомға ашырыла. Мәҫәлән, Өфөнөң Сипайлово биҫтәһендә "Башватотранс"тың "НефАЗ" пассажирҙар автобусы водителе ғәйебе менән медицина учреждениеһының "УАЗ" махсус транспорты ауҙарыла һәм уның водителе менән бер хеҙмәткәр һәләк була. Бәхеткә, "НефАЗ"дың пассажирҙары булмай, уның ҡарауы, 52 йәшлек водитель Альберт Ҡарамышев иҫерек булып сыға, ләкин ул үҙе бер ниндәй зыян күрмәй. Судта ул ғәйебен таный һәм һәләк булған кешеләрҙең туғандарына 100-әр мең аҡса түләй. Ә һаҡ аҫтына ул судҡа тиклем үк алынған була. Әлеге көндә БР Прокуратураһы эскән килеш юл-транспорт фажиғәһендә ике кешенең үлеменә сәбәпсе водителде ғәйепләү документтарын Өфөнөң Октябрь район судына тапшырҙы. Ниндәй яза ҡаралыр - әлегә билдәһеҙ...

19 августа Әлшәй районында водитель таныҡлығынан мәхрүм ителгән иҫерек әҙәм 12 йәшлек ҡыҙ баланы бәрҙереп үлтергән. 16 сентябрҙә Салауат ҡалаһында 13 йәшлек иҫерек үҫмер "Лексус" машинаһында автоинспекция хеҙмәткәрҙәренән ҡасырға маташҡанында ҡыуып тотола. 28 сентябрҙә Благовещен районы автоинспекторҙары транспорт йөрөтөүгә документы булмаған тағы бер иҫеректе - 17 йәшлек үҫмерҙе туҡтатҡан...

***Бындай ғибрәт хәлдәрҙе тағы ла оҙаҡ бәйән итергә булыр ине. Шуныһы хәүефкә һала: иҫерек водителдәр сафы "йәшәрә" бара түгелме? Был үҫмерҙәр менән бергә уларҙың ата-әсәләрен дә яуапҡа тарттырыу кәрәктер, бәлки?***

Күпселек водителдәр араһында юл-транспорт ҡағиҙәләрен бөтөн осраҡтарҙа ла ҡәтғи һаҡлау мотлаҡ түгел, тип ҡараусылар бар. Нисек итеп ана шундайҙарҙың аңын үҙгәртергә, тип кәңәшләшә белгестәр. Был һөйләшеүҙә "Рәсәйҙе үҫтереү буйынса 20 идея" проекты авторы Дмитрий Давыдов та ҡатнаша. Уның фекеренсә, юлдарҙа үлем осраҡтарын кәметеүгә өлгәшкән сит илдәр тәжрибәһенән файҙаланыу кәрәк. Мәҫәлән, Европа транспорт хәүефһеҙлеге советы тарафынан 2012 йылдан бирле штраф балдары системаһы ҡулланыла. Уның буйынса юл ҡағиҙәһен боҙоуҙың һәр осрағы балл юғалтыуға сәбәпсе була һәм балдар һаны бөткәс, водитель транспорт йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм ителә.

Испанияла, мәҫәлән, ошо система эшләй башлағандан һуң юлдарҙа үлем осраҡтары дүрт тапҡырға кәмегән. Бында тәжрибәле водителдәргә - 12, ә өс йылдан кәмерәк стажлыларға һәм транспорт йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм ителеү ваҡытын үтәп, ҡайтанан рулгә ултырғандар өсөн 8 балл бирелә. Ҡағиҙәне боҙоу дәрәжәһенә бәйле, водитель штраф түләргә йәки шуға өҫтәп, балл һанын да юғалтырға мөмкин. Ә инде балл һаны бөтһә, водитель лицензияһынан күпмелер ваҡытҡа ҡолаҡ ҡаға.

Сағыштырып ҡарағанда, был системаның беҙҙәге тәртиптәрҙән әллә ни айырмаһы ла юҡ кеүек. Тик бына сит ил граждандарының законға ҡарата ихтирамлы мөнәсәбәте менән айырылып тороуы бәхәсһеҙ. Өҫтәүенә, юлдарҙа ғына түгел, дөйөм йәшәйеш мөхиттәрендә лә улар әҙәп-тәртип һәм башҡаларға ҡарата сабырлыҡ күрһәтеү, түҙемлек - толерантлыҡ йәһәтенән дә өҫтөнлөккә эйә тип уйларға урын бар.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# ЯРАШҺАҢ ДА...

## балтаң билеңдә булһын

**Рәсәй менән АҠШ ҡоралһыҙланыу буйынса килешеүҙе һәм бигерәк тә биологик ҡоралға контроллек итеүҙе көйләргә тырышыуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер төп мәсьәләләрҙә етди ҡаршылыҡтар ҡалып килә. Рәсәйҙең БМО-лағы вәкиле Геннадий Гатилов билдәләүенсә, был өлкәлә бәйләнештәрҙе тергеҙеүгә АҠШ-тағы сәйәси тотороҡһоҙлоҡ шарттары ҡамасаулай. НАТО Рәсәй сиктәренә яҡын территорияла йыл һайын берәй илдә үткәрелә торған күнекмәләрен дауам итә һәм ул ошо ай ахырынаса дауам итәсәк.**

Был юлы күнекмәлә Төньяҡ Атлантика блогына ингән 14 илдән разведкалаусы һәм яғыулыҡ ҡойоусы хәрби самолеттар, күнекмә маҡсатындағы В-61 сериялы ядро авиация бомбалары файҙаланыла. НАТО-нан белдереүҙәренсә, күнекмәләр ваҡытында ысын хәрби ҡорал ҡулланылмай. Уның ҡарауы, Украинаға Рәсәйҙең эске территорияларын утҡа тотоу маҡсатында Американың Томагавк ракеталары ебәреү ихтималлығы Мәскәүҙә ҙур борсолоу тыуҙыра. Был ҡорал ярайһы үҙенсәлекле булыуы менән айырылып тора, уның ядролы ла һәм ядроһыҙ ҙа булыуы мөмкин. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер эксперттар фекеренсә, Томагавк фронттағы хәлдәрҙе үҙгәртә алмаясаҡ, ләкин Рәсәйгә ҡарата мөнәсәбәттәрҙә төрлө яҡлап көсөргәнеш тыуҙырыла. ***Бындай провокацияларға ҡаршы Рәсәй Президенты НАТО-ны һағайырға мәжбүр итеүсе яңы ҡоралды уңышлы һынауҙар барыуы хаҡында һөйләне һәм тиҙҙән уны күрһәтәсәктәрен әйтте. Эксперттар фаразлауынса, Рәсәйҙең яңы ҡоралы "Орешник"тан күпкә ҡеүәтлерәк булмаҡсы.***

АҠШ президенты Дональд Трамп та тыныс һөйләшеүҙәр яҡлы, ләкин Украина менән Евросоюз быны ишетергә теләмәй. Әйткәндәй, тыныслыҡ буйынса Нобель премияһы комитеты Дональд Трампты премияһыҙ ҡалдырһа ла, Аҡ йорт хужаһы кеше ғүмерҙәрен ҡотҡарыу һәм тыныслыҡ хаҡына эшмәкәрлеген дауам итәсәге хаҡында белдерә. Бынан алдараҡ әйтеүенсә, ул үҙенең ете ай президентлыҡ осоронда ете хәрби конфликтты көйләүгә өлгәшкән. ***Әле иһә Газа секторында ла көсөргәнешлекте кәметеүгә күп көс һалыуы хаҡында белдерә. Ысынлап та, әлеге ваҡытта һуғыш суҡмары Израиль тарафынан ер менән тигеҙләнгән Газа секторы биләмәһендә атыш һәм ҡолаҡ тондорғос шартлауҙар тынды. Оҙаҡҡамы был, әллә Израиль башлығының сираттағы яуыз хәйләһеме - быны әлегә бер кем дә әйтә алмай.*** Ике яҡ та үҙ-ара тотҡондар менән алмашты. Израиль менән Палестинаның "ХАМАС" сәйәси-дини хәрәкәте араһында был һуғыш ике йылдан ашыу барҙы. Израиль утынан һәләк булған ҡорбандар иҫәбе рәсми һандарҙа 65 мең тип ҡаралһа ла, ысынында 680 меңләп кеше тәшкил итә, тиҙәр. Шуларҙың күпселеге ҡатын-ҡыҙ һәм балалар. "ХАМАС" шулай ҙа Израилгә ышанып, һиҙгерлекте юғалтырға һәм ҡорал һалырға ашыҡмай, сөнки Израиль премьерының бынан алдағы килешеүҙе тупаҫ боҙоуы бөтөн донъяға мәғлүм. "Дошман менән дуҫ булһаң, балтаң билеңдә булһың" тигән халыҡ аҡылын иҫкә төшөрә был. Әлеге көндә Палестина халҡы бик ауыр хәлдә, тирә-яҡта фәҡәт емереклек, бында аслыҡ хөкөм һөрә, эсәр һыу юҡ. РФ Хәүефһеҙлек советы рәйесе урынбаҫары Дмитрий Медведев белдереүенсә, Палестина дәүләте төҙөмәй тороп, бында хәл үҙгәрмәйәсәк...

***Мәғлүм булыуынса, Тажикстандың баш ҡалаһы Дүшәмбелә булып үткән Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһе (БДБ) илдәре етәкселәренең саммитын үткән аҙналағы төп ваҡиғаларҙың береһе тип әйтергә кәрәк.*** Унда ҡатнашҡан Рәсәй, Әзербайжан, Әрмәнстан, Беларусь, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Тажикстан, Төркмәнстан һәм Үзбәкстан президенттары бер нисә документҡа, шул иҫәптән, 2030 йылға тиклем хәрби хеҙмәттәшлек концепцияһы хаҡында ҡарарға ҡул ҡуйҙы. Бөгөнгө көн талаптарына ярашлы, Берләшмә яңыса - "БДБ плюс" форматында эш итеүҙе булдырыу хаҡында ҡарарға килде. Саммиттағы осрашыуҙар барышында Владимир Путин Әзербайжан президенты Илһам Алиев менән һөйләште. Рәсәй етәксеһе 2024 йылдың декабрендә "Әзербайжан авиалиниялары" пассажирҙар самолетының Һауа һөжүменә ҡаршы оборона ракеталары һыныҡтары тейеүҙән һәләкәткә осрау хәлен һөйләне һәм был йәһәттән ғәйеплеләр ғәмәленә хоҡуҡи баһа бирергә, ә фажиғә ҡорбандары өсөн компенсация түләргә вәғәҙәләне. Алиев үҙ сиратында Путинға рәхмәтен белдереп, Мәскәү менән Бакуҙың һәләкәт сәбәптәрен тикшереү буйынса үҙ-ара бәйләнештә булыуын әйтте. Саммит барышында Рәсәй Президенты БДБ илдәрен терроризм, экстремизм, коррупция менән көрәштә үҙ-ара хеҙмәттәшлекте көсәйтергә һәм гуманитар бәйләнештәрҙе үҫтерергә саҡырҙы. Ҡул ҡуйылған документтар иҫәбендә "2026 йылда БДБ-ла рәйеслек итеү", "БДБ-ның генераль секретары", "БДБ дәүләттәре башлыҡтары советының сираттағы ултырышын үткәреү" хаҡында һәм Тажикстан менән хеҙмәт миграцияһын үҫтереү буйынса килешеүҙәр бар. Владимир Путин Берләшмә илдәре етәкселәрен 9 декабргә формаль булмаған осрашыуға Мәскәүгә саҡырҙы. БДБ дәүләттәре саммиты киләһе йыл 9 октябрҙә Төркмәнстанда үтәсәк.

Үткән аҙна хәбәрҙәренән: 12 октябрҙә Париж үҙәгендә президент Эммануэль Макрондың отставкаға китеүен, шулай уҡ Францияның Евросоюз менән НАТО-нан сығыуын талап итеп, күп һанлы халыҡ протест демонстрацияһына сыҡты. Унда "Макрон, властан кит!", "ЕС-тан сығыу өсөн!" тигән һәм башҡа плакаттар күтәрелгән. Мәғлүмәт саралары, ысынлап та, Макрондың Францияға контроллекте юғалта барыуын билдәләй. Республика фәҡәт кредит иҫәбенә көн күрә. Французлар президенттарын асыҡтан-асыҡ мыҫҡыллай, көлә, уның портретын Париж бульварҙары буйындағы эт йөрөткәндән ятып ҡалған тиҙәк өҫтөнә ҡаҙап ҡуя: был, тимәк, француз властарының "һаҫый" башлауын аңлата була. "Патриоттар" партияһы лидеры Флориан Филиппо һөйләүенсә, илдә тәртипһеҙлек хөкөм һөрә. Франция НАТО-нан да, Евросоюздан да сығырға тейеш, юғиһә, киләсәктә беҙҙе цензура, һуғыш һәм фәҡирлек һәләкәте көтә, ти сәйәсмән.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Республика биләмәһендә юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы теркәгән 1 877 автомат комплексы ҡуйылған. Шуларҙың 384-е - Өфө ҡалаһы биләмәһендә. Уларҙың һаны буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә өсөнсө урынды биләй. Белгестәр автомат режимында теркәргә мөмкин булған ҡағиҙә боҙоуҙар исемлеген киңәйтеү буйынса эш алып бара. Улар иҫәбенә хәүефһеҙлек ҡайышын таҡмау һәм рулдә кеҫә телефондарын ҡулланыу индерелгән. 159 комплексты яңыртыу күҙаллана.

✓Өфө шахматсыһы Урал Хәсәнов Ереванда шахмат композицияларын сисеү буйынса донъя Кубогында уңышҡа өлгәште. "Толпар" спорт клубының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, ул "Опен-турнир" еңеүселәр иҫәбенә ингән. Ике көнлөк көсөргәнешле көрәштән һуң Урал Хәсәнов, 72 мәрәй йыйып, бронза миҙал яулай. Турнирҙың киләһе этабы 25 октябрҙә Швейцарияның Берн ҡалаһында үтә.

✓Өфө йәмәғәт транспорты яңы ун берәмек троллейбус менән тулыланды. Республика Башлығы Радий Хәбиров уларҙың асҡыстарын водителдәргә тантаналы шарттарҙа тапшырҙы. "Горожанин" троллейбустары - Өфө трамвай-троллейбус заводы менән Белоруссияның Минск автозаводының берлектәге продукцияһы. Баш ҡалабыҙ урамдарында әле улар етштергән 34 троллейбус йөрөй. Яңы электр транспорты Өфөнөң көньяҡ һәм төньяҡ өлөштәрендәге машруттарҙы хеҙмәтләндерәсәк.

✓Өфөлә 19 октябргә тиклем Зәһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында Светлана Ғәли ҡыҙы Хәмиҙуллина иҫтәлегенә арналған I Халыҡ-ара пианистар конкурсы үтә. Башҡорт композиторҙары әҫәрҙәрен башҡарыу уның мотлаҡ шарттарының береһе булып тора. Конкурста балалар музыка мәктәптәре һәм сәнғәт мәктәптәре уҡыусылары, профессиональ белем биреү ойошмалары һәм юғары уҡыу йорттары студенттары, шулай уҡ бөтә йәштәге башҡарыусылар ҡатнаша. Конкурсҡа Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 40 ғариза килгән. Шулай уҡ Ҡаҙағстан Республикаһынан ҡатнашыусылар бар.

✓Өфөнән Анна Кулинич-Сорокина паралимпия еңел атлетикаһы буйынса донъя чемпионы исемен яуланы. Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Руслан Хәбибов үҙенең телеграм-каналында ҡыуаныслы яңылыҡ менән уртаҡлашты. Анна Кулинич-Сорокина Т12 категорияһында 400 метрлыҡ дистанцияла, Иран һәм Венесуэла еңел атлеттарын артта ҡалдырып, еңеүгә өлгәште, тип билдәләне ул.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

## ТУРИСТ ҺУҠМАҒЫ

# ИРӘМӘЛ

**Легендаларға бай Ирәмәл тауы Көньяҡ Урал түбәләре араһында бейеклеге буйынса икенсе урында тора. Ул Оло Ирәмәл (бейеклеге 1582 метр) һәм Кесе Ирәмәлде (1449 метр) берләштергән ике үрле массивтан тора. Араларында бер саҡрымға һуҙылған бейеклеге 1200 - 1250 метр булған билән ята. Оло Ирәмәл "Ирәмәл" милли паркы биләмәһен тәшкил итә, ә Кесе Ирәмәлгә аяҡ баҫыу тыйылған - ул ҡурсаулыҡ.**

Тауға күтәрелеп барышлый Урал ландшафтының төрләнеүенә шаһит булаһың. 600 метр бейеклеккә тиклем һуҡмаҡ ышыршы һәм аҡ ышыршы араһында үтә. Бер аҙ юғарыраҡта кәрле ағастар һәм киң яландар зонаһы башлана. Ул айлап таутундра биләмәһенә күсә, унда мүк, лишайник һәм тәпәш үҫемлектәр генә үҫә. Тау түбәһенә етә ялан-ғас билбау башлана, унда мүк менән ҡапланған таш һибелмәләренән (курумниктар) башҡа бер нәмә лә юҡ.

Ирәмәлдә һауа торошо үтә лә киҫкен. Һәр саҡ тиерлек көслө ел иҫә, ә ҡышҡыһын йыш ҡына буран була һәм күп ҡар яуа. Был ваҡытта тау түбәһенә күтәрелеүҙән тыйылыу яҡшыраҡ.

Ирәмәлгә артылыу маршруттары өс ауылдан башлана. Уларҙың береһе - Силәбе өлкәһенә ҡараған Төйләк ҡасабаһы. Ҡалған икеһе үҙебеҙҙең республика биләмәһенән Учалы ҡалаһы һәм шул уҡ исемле ауыл, Ирәмәлдән көнсығышта урынлашҡан Белорет районы Николаевка ауылы аша ята.

Николаевканы һайлаған сәйәхәтселәр Ирәмәлде генә түгел, ә Баштур, Баҡты түбәләрен дә күрә ала. Ауыл Белореттан 56 саҡрым алыҫлыҡта ята, ә унан Оло Ирәмәлгә тиклем - тағы 25 саҡрым. "Ирәмәл" милли паркына "УАЗ" машиналары йөрөтә. Әлбиттә, хаҡын да ала. Артабан тауға етергә 7 саҡрым ара ҡала. Уныһын инде йәйәүләргә кәрәк. Шәхси эшҡыуарҙар атта һыбай үтергә тәҡдим итеүҙәре лә ихтимал, әгәр мәленә тап килһәң.

Учалы аша сәйәхәт иң ҡатмарлыһы. Маршрут Кирәбе - Яңы Хөсәйен - Байнаҡал ауылдары аша ята һәм уның оҙонлоғо яҡынса 70 саҡрым тәшкил итә. Кирәбегә тиклем шоссе юл бар. Ауырлыҡ менән булһа ла, Яңы Хөсәйенгә лә үҙ транспортыңда барып етергә мөмкин, тик артабан махсус автомашинаға күсеп ултырыу хәйерле.

Байнаҡалдан (әйткәндәй, ул - ташланған ауыл, кеше йәшәмәй) Оло Ирәмәлгә - 18 саҡрым. Юл Әүәләк һырты аша үтә, унан Ирәмәлгә иҫ киткес күренеш асыла. Ҙур-ҙур һарыкташтарҙан хасил "Таш йылға" аша үтеү ҙә - ҙур бер мажара.

Яңы Хөсәйендә милли парктың контроль-үткәреү пункты урынлашҡан. Унан Байнаҡалға һуғылмаған маршруттан китергә лә мөмкин. Ул Ағиҙел йылғаһы инеше (7 км), халыҡ телендә "Шишмә" (9 км) һәм "Мөхәббәт бишеге" (14 км) тип аталған тукталыштар аша ята. Артабан 5-6 саҡрым йәйәүләргә кәрәк. Юл бик ҡатмарлы һәм ауыр.

Силәбе өлкәһенең Төйләк ауылына шәхси автомобилдә йәки туристар автобусында барып етергә мөмкин. Өфөнән юл күпселек ваҡытта М-5 "Урал" трассаһы буйлап үтә, артабан Йүрүҙәнгә боролорға, Мәсет ауылы эргәһенән үтергә, Йүрүҙән йылғаһы буйлап китергә кәрәк.

Төйләк ауылынан Оло Ирәмәлгә тиклем - 14, ә Кесе Ирәмәлгә - 15 саҡрым. Милли паркка туристарҙы "Буханка" (УАЗ-452) машинаһы ташый. Ул - 10-12 кеше һыйҙырышлы, сәғәт һайын йөрөй. Юл 30-40 минут ваҡытты ала.

Транспорт парктың контроль-үткәреү пунктына (КПП) тиклем бара. Курсаулыҡҡа инеү түләүле. Артабан Ирәмәлгә тиклем 5-6 саҡрым йәйәү атларға кәрәк. Дөйөм алғанда, Төйләк аша изге тауға менеү туристар өсөн иң еңеле һанала.

**Рәсүл БАЙГИЛДИН әҙерләне.**

## БЕЛЕМ УСАҒЫ

# НИГЕҘЕ НЫҠТЫҢ - КИЛӘСӘГЕ НЫҠ



**Мәғариф өлкәһендәге үҙгәрештәрҙе күҙәтеп барыусылар өсөн полилингваль мәктәптәр яңылыҡ түгел. Дөйөм урта белем биреүсе белем усаҡтарынан улар ни яғы менән айырыла, үҙенсәлектәре нимәлә, киләсәге бармы - ошо турала һәм башҡа һорауҙар менән 3-сө Сибай республика полилингваль күп профилле гимназия-интернатының уҡытыу эштәре буйынса директор урынбаҫары Әлфиә Марат ҡыҙы СОЛТАНОВАға мөрәжәғәт иттек:**

- Сибай гимназия-интернаты базаһында асылған полилингваль мәктәптә әле 5-7 кластарҙы тәшкил иткән алты синыфта 286 уҡыусы ошо яңы йүнәлеш буйынса белем ала. Тәүге статусыбыҙ буйынса интернатҡа Урал арьяғы уҡыусыларын йыя инек, хәҙер йүнәлешебеҙ үҙгәргәс, бөтә республика һәм башҡа төбәктәрҙән башҡорт балаларын уҡырға алабыҙ. Полилингваль мәктәп булғас, уҡытыу бер нисә телдә алып барыла. Башҡорт теленә, әлбиттә, иң ҙур иғтибар бүленә, кластан тыш дәрестәр ҡытай, немец, төрөк телдәрендә алып барыла. Төп дәрестәрҙән, балалар ял иткәндән һуң үткәрелгәс, уларға сит телдәрҙе үҙләштереү еңел бирелә. Етмәһә, гәҙәти дәрестәрҙән айырмалы рәүештә, сит тел уҡытыусылары белемде театрлаштырылған уйын формаһында ҡыҙыҡлы итеп бирәләр. Ҡытай теленән дәрестәрҙе филология фәндәре кандидаты Гөлшат Насибулла ҡыҙы Мөхәмәтйәнова алып бара, төрөк теленән ҡасандыр шул йүнәлештәге мәктәпте тамамлаған Әлиә Ғәли ҡыҙы Хәмитова уҡыта, немец һәм инглиз телдәренән уҡытҡан Рәйлә Хәлфетдин ҡыҙы Мәһәҙиева - беҙҙең мәктәптә электән эшләгән тәжрибәле уҡытыусы.

Полилингваль йүнәлештә уҡытыуҙың ыңғай яҡтары күп, һәҙәмтәләр ҙә бар: балалар бер телдән икенсе телгә бик еңел күсә беләләр. Әлеге көндә етенсе класта уҡыусыларыбыҙ ҡытай һәм төрөк телдәрен өйрәнә. 5А-ға - төрөк теле, 5Б-ға ҡытай теле тип бүлгәйнек, ата-әсәләр, ниңә беҙҙең балаларға тик ҡытай теле генә, беҙгә төрөк теле лә кәрәк, тип һорайҙар. Төрөк теле башҡорт теленә оҡшағас, әлбиттә, еңел бирелә, әммә балаларҙы ҡытай теле лә ҡыҙыҡһындыра. Бер нисә телде белеү, береһенән икенсеһенә тиҙ генә күсә белеү балаларға һәр яҡтан файҙалы, был һәләт уларға башҡа дәрестәрҙә лә ныҡ ярҙам итә. Полиглоттар булмыштары менән башҡаларҙан айырылып тора - быны беҙ күрәбеҙ, һиҙәбеҙ. Ундай уҡыусылар башҡа илдең телен генә өйрәнмәй, тарихын, мәҙәниәтен дә белеп үҫә, белеме киңерәк була. Бала икенсе телде ни тиклем иртәрәк өйрәнә башлаһа, шул тиклем файҙаһы күберәк була. Был йәһәттән беҙ тәжрибәле уҡытыусыларыбыҙҙан уңдыҡ һәм улар менән ғорурланабыҙ.

Әлбиттә, беҙҙә башҡорт теле иң мөһиме, кластан тыш дәрестәр менән бергә аҙнаһына алты сәғәт башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытабыҙ. Туған телебеҙҙе уҡыусыларыбыҙ бик ярата, әммә полилингваль йүнәлешкә күсеү уларға ҙур ынтылыш бирҙе. Быйыл, мәҫәлән, беҙгә 5-се класҡа уҡырға килергә теләүселәр һаны 150-гә етте! Ә беҙ тик ҡырҡ бала ғына ҡабул итәбеҙ. Әлбиттә, имтихан бирәләр, һәр береһе менән индивидуаль һөйләшеү була, башҡорт телен ниндәй кимәлдә белеүенә ҙур иғтибар бүләбеҙ, атай-әсәйҙәре менән айырым һөйләшәбеҙ. Шайморатов кластарына килгәндәрҙе физкультура уҡытыусылары махсус нормативтар буйынса һынап һайлай, инженер кластарына математиканы яҡшы белгәндәр дәғүә итә.

Яҡутстанға тәжрибә уртаҡлашырға барғайныҡ. Уларҙа туған телгә һәм инглиз теленә генә төп иғтибар бүленә. Уларҙың уҡыусылары имтихандарҙы ла тик яҡут телендә генә бирә. Унда тағы нимәгә иғтибар иттем: полилингваль мәктәптәрендә кесаҙна милли кейем көнө һанала, һәр класс дәрестәргә айырым төҫтәге милли кейемдә килә. Шул йоланы үҙебеҙҙең мәктәптә лә индерергә уйлайбыҙ. Атай-әсәйҙәр менән дә был темаға һөйләшеү үткәрҙек.

Осетияла булғанда тағы шуға иғтибар иттем: ундағы полилингваль мәктәптәрҙә, күп телдәрҙе өйрәнеү менән генә сикләнмәй, туған телде һаҡлап ҡалыу төп бурыс һанала, башҡа дөйөм белем биреү мәктәптәрендә лә аҙнаһына 4-5 осетин теле дәрестәре үткәрелә. Милли мәктәп программаһы менән уҡытҡас, ул принцип беҙҙә лә һаҡланып килә, кластан тыш сәғәттәрҙә рәсми башҡорт теле, тәрбиә һабаҡтары бирелә. Мәктәптә үткән төрлө саралар, физкультура, хеҙмәт, география дәрестәре тик башҡорт телендә үтә. Ата-әсәләр балаларын интернатыбыҙ булғанға ғына түгел, ә беҙҙә баланы төрлө яҡтан үҫтереү өсөн мөмкинлектәр булғанға алып килә.

Шуныһы ҡыҙыҡ: бөгөнгө көндә ҡала балалары, ауыл балалары менән сағыштырғанда, башҡортса яҡшыраҡ һөйләшә.

Бер ҡыйынлыҡ кисерәбеҙ: ул да булһа, 10-сы класҡа уҡыусылар йыйыу. Бындай хәл бер беҙҙә генә түгел, был проблема башҡа мәктәптәрҙә лә күҙәтелә.

Беҙҙә балаларҙы ҡыҙыҡһындырғандай башҡа бик күп шөғөлдәр ҙә бар. Мәҫәлән, мәктәп базаһында оҙаҡ йылдар дауамында Уҡсылар клубы эшләп килә. Унда шөғөлләнеүселәр Рәсәй кимәлендә үткән ярыштарҙа призлы урындар яулай. Ҡурай түңәрәгендә шөғөлләнеүселәр һаны йылдан-йыл арта бара, был түңәрәккә тотош кластары менән йөрөү ҙә ғәҙәти хәл. Пилотһыҙ осоусы аппараттар буйынса техник яҡтан базабыҙ ныҡ үҫешкән. Быйыл шайморатовсылар кластары өсөн ат спорты буйынса база булдыраҫаҡбыҙ.

Шулай ҙа, республикабыҙҙағы башҡа полилингваль мәктәптәр менән сағыштырғанда, туған телебеҙгә булған һөйөү беҙҙә иң көслөһөләр. Мәктәпкә юл аша ғына урынлашҡан Сибай институты менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ, уларҙың башҡорт филологияһы бүлеге студенттары беҙҙә практика үтә, беҙҙең уҡытыусылар юғары уҡыу йорто үткәргән фәнни конференцияларҙа, түңәрәк ҡорҙарҙа ҡатнаша. Интернатыбыҙҙы тамамлаған уҡыусылар йыл да Сибай институтының төрлө факультеттарына уҡырға инә. Башҡа полилингваль мәктәптәр менән һәр саҡ аралашып торабыҙ. Республика полилинваль мәктәптәренең VIII Республика "Уныш формулаһы" фестивале быйыл апрель айында беҙҙең мәктәптә үтте.

Киләһе йыл интернаттың 65 йыллығы була. Икенсе бинаға күсеп, полилингваль мәктәпкә үҙгәрһәк тә, 3-сө Сибай республика полилингваль күп профилле гимназия интернатының төп тамырҙары, тарихы, йолалары уның тәүге нигеҙенә бәйле. Был турала уҡытыусылар ҙа, уҡыусылар ҙа оноторға тейеш түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бөгөнгө юғары технологиялар осоронда боронғоға бәйле булыу - ура-мында машина тороп та, урманға ат егеп барыуға бәрәбәр. Мөмкинлектәр эргәңдә булып, күп яҡлап үҫешергә теләмәү - ялҡаулыҡ билдәһе генә түгел, сикле, бер яҡлы булыу ғәләмәтелер. Полилингваль мәктәптәренең асылыуы ла ана шул мөмкинлектәрҙе киңәйтә түгелме һуң?**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

✓ **Иван Нагойға килгәндә, уның исеме ысынлап та разряд кенәгәләрендә теркәлеп ҡалған. Әммә уның Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыуға ҡатнашлығы булыуы хаҡында рәсми документтар юҡ.**



ТАРИХИ ЙЫЛЪЯҘМА

# ӨС ЙЫЛҒА САТЫНДАҒЫ ҠАЛА,

## йәки Нисә йәш һиңә, Өфө?

**(Салауат Хәмиҙуллиндың видеофильмы буйынса)**



***Светлана Воробьева:*** Уникаль табылдыҡтарҙан быяла һауытты атап үтергә кәрәк, бәлки, ул сауҙа бәйләнештәренә дәлилдер, бәлки, уны Византия императорҙарының бүләк итеп биргән әйбере итеп тә ҡарарға булалыр. Быяла һауыттар Византиянан былай ғына сығарылмаған, тимәк, был быяла һауытты ла император бүләге итеп ҡарарға ерләк бар.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Классик ғәрәп географияһы унан иртәрәк хасил булған фарсы традицияларын үҙенә алған, ә һуңғылары Исламға тиклемге осорҙарҙа ла Волга йылғаһы бассейны, шул иҫәптән Көньяҡ Урал менән яҡшы таныш булған. Һуңынан Хорезм һәм Горган сауҙагәрҙәренең мәғлүмәттәре ғәрәп географы әл Иҙрисиҙең башҡорт ҡалалары тураһындағы яҙмаларына нигеҙ була.

***Фларит Сөнгәтов:*** Ҡаланың халыҡ-ара сауҙа үҙәгенә әүерелеүен асыҡ күрһәтеп торған табылдыҡтар бар. Беҙ "Өфө-II" ҡаласығының мәҙәни ҡатламдарында табылған артефакттарҙы күҙ уңында тотабыҙ. Улар иҫәбенә ситтән килтерелгән керамиканы индерергә була. Бындай табылдыҡтар артыҡ күп тә түгел, әммә уларҙы бер нисек тә урындағы халыҡ менән бәйләп булмай. Көньяҡ тарафтарҙа етештерелгән башҡа әйберҙәр ҙә бар. Шулай уҡ дөйә, ишәк, кулан (атҡа оҡшай бирган ишәк) һөйәктәре табылды. Был йорт хайуандары көньяҡтан килгән каруандарҙа йөк ташыу өсөн файҙаланылған.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Мәғәнәһе яғынан бик тәрән булған бер әйтем бар: "География - яҙмыш ул", уны Наполеон әйткән, имеш, тиҙәр. Ысынлап та, һәр бер илдең географик урыны һәм климатик шарттары менән уларҙың тарихы араһында ҡәтғи бәйләнеш бар. Халыҡтар тарихының, мәҙәниәтенең, эске торошоноң үҙенсәлектәрен географиянан эҙләү фарыҙ.

Көньяҡ Уралдың иң ҙур йылғалары - Ағиҙел һәм Яйыҡ (Урал) һыуҙарын Каспий диңгеҙенә илтә, ә һуңғыһын Иранға инә торған ҡапҡа итеп ҡарап була. Ирандың мәҙәни йоғонтоһо аҫтында башҡорттарҙың цивилизация йүнәлеше итеп Исламды һайлауы һис ғәжәп түгел, уларҙың күршеләре - Волга булғарҙары ла шул уҡ юлды һайлай.

Наполеондың алдараҡ килтерелгән афоризмы геополитик характерҙағы факттарҙы һүрәтләй: Волганың түбәнге ағы ерҙәрен, тимәк, Көнсығыш менән сауҙа итеү юлдарын контролдә тотҡан империялар - Хазар ҡағанаты, Алтын Урҙа, Мәскәү батшалығы - бер үк ваҡытта барса Волга бассейны халыҡтарын да контролдә тота. 1554 йылда Иван IV ғәскәрҙәре Әстерханды баҫып ала, шунан һуң бик киң территорияларҙы биләгән Нуғай урҙаһы хакимы, кенәз Исмаил, рус батшаһының суверенитетын танып, былай тип әйткән: " Әстерхан һәм Волга кем ҡулы аҫтында ҡала, бөтә Нуғай урҙаһы ла уныҡы була". Шуға күрә һуңғыһы составында наместничество статуснда торған Башҡортостан да, Нуғай бейенең ихтыярынан тыш, 1557 йылда Мәскәү менән туранан-тура мөнәсәбәттәр урынлаштырырға ҡарар итә. Өфөлә емертелгән беренсе православие ҡорамы - Троицк сиркәүе урынында 1956 йылда һалынған Дуҫлыҡ монументы ошо тарихи ваҡиға иҫтәлегенә арналған. Ошо обелискта күрһәтелгән датаны - 1557 йылды - Башҡортостандың Мәскәү батшалығы составына инеү фактын күрһәтеп тора тиҙәр. Ә ысынбарлыҡта был дата ярты быуаттан ашыу дауам иткән оҙайлы процестың башланған ваҡытын ғына күрһәтә. Башҡортостандың тарихи үҙәгендә, киң Өфө ярымутрауының көньяҡ ситендә рус ҡәлғәһенә нигеҙ һалыу ошо драматик процесста үтә мөһим роль уйнай...

Быуаттар уҙа. Күп нәмә онотола. Өфөнөң иртә тарихын яҡтыртҡан документтарҙың күбеһе юғалтылған инде. Шуға күрә, XIX быуаттың икенсе яртыһында, ҡалаға ҡасан нигеҙ һалыныу мәсьәләһе ҡуҙғатылғас, бер кем дә аныҡ ҡына яуап таба алмай, әммә был фактты Өфө берҙәйлеге уяныуының һөҙөмтәһе итеп ҡарарға кәрәк. Оҙаҡ ваҡыт дауамында Рычковтың хеҙмәттәре генә берҙән-бер мәғлүмәт сығанағы булып ҡала.

Беҙҙә ҡыҙыҡһындырған мәсьәлә буйынса Рычков шулай тип яҙған: "Ышаныслы сығанаҡтарға нигеҙләнеп, башҡорттар ошо ҡаланы төҙөтөү өсөн 7081 йылда, йәғни Христос тыуғандан һуң 1573 йылда үтенес (челобитье) белдергән... Ул Ағиҙел йылғаһы ағымының уң яғында төҙөлә...".

Күреүебеҙсә, текста аныҡ дата юҡ: башҡорттар ҡәлғә һалдырыу теләге менән генә сығыш яһаған, әммә уға шул уҡ йылдамы, әллә аҙағыраҡмы нигеҙ һалынған - был хаҡта мәғлүмәт бирелмәгән. Ә әлегә тиклем Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыныу датаһы - 1574 йыл, тип һанала, ул ҡайҙан алынғандыр, тик Рычков китабында ул хаҡта бер ни ҙә әйтелмәгән.

***Булат Азнабаев, тарих фәндәре докторы, Өфө фән һәм технологиялар университетындағы Тарих һәм дәүләт идаралығы институтының башҡорт халҡы тарихы буйынса фәнни-мәғрифәти үҙәге директоры:*** Был үтә ҡыҙыҡлы мәсьәлә, сөнки әлегә тиклем барыһы ла ошо дата менән килешә, әммә тәү сығанаҡтарҙа ул теркәлмәй ҡалған. Миңә ҡалһа, ошо дата тураһында бына ни тип әйтер инем: үҙенең бер отчетында Ырымбур экспедицияһы начальнигы Иван Кириллов, оло быуын Өфө кешеләре фекеренә таянып, ошо датаны атай. Әммә уның менән һөйләшкән Өфө кешеләренең дә фекере тик ниндәйҙер бер хәтирәләр менән генә бәйле булыуын оноторға ярамай. Уларҙың Өфөнө нигеҙләү хаҡында деп-дөрөҫ датаны белеүе икеле-микеле генә инде, бер генә лә документҡа һылтаныу юҡ бит.

***Рәмил Рәхимов, тарих фәндәре кандидаты, Өфө фән һәм технологиялар университетындағы Тарих һәм дәүләт идаралығы институтының Рәсәй тарихы, историография һәм сығанаҡтарҙы өйрәнеү кафедраһы мөдире:*** Тарихи сығанаҡтарға ғына һылтанып түгел, ә ошо ваҡытта барған ваҡиғалар логикаһын иҫәпкә алған осраҡта Өфөгә нигеҙ һалыныу датаһын шартлы тип әйтергә була.

***Салауат Хәмиҙуллин:*** Нисек кенә булмаһын, 1574 йыл әҙәбиәт биттәрендә Өфө тарихының башы, тип нарыҡланып, йыш ҡулланыла башлай. 1832 йылда Жуковский фамилиялы ниндәйҙер бер чиновник "Краткое обозрение достопамятных событий Оренбургского края" тигән документта ошолай тип яҙған: "1573 йыл. Башҡорттар үҙҙәренең сәнәғәтенең хәүефһеҙлеге һәм яһаҡ түләү унайлыраҡ булһын өсөн үҙҙәренең ерендә ҡала төҙөүҙе һорай. 1574 йыл. Начальник Иван Нагой Ағиҙел һәм Өфө йылғаларында ҡалаға нигеҙ һалды". Әле иҫкә алынған Иван Нагой тағы ла бер Өфө легендаһы булып ҡала.

***Булат Азнабаев:*** Иван Нагойға килгәндә, уның исеме ысынлап та разряд кенәгәләрендә теркәлеп ҡалған. Ул - тарихи фигура, дипломатик миссия менән Ҡырымға барыуы ла билдәле. Әммә уның Өфө ҡәлғәһенә нигеҙ һалыуға ҡатнашлығы булыуы хаҡында рәсми документтар юҡ. Күрәһең, уның исеме Ырымбур экспедицияһы отчеттарында урындағы халыҡ һөйләгәндәргә генә һылтанып теркәлгәндер.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әҙерләнә.**
**(Дауамы. Башы 37, 38, 40-сы һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Солоҡсолоҡ һәм умартасылыҡ, малсылыҡ һәм ҡошсолоҡ, ер эшкәртеү

Эш ваҡытында дөрөҫ ағас һапҡа ултыртылған һәм уның менән ағасты соҡоғандар. Йә дөрөҫҙөң үҙе менән соҡоғандар, йә уның һабына балта төйҙәһе менән һуҡҡандар. Ағаста уйым барлыҡҡа килгәс, уны бағау менән эшкәрткәндәр. Солоҡтоң эсен эшкәртеү өсөн йышҡы ҡулланылған. Ә ҡыуыштың өҫкө өлөшөн йышҡы менән шымартыу ҡыйын булғанлыҡтан, терпе менән таҙартҡандар.

Тейешле дәүмәлдәге (ғәҙәттә, диаметры - 34 сантиметр һәм бейеклеге ике метрға тиклем) ҡыуыш әҙер булғас, унда ике-өс тағарау беркетелгән һәм ауыҙы киңлеге 8 сантиметр булған ағас ҡапҡас менән ябылған.

Июлдең икенсе яртыһынан башҡорттар солоҡтарын ҡарай һәм бал ала башлаған. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙе менән махсус ҡында йөрөтөлгән бысаҡ, үрҙә әйтеп кителгән балта, бал өсөн батман, сыраҡ һәм күҙлек, шулай уҡ кирәм, ағас аяҡ алған. Кирәм ярҙамында ағасҡа менгәс, башҡорт ағас аяҡҡа ярҡа торған һәм сыраҡ яндырып, балдың күләмен ҡараған. Әгәр бал етерлек күләмдә булһа, ул уны ағастан яһалған балғалаҡ йәки бысаҡ менән ҡырҡып, батманға һалған. Батман иһә ялдан үрелгән арҡатау ярҙамында күтәртелгән. Уның бер осо батманға, икенсе осо ҡортсоноң биленә бәйләнгән. Әгәр бал аҙ булһа, бал алыуҙы һуңыраҡҡа ҡалдырғандар. Солоҡтарҙы ҡарау август урталарында тамамланған. Ҡышҡылыҡҡа, бал ҡорттары һыуыҡта туңып үлмәһен өсөн, солоҡ ауыҙы махсус ҡулайлама - ағас ботаҡтары йәки йүкә аҫтына ҡоро үлән һалынған сырпы менән нығытып ябылған.

Һалҡындарҙан тыш, башҡорттар солоҡтарын айыуҙарҙан да һаҡлаған. Бының өсөн солоҡ олоно билдәле бер бейеклектә йүкә менән уралған. Һөҙөмтәлә олон тайып торған һәм айыу ағасҡа менә алмаған. Солоҡто айыуҙан һаҡлауҙың икенсе ысулы шуға ҡайтып ҡала: билдәле бер бейеклектә ағас олоно осло баштары йәки ботаҡтары аҫҡа ҡарап торған ваҡ ағастар менән уратып бәйләнгән. Айыу ағасҡа менә башлағас, осло ботаҡтар уның юлын бүлгән һәм ул артабан юлын дауам итә алмаған. Шулай уҡ ҡайһы берҙә ағастың уртаһында таҙаҡ урынлаштырылған.

Урмандарҙа солоҡтарҙың төрлө ерҙә, берберенән бер нисә саҡырым алыҫлыҡта урынлашыуы башҡорттарға уларҙы һаҡлап тороу мөмкинлеген бирмәгән. Һөҙөмтәлә бал урлау осраҡтары ла күҙәтелгән. Был хәл-торош Башҡортостандың ҡайһы бер урындарында шундай ғәҙәт тыуыуға сәбәп булған: солоҡ балын йыйғанда күршеләрҙән йәки туғандарҙан бер нисә кеше шаһит рәүешендә ҡарап, умартасы үҙенең балын ғына йыямы икәнен тикшереп торған.

Урмандарҙы ҡырҡыу башҡорттарҙың солоҡтары кәмеүгә килтергән һәм улар умарталар ултырта башлаған. Документтар раҫлауынса, башҡорттар XVIII быуаттың беренсе сирегендә үк бал ҡорттарын аҫырай башлаһа,



умарталыҡ хужалығына улар шунда уҡ күсмәгән. Оҙаҡ ваҡыттар ағастарға урынлаштырылған умарталар солоҡто алмаштырған. XX быуат башында Кама алдында, Ағиҙел йылғаһы буйында башҡорттар ағастарға умарталар бәйләп ҡуйған. Уларҙы махсус сығыр (блок) ярҙамында күтәргәндәр (**һүрәт**).

**(Дауамы бар).**

***✓ Әсәләр балаларын яуға илап оҙатмаҫҡа, бетеү тағырға, икмәк телемен тешләтеп алып ҡалыуҙы һ.б. хәстәрләргә тейеш, тигән яҙылмаған ҡанундар күңелгә һеңгән.***

# ҺӘР БЕР ЯУГИР ӘСӘҺЕ...

## хәүеф-хәтәрһеҙ таңдарҙы көтә

**Ғалимә, филология фәндәре кандидаты, журналист Әнисә Муса ҡыҙы Муллағолованың фәнни-педагогик стажы - 26 йыл. Байтаҡ йылдар БДУ-ла башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетында уҡыта, Нефтекама филиалында гуманитар факультет деканы, башҡорт филологияһы һәм журналистика кафедраһы мөдире вазифалары ла иңенә һалына. Шуны ла өҫтәп әйтәйек, 12 йыл инде ул "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Юлдаш" каналында сығарылыш һәм фонотека бүлегенең өлкән мөхәррире булып эшләй. "Остаз", "Китап донъяһы", "Көтмәгәндә - уйламағанда", "Йәшәү йәме", "Мәскәү башҡорттары" тигән тапшырыуҙары эфирға сыҡты. "Ашҡаҙар" радиоһы тыңлаусыларына "Ижади портрет", "Беҙҙең донъя" тигән тапшырыуҙары аша таныш.**

**Шулай ҙа тормошондағы ҡырҡа үҙгәрештәр улы Нияз Муллағоловтың МХО-ға мобилизацияға эләгеүе менән бәйле. Беҙ, коллегалары, уның әсә буларaҡ рух ныҡлығына, киләсәккә яҡты өмөттәр менән йәшәүенә һоҡланабыҙ. Эске кисерештәрҙе, бәлки, асып бөтөп булмайҙыр. Бары әсә йөрәге тере усаҡ, ул тирә-йүнгә, башҡаларға яҡтылыҡ һибә. Беҙ бөгөн Әнисә Муса ҡыҙы менән үткән тормош юлына күҙ һалырбыҙ. Уйланырлыҡ та, һоҡланырлыҡ та мәлдәр менән тулы уның тормош юлы.**



**Бала - бауыр ите, тип әйткән халҡыбыҙ. Әнисә Муса ҡыҙы, һеҙҙең фекерҙе ишетке килә, бының шулай икәнен әсә ҡайһы мәлдә ныҡыраҡ аңлай башлай?**

- Кем нисектер, әммә миңә ҡалһа, йөрәк аҫтында сабый яралғанын белгәс тә, ул бауыр итемә әйләнде. Быуыны ҡатмаған йәш-елкенсәк түгел инем, 26 йәш тулғайны ул саҡта. Сибайҙа - педучилище, Өфөлә БДУ йылдары артта ҡалғайны. Хатта ки ике йыл мәктәптә эшләп, өҫ бөтәйтеп, шунан ғына ғаилә ҡорҙом. Баш баламдың донъяға тәүге ауазын һалыр көндө көттөм, ап-аҡ өмөттәргә сорналдым... 1990 йылдың яҙында Ниязым тыуҙы!

Ул йылда фенол ғәләмәте халыҡ күңелен өтөп алғайны. Был, айырыуса, йәш әсәләрҙең һаулығын хәүеф аҫтына ҡуйҙы. Сәй эсермен тимә, кран һыуы ағыулы. Күрше ҡатын йәш балаһын йыуындыра ла алмай ине. "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһынан минераль һыу ташып, сабыйын ҡойондорҙолар ул мәлдә. Мин, бына-бына тыуырға тейеш баламды, бауыр итемде фенол афәтенән һаҡлап, тыуған яҡтарыма юлландым. Өфөнән ауылға - 500 саҡрым самаһы, март бураны ҡотора ине. Ҡырҡ ғиллә менән ҡайтып етеп, Баймаҡ дауаханаһында улымды ҡулыма алдым. Һәр бер изге әсә кеүек (әсәләрҙең дә төрлөһө бар!), күҙ ҡараһындай һаҡлап-яҡлап үҫтерҙем.

Кисерештәр бик ауыр тип әйтеү - ул бер нәмә лә әйтмәүгә тиң! 2022 йылдың февралендә бер шаңҡыным...

.... Улым - юрист. 8 йыл әүәл Хәрби һауа көстәрендә армия хеҙмәтен үтеп ҡайтҡан егеттең, ил саҡырһа, боҫоп ҡалмаҫын, алға ташланасаҡ икәнен һиҙә инем. 22 сентябрҙә өлөшләтә мобилизация тураһында ишетеп, шаңҡыным. Һөнәремә ярашлы, сәйәсәтте ғүмер буйы күҙәтеп барам мин. Бала саҡтан "Аргументы и факты", "Известия" һ.б баҫмаларҙы уҡырға яраттым. Улым повестка күрһәткәс, бәғерем ҡат-ҡат теленде, өҙлөкһөҙ һыҡраны, ҡанһыраны, йәнем ярылғандай булды. Мөмкин булһа, улым урынына бер һүҙһеҙ үҙем китер инем унда, йәшәремде йәшәгәнмен бит инде. Ә баламдың яратҡан кәләше, алмалай ике балаһы бар. Әле генә яңы өйгә инделәр, гөрләтеп йәшәр урынға - полигон, окоп, блиндаж! Ниҙәр күререн Хоҙай ғына белә...

Аҡылың менән аңлайһың: илдең киләсәген һаҡларға кәрәк! Ә барыбер шул мәлдәге сараһыҙлыҡ алҡымыңдан ала, быуар йылан булып боғаҙыңды быуа. Әммә әсәләр балаларын яуға илап оҙатмаҫҡа, бетеү тағырға, икмәк телемен тешләтеп алып ҡалыуҙы һ.б. хәстәрләргә тейеш тигән яҙылмаған ҡанундар күңелгә һеңгән. Армияһы алдынан аҡ ҡорбан салғайным, алғараҡ китеп, шуны ла әйтәйем, тәүге шаңҡыуҙарым үткәс тә, нәҙер ҡорбанын үтәнем, әлбиттә. Хәрби комиссариатта әйткәндәренсә, йылы кейем, ике көнлөк ҡоро-һары ризыҡ төйнәп өлгөрөргә кәрәк. Кәрәктәр ифрат күбәйҙе. Йәш килен, ейәндәр, тағы бер балаң хаҡына барлы-юҡлы энергиянды йыйып, үҙеңдән көслөрәк булырға кәрәк! Һин - әсәй. Яуға китер балаң ныҡлы рухлы булһын тиһәң, күрһәт үҙең иң Ҡалтырандым, өнөм тығылды. Боғаҙымдан өс кенә һүҙ һығып сығара алдым: "Иҫән ҡайт, улыҡайым..."

27 сентябрь өс йыл булды аҡлы-ҡаралы хистәр дауылына. Аҡ: әлдә генә улымдың телефондан бәйләнешкә сығыр мөмкинлеге бар. Бөйөк Ватан, Афған һуғышынан ундай форсат булмағанын, хаттар ҙа насар йөрөгәнен беләбеҙ. Балаң тауышын ишетеү - бәхет! Отпускыға ҡайтып күренеүе - күңелдә оло тантана!

Ә аҡылдан яҙырлыҡ һоро-ҡара мәлдәрҙе әйтмәһәм дә һәр кем беләлер. Йырҙа йырлана ла ул: "Каждое расставание - маленькая смерть..." Юҡ, бәләкәй түгел! Балаһын ут эсенә оҙатыу - әсә өсөн әжәлдең үҙе! Донъяға ниңә тыуҙым, улымды ниңә тыуҙырҙым ғүмерен һаҡлай алмағас, тип уйлайһың... Бер әсә лә балаһын, күҙе ҡараһын, яу өсөн яралтмай. Бәхетле итеп күргеһе килә бит!

Сит яҡҡа эшкә йә сәйәхәткә ебәреү түгел был. Әлеге оҙатыу мәле - улыңдың тере тауышын ишетеү, йылы ҡулдарынан тотоу, сикәһенә ҡағылыу, ҡыҫып ҡосаҡлау, кеҫәһенә-рюкзагына бетеү, доғалыҡтар һалыу һ.б - аҙаҡҡыһы булырға мөмкин. Йәнең аҡтарыла, элек рух көсөн. Ғүмер буйы йәш быуынды шуға өйрәткәйнең бит! Ебеп төшөү яраған эш түгел. Бына шундай ҡырылмаһа ҡырҡ төрлө уйҙар солғанышында ҡалынды ул саҡта.

Оҙатыр сәғәт алдынан: "Улым, йәнемде-мейемде меңдәрсә ҡоҙғон суҡый һымаҡ, ни ҡылырға ла белмәйем", - тием... Ҡосаҡланы... Балаҡайымдың һәр күҙәнәген тоям, еңел түгел уға, ныҡ тулҡынлана:

- Әсәй, ошо ситуацияны ҡабул ит, - тағы тынлыҡ, шунан, - ғәфү ит мине, әсәй, - тине инрәп.

Ғәфү итерлек бер ғәйебе юҡ бит, ни өсөн улай ти икән?

Шунан ғына аңыма барып етә: был ғәфү үтенеү үткәндәргә ҡағылмай! Киләсәктә үҙе менән ниҙер була ҡалһа, шуның өсөн алдан ғәфү үтенә бит балаҡайым! Аяҡ аҫтымда ер убылғандай ине шул саҡта. Яраңа тоҙ һалына шул саҡтарҙа. Әммә сабыр булырға, яҡшыға юрарға, Аллаһы Тәғәләнең ҡурсыуына өмөт итергә ҡала...



***Улым повестка күрһәткәс, бәғерем ҡат-ҡат теленде, өҙлөкһөҙ һыҡраны, ҡанһыраны, йәнем ярылғандай булды. Мөмкин булһа, улым урынына бер һүҙһеҙ үҙем китер инем унда, йәшәремде йәшәгәнмен бит инде. Ә баламдың яратҡан кәләше, алмалай ике балаһы бар. Әле генә яңы өйгә инделәр, гөрләтеп йәшәр урынға - полигон, окоп, блиндаж! Ниҙәр күререн Хоҙай ғына белә... Аҡылың менән аңлайһың: илдең киләсәген һаҡларға кәрәк! Ә барыбер шул мәлдәге сараһыҙлыҡ алҡымыңдан ала, быуар йылан булып боғаҙыңды быуа.***

**Ғаилә ҡороу - үҙе ҙур яуаплылыҡ. Кешене ғаилә генә түгел, үҫкән-ураткан мөхите лә тәрбиәләй, тиҙәр...**

- Эйе, шулай ҙа ғаиләлә иң мөһим нәмәгә - Мөхәббәткә нигеҙ һалына. Тар мәғәнәһендә мөхәббәт - атай-әсәйеңә, барса башҡа яҡындарыңа, тыуған-үҫкән нигеҙеңә, һыу ингән йылға-күлеңә, бесән сапҡан ерҙәреңә. Киң мәғәнәһендә - илеңә, динеңә, Йыһанға... Ана шул ҡиммәттәрҙе һеңдерер мөхәббәтле мөхит булды улыма бала сағында ла, үҫкәс тә. Атай-әсәйем 58 йыл татыу ғүмер итте, туғанлыҡҡа, тыуған ергә мөкиббән пар булыуҙарын әйтеү ҙә етәлер. Улым улар янында тормош университетын үтһә, БДУ-ның Нефтекама филиалында юрист һөнәрен алды. Ҡалала 40-тан ашыу милләт вәкиле йәшәй ине ул саҡта. Шул интернациональ мәхиттә Нияз, үҫмер егет, үҙенең башҡорттоң йөҙө икәнен тиҙ аңланы. Теремек, сос булды. Студент сағында йәйҙәрен түбәгә ҡарап ятманы, балалар лагерында вожатый булып эшләне. 20 йәштә халыҡ иҫәбен алыуҙа әүҙем ҡатнашҡаны өсөн миҙалға лайыҡ булды. Вузды ҡыҙыл дипломға тамамлап, армия сафында хеҙмәт итте. Командирҙары хәрби частә артабан ҡалыуын һораны, фатир бирәбеҙ, тине. Матди түгел, рухи ҡиммәтле өҫтөн күргән балам: "Әсәй, һине уйлап, тәҡдимдәрен кире ҡаҡтым, ҡалманым", - тине. Ғаиләһе менән дөрләтеп донъя көт ине лә бит... Шул мәлгә һигеҙ йыл үтеүгә - хәрби операция. Тәүҙә

✓ *Улымды, әсәй доғаларынан тыш, ҡатынының һөйөүе лә иҫән-имен йөрөтөүенә иманым камил. Нисек кенә ҡурсаламай ул Ниязыбыҙҙы! Тел ярҙамы, шәхси ярҙам, гуманитар ярҙам даими хәстәрләй.*



артиллерияла булды. Хәҙер - штурмда. Старшина яуаплылығы иңенән үтте, әле командир. Ҡайтҡан сағында үҙемсә ҡылын тартҡылайым, һорашам. "Әсәй, мин һалдаттарҙан күпкә көслөрәк, нығыраҡ булырға тейешмен. Тән менән дә, йән менән дә, - ти. - Хәрби заданиеға барғанда яҡындарҙы уйлау юҡ. Бер генә теләк: ҡуйылған бурысты үтәргә!"

Эй, Аллам!.. Бынан 35 йыл элек, баламды ҡулыма алғанда, утлы юлдар үтерен әйтһәләр, йөрәгем шартлар ине, моғайын...

27 сентябрҙә ғәрәсәт эсендә булыуына өс йыл үтте. 1095 көн! Юлиә киленем менән аҙаҡҡы ошо ваҡытты күҙҙән үткәреп ултырҙыҡ. Ғүмер юлыбыҙҙағы таштан-ҡурғаштан ауыр арауыҡ! Шөкөр, киленем балауыҙ һығып ултырмай. Көслө ҡатын! Дәүер киленемдән, уның хәлендәге башҡа ғүзәл заттан мөсһәҙлектә түгел, көсләлөктә талап итә. Никахтарына 15-се йыл китте. Ейәнем Нурсолтанға - 13, ейәнсәрем Розалияға - 8 йәш. Киленем балаларҙы гөлт иттереп ҡарай, хөкүмәт эшенә лә өлгөрә, яңғыҙ ҡалған атаһына ҡайтып ярҙамлашырға форсат таба, иренә - тайылһыҙ терәк. Улымды, әсәй доғаларынан тыш, ҡатынының һөйөүе лә иҫән-имен йөрөтөүенә иманым камил. Нисек кенә ҡурсаламай ул Ниязыбыҙҙы! Тел ярҙамы, шәхси ярҙам, гуманитар ярҙам даими хәстәрләй. Ул ғына түгел, август айында янына барып ҡайтты. Киленем - медик, фармацевт. Яуҙағыларға иң кәрәк әйберҙәрҙе машинаһына нышып тултырҙы ла, үҙе рулдә юлланды. Быуа ҡайҙа ул тоғролоҡҡа һәйкәл булыр ҡатындар! Ул ҡайтып күҙгә күренгәнсе йөрәгем усымда булды. Хоҙай мәрхәмәтенән ташламаһын киленкәйемде.

**Әнисә Муса ҡыҙы, һеҙ ике балаға әләсәй. Был йылдар эсендә күп нәмәне бергә кисерергә тура килде. Шулай булғас, замана хәтәре ейән-ейәнсәрегеҙҙең күңел донъяһында нисек сағылыш алды, тип һорай аламдыр?**

- Бала саҡ иленән иртә, бик иртә ысҡынды улар. Башҡаса сара юҡ. Хас та шағир Әңгәм ағай Атнабайҙың шиғырындағы һымаҡ:

*Һуғыш беҙҙе*
*ҡолаҡтарҙан тартып,*
*Ваҡытынан алда өлгөрттө.*
*Кистән егет итеп йоҡлатты ла*
*Таң атҡанда инде ир итте.*

Өс йыл әүәл атаһы Нурсолтанға: "Улым, ир-егет бул! Әсәйеңә, һеңлеңә терәк һин хәҙер..." - тип ҡуҙғалды Хәрби комиссариат алдынан. Ә ул 10 йәшлек балаға кем терәк?

Атайлы бала - арҡалы, тиҙәр бит. Эй, замана, алҡымдан ала... Һәр көнөбөҙ һоро-ҡара ваҡиғалар менән тулды. Нисек кенә һаҡларға теләһәк тә, һуғыш һулышы балаларҙың көнкүрешенә лә килеп инде. Һарытау полигонында әҙерлек бөткәс, атайҙарын тегә яҡтарға бергәләп оҙаттыҡ. Ҡыш ине. Нурсолтан да, Розалия ла бронежилет һәм башҡаларҙы рюкзакка үҙ ҡулдары менән һалышты. Һарытауҙан ҡайтҡас, төштәре лә боларҙы. Ейәнсәрем, ул мәлдә 5-те генә үткән ҡыҙсыҡ, ғәҙәттәгесә, сәскә түгел, танк төшөрөргә әүәҫләнде. Ейәнем, ҡышын бейек ҡарҙы өнөп, окоп яһап инеп китер ине. Үҙ-ара телмәрҙәрендә лә хәрби һүҙҙәр күбәйҙе.

Тәүге отпускыға улым 9 ай тигәндә, апрелдә, ҡайтты. "Йәл, ҡыҙымды беренсе синыфҡа үҙем оҙата алмайым", - тип өҙгәләнгәне иҫтә. Ундай үкенестәр иҫәпһеҙ-һанһыҙ. Шуға, ялға ҡайтҡанда улы - футбол матчына, ҡыҙы бейеү концертына эләкһә, ҡарап туя алмай. Башҡалар өсөн теләгән ваҡытта балаң менән телефондан һөйләшеү, мәктәпкә оҙатыу, ҡаршы алыу - ғәҙәти хәл. Яуҙағылар өсөн был - оҙаҡ көтөлгән бәхетле мәл. Алыҫтан уҡ ейәндәрем: "Ата-а-а-ай!" - тип һөрәнләп, улым ҡосағына ташланғанын күреү минә - оло бәхет. Күктең етенсе ҡатында кеүекбеҙ! Шул ике аҙнала миндә ныҡлы ышаныс йәшәй: улым иҫән, ул ғаиләһе менән. Төнөң ҡаты уйҙарһыҙ үтә. Таңда хәүеф-хәтәрһеҙ күҙ асаһың. Ошо бәхет тиҙерәк килһен ине лә бит һәр бер яугир әсәһенә! Затлы һарайҙар, әйберҙәрҙең һис кәрәге юҡ. Күңел тыныслығы килһен тиҙерәк.

**Әнисә Муса ҡыҙы, ғүмерегеҙҙең байтаҡ өлөшө педагогик эшмәкәрлеккә арналған, шул уҡытҡан дәүер, замандаштар тураһында берәй нәмә яҙырға уйламайһығыҙмы?**

- Кеше ҡулына ҡәләмде ныҡ тетрәнгәндә алалыр, моғайын. 49 йәштә мин йәшәү менән үлем араһында ҡалдым. Дауаханаға эләктем. Ярты кәүҙәм һулыны, тиерһең... Аяҡ-ҡул эшләмәҫ булды. Шул мәлдә табип: "Ҡулығыҙҙы нисек тә әрәкәтләндерергә тырышығыҙ", - тине. Филолог башына тәү төшкән уй - яҙырға! Төндә шәфҡәт туташы посына ҡунаҡлайым. Уң ҡулыма нисек тә ручка тотторам, яҙырға маташам. Әкренләп кәкес-бөкөс юлдар әтмәлләнде. Быға тиклем яп-ябай күренгән ғәмәлде атҡара алмай ултыр инде. Ни өсөн былай һынау?.. Ғүмер тигәнең ҡылдан нескә икәнен төшөндөрҙө минә был хәл. Сирек быуат ал-ялһыҙ эш аяҡтан йыҡты. Тимәк, йәшәү ҡиммәттәрен барлар мәл еткән.

Ыҙалана-ныҡыша торғас, ҡулға "иҫ инде". Башындағын аҡ ҡағыҙға төшөрә алыу кинәнес икән дә баһа! Шунан бирле мемуар кеүек теркәлә бара ниҙер. Киләсәктә, мин эштән бушағас, ул яҙмаларға нөктә ҡуйылыр, бәлки. Үҙемдән бигерәк, ейәндәр өсөн кәрәгер төҫлө. Әлеге йылдарҙы тәфсирләберәк яҙырмын, моғайын.

Һуғыш - ул оло фажиғә, аяныс-асырғаныс трагедия. Ерҙә инрәй... Харабалар аҫтында ҡалыу анһатмы ни уға? Ә әҙәм күңелендәге емереклектәрҙе, сабыйҙар йөрәгендәге ярсыҡтарҙы ниндәй бизмәнгә һалып үлсәп була?..

Йә, Раббым! Донъяларға тиҙерәк тыныслыҡ килһен. Уландарыбыҙ иҫән-имен илгә ҡайтып, бәхеткә сумһын!

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# АУЫРЛЫҒЫ - ЯУАПЛЫЛЫҠ...

## Башҡорт балалары алдындағы яуаплылыҡ



**Башҡортостан, Рәсәй Яҙыусылар союзы ағзаһы, Сабир Шәрипов исемендәге Иҙелбашы әҙәби-ижад берекмәһе етәксеһе, Белорет районы Инйәр урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әлиә САМАТОВА менән әңгәмәләшәбеҙ:**

➔ **Әлиә, йәйең нисек уҙҙы? Әҙәби ижад менән шөғөлләнергә ваҡытың булдымы, нимәләр яҙҙың?**

- Йәйҙең һәр көнө үҙе бер ғүмер инде ул. Күптәнге хыялымды тормошҡа ашырып, тыуған ауылым Йәйәгемдә, Инйәр йылғаһы буйында тирә-яғын урман уратҡан урында улдарым менән өй күтәрҙек. Урманда ҡоштар һайраһа, уларҙан да дәртлерәк моңланып, әлеге мәлдә шул йортобоҙҙо төҙөйбеҙ. Киләсәктәге илһам төбәгем булыр был, тип өмөтләнәм. Кендек ҡаным тамған ергә тамырҙарым тармаҡлана, шөкөр. Ижадҡа килгәндә, мейемдә лә төҙөләш эше ҡайнай. Ҙур ғына әҫәрҙең һөлдәһе ҡоролоп бөтөп килә. Илһам сығанаҡтарым ярҙамында аҡ ҡағыҙға төшөрөргә уйлайым. Яҙ аҙағында "Атайым "селтәрҙә" исемле хикәйә ижад иткәйнем, шунан һуң ҡәләмгә тотонорға форсат сыҡмайыраҡ тора.

➔ **Уҡытыусы ла, ижадсы ла булыуҙың өҫтөнлөктәре, ауырлыҡтары нимәлә тип уйлайһың?**

- Уҡытыусы һөнәре бик күп яҙмыштарҙың шаһиты булып, шул мөхиттә ҡайнауың менән отошло. Яҙасаҡ әҫәренә геройҙар, ваҡиғалар, мәрәкәләр, сағыштырыуҙар, яҙмыштар уратып алған. Әйҙә, һайлай ғына бел. Тағы отошло яғы шунда: хәҙерге уҡыусыға ниндәй әҫәрҙәр оҡшағанын тойомлауы еңелерәк. Республика гәзит-журналдарында баҫылған әҫәрҙәрҙе уҡығанда бала нисек тәьҫир итә, оҡшаймы, битарафмы... Ниндәй тема уларға яҡыныраҡ, заман геройы ниндәй булырға тейеш һ. б. Әммә бөгөнгө уҡыусыға ғына оҡшаған, йәғни бер көнлөк кенә әҫәрҙәр яҙыуҙан һаҡ булғым килә. Мәңгелек темаларҙы үҙ күҙлегем аша күреп, тәрбиәүи һәм фәһемле повесть-хикәйәләр ижад итергә ине тигән маҡсатым.

Ауырлыҡтары - яуаплылыҡ. Хәҙерге заман башҡорт балалары алдындағы яуаплылыҡ. Яҙғандарым уларҙы ҡыҙыҡһындырырмы?..

➔ **Донъялар ныҡ үҙгәрҙе хәҙер. Традицион дәрес биреү тик иҫләргә генә ҡала бара һымаҡ. Бер үк ваҡытта туктауһыҙ инновациялар ҙа ялҡтырҙы. Һиңеңсә, иң камил башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресе нисек булырға тейеш?**

- Һәр уҡытыусының үҙ алымы, үҙ юлы. Мәктәптә хәҙер башҡорт теле балалар өсөн иң ауыр фәндәрҙең береһенә әйләнеп бара, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Тирә-яҡ мөхит, өйҙәге тәрбиә һәм сит телдә аралашыу, мәктәп программаһындағы башҡорт теле әҙәбиәтенән йылдан-йыл кәмегән дәрестәр һаны башҡорт теле уҡытыусыларының бәкәленә һуға. Мәҫәлән, 9 класта былтырғы уҡыу йылында башҡорт теле һәм әҙәбиәтенә бер дәрес бүленде, йәғни ике сирек әҙәбиәт уҡыһаҡ, ике сирек тел дәрестәре уҙғарҙыҡ. Берҙәм дәүләт имтихандарын тапшырған уҡыусыларҙы әҙерләргә, олимпиадаларҙа ҡатнашырға, программалағы әҫәрҙәрҙе лә уҡырға, теорияны ла белергә өлгөрөргә тейешһең әле.

Әлбиттә, уҡыусыларҙы ылыҡтырыр өсөн төрлөсә алымдар ҡулланырға тырышабыҙ, традицион һәм инновацион юлдарҙы ла эҙләйбеҙ. Рухи тәрбиә етмәй, сөнки ғаиләлә һәм балалар баҡсаһында бала күңеленә сит орлоҡ сәселә. Бөтәһен дә бер соҡорға өймәйем. Үҙ телен ятҡан, халҡын хөрмәт иткән, әҙәбиәтебеҙҙе һөйгән рухлы ғаиләләр ҙа бар. Ундай балалар менән эшләүе - йыуаныс. Күпселек телһөйәр балаларҙы маҡтап, ҡалғандарын уларға эйәрергә әйҙәйем, үрнәк итеп ҡуям, йышыраҡ аралаштырам. Республикала уҙған төрлө бәйге-конкурстарҙа, олимпиадаларҙа ҡатнаштырырға тырышам, сөнки ундай сараларҙа рухлы балалар йыйыла һәм уҡыусыларым уларға тиңләшергә ынтыла.

Иң камил башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресе - ул йөҙөп йөрөп әҙәби әҫәрҙәр уҡып, илаған ерендә илап, көлгән ерендә көлөп, уйланған ерендә уйға батып, бәхәсләшеп үткәрелгән дәрес, минеңсә. Былтыр 10-сыларым менән Ғ. Сәләмдең "Бала" поэмаһын илап, 11-селәрем менән Ғ. Ғиззәтуллинаның "Яратам тип әйтеп өлгөрмәнем" хикәйәһен илап та, көлөп тә, уйланып та уҡыһаҡ, Р. Солтангәрәевтың хикәйәләренән фәһем алдыҡ. Ә быйыл 5-сеқәр менән ауырыраҡ булды, улар тел белмәй үҫкән быуынды башлаусылар сафында, әммә, өмөтһеҙ шайтан ғына, тигәндәй, үҫә килә башҡорт теленә, әҙәбиәтенә, мәҙәниәтенә, тарихына ҡарата һөйөү тәрбиәләй алырмын тип ышанам. Һөнәремдә яратҡан һәм уға тоғро кеше булараҡ, шулай уҡ ижад юлына баҫҡан әҙип булараҡ, мин киләсәк быуында телебеҙгә һөйөү тәрбиәләргә бурыслы.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**яҙып алды.**

*✓ Башын ғорур тотоп, тояҡтарын еңел генә күтәреп, алдан Алаҡай юрта. Уның артынан, үкерә-үкерә, әрәпәтһеҙ тояҡтарын ауыр күтәреп, асыулы ҡиәфәт менән Ҡыҙыл һыйыры саба.*





# ИСЕМЕМ - АЛАҠАЙ

Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ

(Донъяуи хикәйә)

Һыйырыбыҙҙың бәләнән һимен-һау ҡотолоуына ҡыуанып, ҡармағымды ҡулыма алғайным ғына, Алаҡайҙың һуғышсан мөңрәүе ишетелде. Башын бәйге аттары кеүек ҡупым ғына тотоп, алғы тояҡтарын "тып-тып" баҫып, ул Ҡыҙыл һыйырына яҡынлашты. Тегенеһе, башын аҫҡа эйеп, һөжүм итеүсене ҡаршыларға әҙерләнде. Инде төкөштөләр тигән мәлдә генә, Алаҡай ҡапыл һулға ялтанды һәм, дәү һыйырҙың артҡы янбашы эргәһенән үтеп барышлай, йылғыр хәрәкәт менән уң мөгөҙөн дошманының ҡойроҡ тирәһенә ҡаҙаны. Ҡыҙыл һыйырының асыуын шул тиклем ҡабартты был: сорлап аҡҡан ҡанға иғтибар ҙа итмәй, Алаҡайҙың артынан төштө ул. Тегенеһе, тиҙлеген арттырмай ғына, көтөү ятҡан уйпатты тирәләп юртыуын белде.

Был күренеште мин мәңге онотасаҡ түгелмен: башын ғорур тотоп, тояҡтарын еңел генә күтәреп, алдан Алаҡай юрта. Уның артынан, үкерә-үкерә, әрәпәтһеҙ тояҡтарын ауыр күтәреп, асыулы ҡиәфәт менән Ҡыҙыл һыйыры саба. Алаҡай шарҡылдата көләп йүгергән үҫмер ҡыҙҙы хәтерләтһә, уның баҫтырыусыһы һүгенә-һүгенә тарбанлап барған йыуантаҡ ҡатынға оҡшағайны.

Һыйырҡайым ярымдуға яһаны ла яңынан көрәш майҙанына килеп инде. Килмешәк һыйырҙың килеп еткәнен байтаҡ көтөп торорға тура килде уға.

Иң ҡыҙығы ошонда башланды. Сәкәләшеүсеһе хәле бөтөп килеп туҡтауы булды, Алаҡай тиҙ генә уның һул яғына сыҡты һәм, мөгөҙҙәрен текә тотоп, уға табан сабып китте. Ярай, тегенеһе боролоп өлгөрҙө: әгәр саҡ ҡына һуңлаһа, валлаһи, шунда ҡорһағы тишелеп ятыр ине. Ала һыйыр, уға тейә яҙып, эргәһенән сабып үтте. Артынан баҫтырыуҙы көтөп, тағы баяғы юлы менән юртып китте. Әммә Ҡыҙыл һыйырының сабырлыҡ рәте ҡалмағайны. Башын аҫҡа эйә биреберәк, бер урында тапаныуҙы хуп күрҙе ул. Беҙҙең һыйыр, кире боролоп килеп, дошманына яңынан ташланды. Тик хәҙер башҡа баш терәшеп һөҙөшөргә уйламаны ла: көндәшенә йә уңлы-һуллы, йә арт яҡтан һөжүм итеп йөҙәтте. Аҡыллы сәүек эт айыуҙы нисек яфалаһа, Алаҡай ҙа шулай эш итте. Ярты сәғәттән килмешәк һыйырҙың хәле бик хөртәйҙе: тиреһе ямғыр мәлендәге кеүек еүешләнде, ҡабырғаларының өсдүрт урынынан ҡара ҡан аға ине. Үкерерлек хәле ҡалманы - уңлы-һуллы ла көс-хәл менән генә борола башланы ул. Тап ошо мәлдә Алаҡай һуғышыу оҫтаһы икәнлеген бик асыҡ танытты ла инде. Уң ҡабырғаһынан һөҙөргә ниәтләнгән кеүек итте лә, ҡапыл ғына боролоп, һул мөгөҙөнең яртыһынан күберәген дәғүәсе һыйырҙың яңаҡ һөйәге аҫтына ҡаҙаны. Дәү һыйыр ҡыҙғаныс тауыш сығарҙы, башын саҡ күтәреп, мөгөҙҙән ысҡынды ла көрәш майҙанынан ситкә һыпыртты. Ә Алаҡай иһә, һалмаҡ ҡына баҫып, Һаҡмарына кире төшөп китте. Тубығынан һыуға инде лә, бер ни булмағандай, көйшәүен дауам итте. Ул китеп барғанда, һыйырҙар өнһөҙ генә баш эйгәндәй булды: йәнәһе, һинең көсөңдө һәм оҫталығыңды танийбыҙ. Тик аңра һарыҡтар һәм ыҫмала күҙле кәзәләр генә, баштарын ҡомға терәп, йоҡомһорауын белде. Улар бындай сәкәләшеүгә битараф ине.

Ҡыҙыл һыйырының ғүмеркәйҙәре ҡыҫҡа булды. Һөттө күп бирһә лә, уныһы шыйыҡ булып сыҡты, етмәһә, тиҙ әсене. Бынан да бигерәк, хайуанҡайҙың бик тә ашамһаҡ икәне беленде. Ҡышҡылыҡҡа ҡәҙимге һыйырға бер кәбән бесән буйтым етһә, быға кәм тигәндә ике кәбән бесән әҙерләргә тура килде. Тоҡомло һыйыр элмәнләк булыуы менән йонсотто хужаһын: ҡаҙ еме булһынмы, тоҡтағы он булһынмы, киптерегә эленгән кер булһынмы - бөтәһен дә ҡырып-юнып ашап, сәйнәп йөрөнө. Тауыҡ еме эҙләп, һарайҙағы бөтә ишектәрҙе, ихаталағы аласыҡ һәм келәттәрҙең тәҙрәишектәрен ҡырып сыҡты. Төндәрҙең береһендә, ҡойманы емереп сығып, Ырыҫҡол ағай менән күршеһе Ишморат ағайҙың картуфлыҡтарын ҡара ергә әйләндереп һалып ҡуйҙы. Ул ғына ла түгел, бер заман Сибайҙан ҡунаҡҡа килгән ейәненең ҡыҙыллы-күкле ҙур тубын да, шартылдата ярып, сәйнәп-сәйнәп, йотоп ҡуя.

Сабыйға был шул тиклем ныҡ тәьҫир итә: уҡыу йылы башланғас, "Һыйыр" исемле инша яҙырға була ул. Иншаға ошондай һүҙҙәр ҙә индерә: "Һыйыр үлән, бесән һәм һалам ашай. Тағы туп ашарға ла ярата". Иншаны тикшереп ултырғанда, уҡытыусы "туп" тигән һүҙҙең аҫтына тулҡынлы һыҙыҡ һыҙа, өҫтөнә ҙур итеп һорау ҡуя һәм дәфтәр ситендәге һыҙатҡа ошондай һүҙҙәр яҙа: "Элгәре һыйырҙар туп ашамай торғайны!" Ҡалала тыуып-үҫкән йәш уҡытыусы был һүҙҙәрҙе урынһыҙ шаяртыу тип ҡабул итә һәм уҡыусыға "икеле" сәпәй. Аҙаҡ бала илай-илай, үҙе күргәндәрҙе һөйләп, уҡытыусыһын ышандырырға тырышып ҡараһа ла, бер ни ҙә килеп сыҡмай - "икеле" урынында ҡала.

Ахыр сиктә, ауылдың алты ире менән саҡ йығып, һуйып, Ырыҫҡол ағай был хайуанҡайҙың итен Баймаҡтан килгән әҙерләүсегә бик осһоҙ хаҡҡа һатып ебәрҙе. "Алмаштырғанда биреп ебәргән ҡолондоң хаҡын сығарҙым", - тип күңелһеҙ генә әйткән, ти, Ырыҫҡол ағай, итте күпменән тапшырҙың, тип һораған күршеһенә. Әҙерәк торғас, өҫтәп ҡуйған: "Бейә бушҡа китте". Шул көндән алып ауыл халҡы, берәй кеше, ҡиммәтле нәмә алам тип, яңылышһа, ул "тоҡомло һыйыр" алған бит, тип шаярта башланы.

Ала һыйыр бик аҡыллы мал булып сыҡты. Кем уны ярата, кем уны яратмай - бөтәһен дә белеп йөрөнө. Ялҡау көтөүселәргә эшләргә ирек бирмәне ул. Әгәр ҙә һыулауға иртә төшөрөп, ашарға һуңлабыраҡ сығарған кеше көтөүгә хужа булып алһа, Алаҡай әллә ниндәйерәк мөңрәү сығарыр ине - уны ишетеү менән бөтә мал тырым-тырағай таралыр булды.

Бер йылды Түбәнән бик йылғыр кешекәй көтөүсе булып ялланды. Тәүге мәлдәрҙә, малды иртәрәк йылғаға төшөрөп һәм көтөүҙе үҫмер улына ҡалдырып, ҡасабаһына һыпыртыу яғын ҡараны ул. Бер ҡайтыуында ныҡ ҡына һуңлап килһә, бөтә мал таралған, унлап һыйыр ғәйеп булған, ә малайы илауҙан шешенеп бөткән була. "Бөтәһе бер юлы төрлөһө төрлө яҡҡа таралды ла китте, бер нәмә лә эшләй алманым", - тип илай-илай һөйләгән көтөүсегә улы. Ауылдаштарымдан кемдер түбәлегә ошондай аҡыл өйрәткән: "Көтөүгә хужа булғың килһә, Алаҡай менән уртаҡ тел тап. Алаҡайҙың холҡон белгең килһә, эйәһенән барып һораш".

Көндәрҙең береһендә шул көтөүсе кисләтеп кенә беҙгә килеп инде. Атайым менән сәй эсеп, һөйләшеп ултырҙы. Аҙаҡ, рәхмәттәр әйтеп, сығып китте. Атайым әйткән кәңәштәрҙән ошолары иҫтә ҡалған: "Малды ваҡытынан алда йылғаға төшөрмә. Эҫе төшөү менән кире ҡыу. Сыбыртҡыңды артыҡ күп шартылдатма. Алаҡайға тупаҫ тауыш менән өндәшмә. Һүгенмә. Эш көнөң бөткәс, уға рәхмәт әйт һәм хушлашып ҡал". Яңы көтөүсе күндәм кеше булып сыҡты һәм әйтелгәндәрҙе тейешенсә үтәне. Ялланып эшләгәне өсөн тейешле аҡсаһын алып, атайыма тағы килеп рәхмәттәр әйтеп, көҙөн Түбәһенә кире ҡайтып китте. Ҡайтыу менән, электән йыйып килгән аҡсаһына эшләп алғанын ҡушып, ҙур ғына йорт һатып алды. Ә өйөбөҙҙән сығып китер алдынан әйткән һүҙҙәре шул булды: "Әптрәхим ағай, һыйырың кеше кеүек икән".

Ә минеңсә, Алаҡай кешенән дә аҡыллыраҡ һәм һиҙгерерәк булды. Ошондай хәүефле лә, фәһемле лә ваҡиға иҫкә төшә. Йәйге көндәрҙең береһендә уны көтөүҙән ҡаршы ала алманым, сөнки атайым менән көнө буйы һарайҙан тиреҫ сығарҙыҡ. Эш бөттө тигәндә генә, ҡапҡанан ала һыйыр килеп инде. Ихатаға ингәс, уңға боролдо һәм шунда ултырған табаны ялай башланы. Уның төбөндә себештәргә һалынған тары ярмаһы ҡалған ине булһа кәрәк. Ялап торғанында ниңәлер сәйер итеп мөңрәргә һәм ер тырнарға кереште, әйтерһең, бүре күргән. "Быға ни булды, әллә башына тай типкән инде", - тип көләмһөрәне атайым. Мин ни әйтергә лә белмәнем, таралып ятҡан һуңғы сүп-сарҙы бер урынға өйөүемде дауам иттем. Эшемде бөткәс, бәләкәй ҡул арбаһын алып килергә лә, шуға тейәп, ҡалған ҡыйҙы картуфлыҡҡа түгергә булдым. Арба ҡапҡа төбөндә, Алаҡайҙың арғы яғында тора ине. Ихатабыҙ биләп торған урын ҡапҡа яғына ярайһы ғына һарҡыу булғанлыҡтан, һыйыр торған яҡҡа йүгереп тигәндәй киттем. Алаҡайҙы ал яғынан урап үтәйем тиһәм, юл бирмәй: башын асыулы болғап, миңә етеп килә. Аптырап торманым, малҡайҙы арт яғынан урарға булдым. Артына сығыуым булды, һыйыр ҡапыл ғына боролдо ла мөгөҙҙәрен миңә йүнәлтте - ҡорһаҡты яра һөҙмәҫ, тимә. Мөңрәүен, алғы тояҡтары менән ерҙе сапсыуынан туҡтамай. Мин: "Атай, атай, Алаҡайҙы һарайға индереш әле! Арбаға ебәрмәй!" - тип ҡысҡырҙым. Тәүҙә һөрәнләүемә иғтибар бирмәһә лә, атайым бер аҙҙан минең яныма килде һәм Алаҡайҙы урынына инергә өгөтләй башланы. Тегенеһе тыңлап тора-тора ла, үкереүен, ер тырнауын дауам итә.

Ни эшләргә? Һыйыр беҙҙе һанға ла һуҡмай бит.

Атайҙың ҡушыуы буйынса киттем әсәйҙе эҙләп. Аласыҡҡа индем, киске аш бешереп йөрөгән әсәйемә хәлде һөйләп бирҙем. Белгән кешеләй, Алаҡайҙың башына ат типкән, ахырыһы, тигән булдым. Әсәйем аптырап китте: ниндәй ат, нишләп типкән, тип һораша башланы. Мин өндәшмәгәс, бәләкәй биҙрәгә әҙерәк картуф һалып, минең арттан ҡапҡа яғына атланы. Килеп еткәс, иркә тауыш менән һөйләнә-һөйләнә, һыйырҙың алдына биҙрәһен ҡуйҙы. Алаҡай асыулы итеп мөңрәне лә алғы тояғы менән биҙрәне осора тибеп ебәрҙе. Булған ғына картуф ситкә тәгәрәне.

Бөтәбеҙ ҙә аптырашта ҡалдыҡ - ни эшләргә лә белмәйбеҙ. Һиҙәм, атайымдың асыуы ҡабара башланы. "Хәҙер мин уны сыбыртҡы менән ярам!" - тине ул һөйкөмһөҙ тауыш менән. Шул саҡ әсәйем Алаҡайҙың мөңрәгән ваҡытта башын артҡа ташлауын шәйләп ҡалды. "Аңланым, Алаҡай, аңланым", - тип һөйләнде лә, һыйырҙың башын һыйпай-һыйпай, арба ултырған тирәне ҡараштыра башланы. "Йылан! Атаһы, йылан!" - тине ул ҡапыл хәүефле тауыш менән. "Ниндәй йылан? Ҡайҙа?" Атайым шул һүҙҙәрҙе әйтте лә, муйынын һуҙып, әсәйем эргәһенә барып баҫты. Уларҙың араһына мин дә барып ҡыҫылдым.

Арба тәртәләренең осона арҡыры беркетелгән таҡтаға яҡын ғына урында йомарланып йылан ята ине. Сеүәтә ҙурлығындағы соҡор һымаҡ нәмә эсендә ятҡанҡанлыҡтан, мин уны абайламаҫ инем. Арҡыры таҡтаны тотайым тип эйелһәм, йылан йә ҡулымды, йә эйәгемде мотлаҡ сағыр ине. Эйе, тупраҡ ерлегендә саҡ-саҡ беленеп ятҡан сыбар йыланды ҡыҙыл эңерҙә мин һис кенә лә абайлай алмаҫ инем.

Атайым һарайҙан тиҙ генә һәнәк килтерҙе, йыланды һуғып үлтерҙе лә башҡорттарҙың боронғо йолаһы буйынса башына таяҡ ҡаҙап ҡуйҙы.

Ул кистә өйҙә һүҙ тик йылан тураһында ғына барҙы. Әсәйем, уф та уф килеп, бәләнән ҡотолоуына ҡыуанып ултырҙы, ваҡыты-ваҡыты менән миңә ҡарап, күҙ йәштәрен һөрткөсләп алды. Мине йыландан сағылған тип күҙ алдына килтереп, шуға йәлләп ҡараны шикелле. Атайым күп һөйләшмәне, тик тамағын ғына ғәҙәттәгенән йышыраҡ ҡырғыланы. Бер мәртәбә, ни өсөн икәнен аңлатмайынса, Алаҡайҙы маҡтап алды. Йыландың ҡайҙан сығыуы хаҡында ла һүҙ булды. Батша заманында һалынған йортобоҙҙың серегән нигеҙҙәрендә уның ише йәнлектең йәшәүе һис тә ғәжәп түгел тигән һығымта яһалды.

Атайыма - ҡырҡ, миңә ун бер йәш тулып килгәндә, ғаиләбеҙ Муллаҡай менән хушлашырға әҙерләнә башланыҡ. Ауылдың ете йыллыҡ мәктәбе ябылып, унан өс саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Ҡолсорала һигеҙ йыллыҡ мәктәп асылырға тейеш ине шул йылда. Муллаҡайҙың бөтә уҡытыусылары, һеперлеп, иртә йәйҙән үк Ҡолсораға күсеп бөттө. Риза ағайҙың ғаиләһе генә, күптән түгел генә яңы йортҡа күскәнлектән, Муллаҡайҙа ҡалырға булды. Иң аҙаҡтан беҙ ҡуҙғалдыҡ, сөнки уҡытыусылар араһында беҙҙекенән дә ҙурыраҡ ғаилә юҡ ине. Атайым менән әсәйем, ала һыйыр, ете бала - йәмғеһе бер тиҫтә йән инек беҙ күсенгән йылда.

Мин, балалыҡ арҡаһындалыр инде, күсенеүҙе бик күңелле һәм ҡыҙыҡлы ваҡиға һымаҡ ҡабул иттем. Әсәйем менән атайымдың күңелһеҙләнеү, Алаҡайҙың тынысһыҙланыу сәбәптәрен һис кенә лә аңлай алманым. Миңә иң аҙаҡҡы ылау менән күсеп китергә тура килде. Бына, ниһайәт, әйберҙәр тейәлеп бөттө. Атайым, арбаға ултырып, ҡулына дилбегәне алды. Мин ат арбаһына бәйләнгән бәләкәй арбаға төшөп ултырҙым, һәм киттек бер заман, шалтыр-шолтор килеп, Муллаҡай урамы буйлап Һаҡмар үренә ҡарай. Ҡул арбаһына аҙ-маҙ китап тейәлгән ине. Шулар өҫтөнә ултырып, барам артҡа ҡарап, шаярып. Китеп барабыҙ, уйнап барам: атайым күрмәгәндә, осраған дуҫ-иштәремә китаптар ырғытҡылайым. Эй ҡыҙыҡ: эттәр өрә, әҙәмдәр ҡысҡыра, әтәс-тауыҡ ҡыткылдап ситкә һикерә!

(Дауамы. Башы 38-39-сы һандарҙа).

*ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ*

# КҮҢЕЛДӘРГӘ...

## рухи күпер һалына



**Ике ҙур коллективты - Илшат Йомағолов исемендәге Башҡорт драма театрын һәм Филармонияны - үҙ эсенә алған Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе коллективы үҙенең юғары профессиональ оҫталығы, сағыу тамашалары һәм гастролдәр эшмәкәрлеге менән танылыу яуланы. Берләшмәнең директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Салауат Юлаев ордены кавалеры Харис Зәбих улы ӘБДРӘХИМОВҡа килеһе ижади миҙгелгә байҡау яһауын һорап мөрәжәғәт иттек.**

- Иң тәүҙә үткән ижад миҙгелендә башҡарылған эштәргә күҙ һалайыҡ әле. Һәр йылдағыса, ул миҙгел дә спектаклдәргә, концерт программаларына бай булды. Театр тамашасыларҙы биш премьера менән һөйөндөрҙө. Филармонияның ижади төркөмдәре халыҡҡа егерме бер яңы концерт программаһы тәҡдим итте. Ғаилә абонементы сиктәрендә балалар һәм ата-әсәләр өсөн мауыҡтырғыс саралар үтте.

Солистарыбыҙ төрлө конкурстарҙа һәм фестивалдәрҙә ҡатнашып, еңеүҙәр яуланы. Айгиз Уйылданов "Ретро-шлягер" вокал башҡарыусылар конкурсында лауреат, Илдар Әбдрәшитов - дипломант, Зарина Ҡотлоғужина дипломант һәм үҙешмәкәр композиторҙарҙың "Күңелем моңдары" XX республика конкурсында лауреат булды. Айгиз Уйылданов, XIII Асыҡ йыр һәм бейеү фестиваль-конкурсында, "Өфө тулҡындары" популяр музыкаль конкурсында ҡатнашып, финалға сыҡты. Шулай уҡ талантлы йырсыларыбыҙ Илдар Әбдрәшитов менән Әҙилә Кәримованың Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына һәм Ватанды һаҡлаусылар көнөнә арналған И.Д.Кобзон исемендәге фестиваль-конкурста ҡатнашыуы һөйөнөслө ваҡиға булды.

Гастролдәр беҙҙең эшмәкәрлектең мөһим өлөшөн биләй. Быйыл Рәсәй Федерацияһы Мәҙәниәт министрлығының "Ҙур гастролдәр" проекты буйынса театр коллективы Ҡабарҙы-Балҡар, Дағстан республикаларында, филармонияның Бейеү театры коллективы һәм солистары Удмуртия, Сыуашстан, Мордовия, Татарстан, Марий Эл республикаларында сығыш яһап ҡайтты. Йыл һайын төбәк һабантуйҙарында ла әүҙем ҡатнашабыҙ. Уҙған миҙгелдә артистарыбыҙ Силәбе өлкәһенең Арғаяш районында, Ырымбур өлкәһе Пономарёвка районында һәм Гай ҡалаһында, Магнитогорск ҡалаһында халыҡты сағыу сығыштары менән һөйөндөрҙө. Бөтә спектаклдәребеҙ, концерттарыбыҙ аншлаг менән үтте. Артистарыбыҙҙы, ҡайҙа ғына сығыш яһаһалар ҙа, дәррәү алҡыштар менән ҡаршы алып, оҙатып ҡалдылар. Бындай гастролдәр артистар өсөн тәжрибә, оҫталыҡ, камиллашыу, үҫеш өсөн оло майҙан булып тора.

Артистарыбыҙ төп эштәренән тыш, ҡала, республика кимәлендәге төрлө конкурстарҙа ла әүҙем ҡатнаша һәм призлы урындар яулай. Мәҫәлән, Фәнил һәм Сәлимә Ҡарасуриндар быйыл "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе" конкурсында ҡатнашып, "Ижади ғаилә" номинацияһында еңеүсе булды.

Әлеге заман барыбыҙға ла бик ауыр һынауҙар ҡуя. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам ҡулы һуҙырға тырышабыҙ. Драма театры артистары Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн хәйриә спектакле күрһәтте, йыйылған аҡса Махсус хәрби операция зонаһындағы хәрбиҙәргә ярҙамға тотонолдо. Сара Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимовтың тыуған ауылы Тәүәкәндә (Күгәрсен районы) күп функциялы ауыл клубында булды. Унда беҙ Баязит Бикбайҙың "Ҡоҙаса"һын (режиссеры - Азат Йыһаншин) күрһәттек. Залдың шығырым тулы булыуы Махсус хәрби операцияға һәр кем үҙ өлөшөн индерергә әҙер булыуын раҫлай. Спектаклдән һуң артистарыбыҙ Тәүәкән ауылы әүҙемселәре менән маскировка селтәрҙәре үреүҙә ҡатнашты.

Үкенескә ҡаршы, беҙҙең берләшмәне лә юғалтыуҙар урап үтмәне. Бынан бер йыл элек монтажлаусы егетебеҙ Алексей Иванов Махсус хәрби операцияла һәләк булды. Уның ғаиләһе - атаәсәһе, балалары менән бәйләнеште өҙмәйбеҙ, матди яҡтан да, мораль яҡтан да ғаиләһенә ярҙам ҡулы һуҙабыҙ. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы, уларҙың туғандарын бушлай спектаклдәргә, концерттарға саҡырабыҙ. Шулай уҡ бер көнлөк эш хаҡын ярҙам йөҙөнән Белгород халҡына күсерҙек, гуманитар ярҙам күрһәтеү кеүек сараларҙа әүҙем ҡатнашабыҙ. Ғөмүмән, коллектив ситтә тороп ҡалмай, үҙебеҙҙең ярҙамыбыҙ, иғтибарыбыҙ менән ил иңенә төшкән ауырлыҡтарҙы аҙ ғына булһа ла еңеләйтә алабыҙ икән, тимәк, беҙ дөрөҫ юлда.

Шулай итеп, быйылғы ижад миҙгеленә күсәйек. 1, 2 октябрҙә концерт миҙгелен астыҡ. Ике көндә лә филармонияның ижади төркөмдәре, солистары халыҡҡа йөкмәткеле һәм матур концерт программалары бүләк итте. 16 октябрҙә "Ашҡаҙар" башҡорт эстрада-фольклор төркөмө Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә арнап, "Батырҙар беҙҙең арала" программаһын күрһәтте. Ноябрҙә һәм декабрҙә Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Азамат Асаинов һәм Ришат Хәмитовтың юбилей концерттарына саҡырабыҙ.

Башҡорт драма театрында ла ҡыҙыу ижад майҙаны - әлеге мәлдә өс спектакль өҫтөндә эш бара. Сәхнәгә Әлфинур Ғәзимова ҡуйған "Ятҡа бирер йәрем юҡ!" (В.Красногоров) комедияһы, Фәнис Кәримов федераль Грант буйынса ҡуясаҡ "Рядовойҙар" (А.Дударев) драмаһы, Илсур Ҡаҙаҡбаев "Берҙәм Рәсәй" сәйәси партияһы проекты сиктәрендә ҡуясаҡ "Өлкән ул" (А.Вампилов) комедияһы тамашасы күңеленә хуш килер тип ышанабыҙ. Октябрь аҙағында Түбәнге Кама ҡалаһында үтәсәк "Заман ҡыңғырауы" исемле фестивалдә театр коллективы ҡатнашырға әҙерләнә, был сара Туфан Миңнуллиндың тыуыуына 90 йыллыҡҡа арнала.

Беҙҙең уңыштарҙың сере ябай - берҙәм булып, тамашасы өсөн эшләйбеҙ. Халыҡтың зауығын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында эшмәкәрлекте юғары кимәлдә алып барыу, ойоштороу өсөн бар көсөбөҙҙө һалабыҙ. Беренсе нәүбәттә, барыһын да кадрҙар хәл итеүен аңлап, ижади төркөмдәргә профессиональ артистарҙы туплауға, уларҙың сәхнә оҫталыҡтарын, белемдәрен камиллаштырыуға, үҫтереүгә, уҡытыуға һәм торлаҡ мәсьәләһендә ярҙам итеүгә етди иғтибар бирәбеҙ. Өфө дәүләт сәнғәт институты, Башҡорт республика мәҙәниәт һәм сәнғәт колледжы менән тығыҙ бәйләнештә эшләйбеҙ. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта институтта маҡсатлы йүнәлеш буйынса ике студент уҡый, колледжда башҡорт театры һәм Бейеү театры өсөн махсус курстар эшләй.

Ижад кешеләре - бигерәк тә нескә күңелле, бик хисле халыҡ. Улар ғәҙелһеҙлекте тәрән кисерә, шуға артистарҙың күңеленә дөрөҫ юл таба белергә, уларға ҡолас йәйеп эшләү өсөн ижад майҙаны булдырырға кәрәк. Берләшмә - ул ҙур ғаилә кеүек. Берҙәм булып йәшәһәк, эшләһәк кенә ҡаҙаныштар ҙа ҙур булыр, халыҡ та тартылыр. Шуныһы маҡтауға лайыҡ, берләшмә менән тамашасы араһында рухи күпер һалынған. Киләсәктә лә тамашасыларҙы матур спектаклдәр һәм йөкмәткеле концерт программалары менән тәьмин итеү, ышаныстарын аҡлау беҙҙең төп бурысыбыҙ булып ҡала. Ана шул күпер донъяға үҙенең нурын таратып, матурлыҡҡа, яҡты киләсәккә әйҙәп торһон!

**Роза ҠОБАҒОШОВА**
**яҙып алды.**

*КИНӘЙӘ*

# ҠУЯН БАЛА ТАПҠАН,

## ҡуйыр урын тапмаған



**Тәү ҡарамаҡҡа еңел генә аңлашыла был әйтем: төрөнә ҡарап йыл әйләнәһенә тиерлек бик йыш бала килтергән (йәй, яҙ айҙарында 1-9, ҡыш, көҙ 1-5 бала) ҡуяндарға тоҡомон йыртҡыс күҙҙәрҙән һаҡлар ышыҡ урынды табыуы еңел түгелдер.**

Күбеһенсә ҡуяндар март, апрель айҙарында балалай. Инә ҡуян яңы тыуған балаларын бер тапҡыр ғына имеҙә лә, яҙмыш ҡосағына ҡалдырып китә. Бөтөнләйгә ташлай. Әммә балаларын ташлаған өсөн уларҙы бәғерһеҙлектә ғәйепләргә, әрләргә ашыҡмайыҡ. Улар балаларын фәҡәт төлкө, бүре күҙҙәренән йәшерер өсөн ошо юлға бара. Әгәр ҙә сабыйҙары янында оҙағыраҡҡа туҡталһалар, йыртҡыстар тәүҙә ҙур кәүҙәле әсәләрен күреп ҡалып, эҙҙәрен еҫкәп килеп, балаларына ташлана. Әсәләре был саҡта үҙҙәре саҡ ҡасып ҡотола. Ә ҡуяндың бүреләр, төлкөләр, айыуҙар, йомрандар һымаҡ, балаларын йәшерер, үҙе лә инеп боҫор ер оялары булмай.

Икенсенән, ҡуян балаларының тәпәйҙәрендә тир бүлеп сығара торған биҙҙәре барлыҡҡа килеп өлгөрмәй, шуға күрә йыртҡыстар уларҙың эҙҙәрен еҫкәп таба алмай. Балалары, асылда, ҡыуаҡ, шырлыҡ араларына, йығылған ағас ботаҡтары аҫтына, иген араларына, ҡыш көрт ҡатламдарына, көҙ ҡойолған япраҡ аҫтарына инеп йәшеренә. Йәғни әсәләре уларға ышыҡланыр урынды табып бирмәй, балалары үҙҙәре шулай һыйыныр ышыҡ таба.

Ә нисек туҡлана тиһегеҙме ҡуян балалары? Тәбиғәт ғәли йәнәптәре был йәһәттән дә сараһын тапҡан. Уларҙы урманда тапандыға әүерелгән ҡуян һуҡмаҡтары буйлап туҡтауһыҙ хәрәкәт итеп йөрөгән, шулай уҡ үҙ балаларын ҡалдырып китергә мәжбүр булған башҡа инә ҡуяндар имеҙеп китә. Ике-өс аҙна үтеүгә ҡуян балаларының тештәре сыға һәм улар тиҙ арала үҙаллы туҡланыу режимына күсә.

Ғалимдар ҡыҙыҡлы тәжрибә үткәргәндәр. Ҡыр ҡуяндарын күпләп тотоп, вольерҙарҙа үрсетеп ҡарағандар. Инә ҡуяндар бала килтергәндән, уларҙы бер-ике тапҡыр имеҙгәндән һуң, ташлап киткәндәр һәм уларҙың күбеһе аслыҡтан үлгән. Икенсе осраҡта һәр инә ҡуян ҡырағай шарттарҙан айырмалы рәүештә тик үҙенең балаһын имеҙеүгә күскән. Күрәһең, вольер эсендә йыртҡыс йәнлектәрҙең булмауы ҡуяндарҙың йәшәү рәүешен үҙгәрткәндер.

Нисек кенә булмаһын, "Ҡуян бала тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған" тигән әйтем был йән эйәләренең йәшәү рәүешенә туранан-тура бәйле рәүештә әйтелгәнен аңлауы ҡыйын түгел.

Шулай ҙа беҙҙе был әйтемдең кинәйәһе, юл аҫтына һалынған башҡа мәғәнәләре, ишаралары булғанлығы бәхәсһеҙ. Һәр хәлдә, бигерәк тә ололар үҙҙәренең телмәрендә ошо әйтемде ҡулланған саҡта бер ҙә генә ҡуян аталмыш йәнлектәрҙе күҙ уңында тотмай. Һәр бер мәҡәлдәге, һәр бер әйтемдәге кеүек, был һүҙбәйләнештең дә ундай ишаралары бихисап. Шуларға күҙ йүгертеп ҡарайыҡ:

- Орҙом-бәрҙем һүҙ һөйләүсе, әйткән һүҙенең ниндәй һөҙөмтәгә алып килерен уйлап та ҡарамаған кешегә ҡарата әйтелә был һүҙҙәр;
- Матди байлыҡ артынан ғына ҡыуған, тапҡан байлығының тормошонда бөтөнләй хәжәте булмаған кеше хаҡында әйткәндә ошо һүҙҙәр ҡулланыла;
- Күп балалар табып та, уларҙың киләсәге хаҡында хәстәрлек күрмәгән ата-әсәгә ҡарата ла әйтелә был һүҙҙәр.

**Әйткәндәй, хәҙерге баш ҡалабыҙ тормошонан бер күренеш. Өфөнөң барлыҡ райондарында ла тиерлек йорттарҙың өҫкө ҡаттарына аңҡайып ҡараһаң, башың әйләнеүҙән ҡолап китерлек. Биш, туғыҙ ҡатлы йорттар араларында 35-40 ҡатлы йорттар бер-бер артлы ҡалҡа. Ул йорттар янында инфраструктураға (машиналар өсөн парковка, балалар өсөн уйын майҙансыҡтары) бөтөнләй урын юҡ. Шул йорттарға ҡарап торғанда әлеге лә баяғы әйтем иҫкә төшә: ҡуян бала тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

✓ 25 бала аҙнаһына өс тапҡыр "Динамо" стадионынан килгән тренер менән икешәр сәғәт баскетбол менән шөғөлләнә. Был уҡыусыларҙа көс, сыҙамлылыҡты үҫтерә, физик яҡтан нығынырға мөмкинлек бирә.



ИНТЕРНЕТТАН



# КҮҢЕЛ КӨҘГӨҢ...
## нимә күрһәтә?

■ Бөгөнгө көндә сәләмәтлектең тән ауырлығына бәйле булыуын хатта мәктәп уҡыусылары ла белә. Тән ауырлығын нормала тотоу өсөн ғалимдар түбәндәге ризыҡтарҙы күберәк ашарға тәҡдим итә. Исемлектең тәүге урынында грейпфрут тора. Калифорния ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә ярты грейпфрут ашау яман шеш сиренә дусар булыуҙан да һаҡлай. Киске аштан һуң был емеш калорияларҙы яндырырға булышлыҡ итә икән. Ҡабаҡ та сәләмәтлекте нығыта, артыҡ майҙарҙы ла яндыра. Составында аҡһым булғанға күрә, һыйыр ите лә тиҙ туйҙыра, һуңынан асығыу тойғоһо ла йонсотмаясаҡ. Зәйтүн емештәре күҙәнәктәргә йәшәрергә булышлыҡ итә, ул йөрәк, бауыр, ашҡаҙан эшмәкәрлегенә лә файҙалы. Шуның өсөн зәйтүн майы ла диетологтар тарафынан юғары баһалана. Йәшел сәйҙә антиоксиданттар күп, ул матдәләр алышыныуын яҡшырта.

■ "Күҙҙәр - күңел көҙгөһө", тигән бөйөк Шекспир. Күҙҙәр кешенең күңелендә нимә бар икәнен күрһәтә, тип раҫлай ғалимдар ҙа. Күҙ ҡарашы кешенең психикаһы менән тығыҙ бәйле. Доктор Вольфганг Шульц-Цеден билдәләүенсә, күҙ ауырыуҙарының нигеҙендә психик тайпылыштар ятыуы ихтимал. Мәҫәлән, кеше ҡурҡҡан саҡта уның күҙ ҡараһы киңәйә, ул көйгәндә, киреһенсә, тарая. Был реакциялар вегетатив нервы системаһы эшмәкәрлеге менән бәйле. Тулҡынланғанда, ҡурҡҡанда күҙ ҡараһы киңәйә, күҙҙәр насар күрә башлай. Кеше тыныс булған хәлдә күҙ ҡараһы тарая һәм күҙ күреү һәләте яҡшыра. Күҙҙәргә иң ҙур зыянды ҡурҡыу килтерә. Ул күҙ эсе баҫымын күтәрә, әгәр ҙә был тойғо йыш ҡабатланһа, глаукома барлыҡҡа килә. Шулай итеп, күҙегеҙ насар күрә башлаһа, эске конфликттар, баҫып ҡуйылған тойғолар юҡмы икәнлеген асыҡлағыҙ. Шул рәүешле организм һаҡлау механизмын эшкә ҡуша.

■ Бөгөнгө замандың иң модалы диагнозы - стресты дауалауҙа китап ярҙамға килә ала, Бөйөк Британия ғалимдары ошондай һығымтаға килгән. Һынауҙарҙа ҡатнашҡан кешеләр стресс тыуҙыра торған тест үткәндән һуң, үҙҙәренең ысулы менән унан сығырға маташҡан. Уларҙың һайлаған ысулының тәьҫирлеген ғалимдар пульстан һәм мускул тонусынан сығып билдәләгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, китап уҡыу (68 процент) стресҡа ҡаршы иң яҡшы сара, тип табылған. Бер-ике бит китап уҡыу ҙа пульсты нормаға килтергән. Музыка тыңлау ҙа яҡшы, был юл менән һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың 61 проценты тынысланa алған. Кәһүә йәки сәй эсеү - 54, саф һауала йөрөү тауыштарҙың 42 процентын йыйған.

■ Австрияла йәшәүсе психолог биш йыл дауамында бер тикшеренеү үткәргән һәм ниндәй тойғо организм өсөн иң зыянлыһы булыуын асыҡлаған. Башҡаларҙың уңышына көнләшеүселәрҙә инфаркт хәүефе ике тапҡырға юғары. Көнләшеү гормональ тайпылыштарға алып килә. Етмәһә, иң тәүҙә тестостерон бүленеп сығыу кәмей, шуға ла ирегеттәргә был насар ғәҙәт менән дуҫлашыу уларҙың файҙаһына түгел. Үҙен ғәйепле тойған кешегә һалҡын тейеп бара, онкологик сирҙәр хәүефе ҙурая. Үҙ-үҙен йәлләүселәр бауыр сирҙәре менән яфаланыуы ихтимал. Был саҡта хәлһеҙлек гормоны күберәк бүленә, ҡанда шәкәр күләме арта. Һарандар күбеһенсә ашҡаҙан сиренә дусар була.

БЕҘҘЕҢ ДУҪТАР

# АЛҒА, БЕЛЕМ ИЛЕНӘ!



**Гәзитебеҙҙең иң мәртәбәле уҡыусылары һәм тоғро дуҫтары улар, Өфөләге һәм республика ҡалаларындағы башҡорт гимназия һәм лицейҙары коллективтары. Уларҙың етәкселәренә: "Яңы уҡыу йылын ниндәй кәйеф, ниндәй пландар менән башлап ебәрҙегеҙ?"- тигән һорау биреүҙе дауам итәбеҙ.**

***Миләүшә МЫРҘАҒӘЛИНА, Өфө ҡалаһының 2-се Башҡорт лицейы директоры:*** Баш ҡалабыҙҙың тарихи үҙәгендә урынлашҡан лицейыбыҙ үҙе лә бай тарихҡа эйә, үҙенә генә хас булған традициялары бар, күп һанлы, төрлө өлкәлә ҙур уңыштарға өлгәшкән уҡыусыларыбыҙ менән хаҡлы рәүештә ғорурланабыҙ. Әлеге көндә лә 2-се Башҡорт лицейы Өфөнөң алдынғы белем биреү учреждениеларының береһе һанала. Быны иҫбатлап, 2024-2025 йылғы сығарылышты ла миҫал итеп килтерергә була. Быйыл мәктәпте 15 уҡыусы тамамланы, уларҙың икеүһе - Поскрякова Карина алтын миҙалға, ә Туғыҙаҡов Кәрим көмөш миҙалға лайыҡ булды. Ошо уҡ уҡыусылар Берҙәм дәүләт имтихандары биргәндә лә юғары һөҙөмтәләргә өлгәште. Уҡыусыларыбыҙҙың күбеһе бөгөнгө көндә Башҡортостандың һәм илдең төрлө юғары уҡыу йорттары, ә икеүһе - колледж студенттары. Лицейыбыҙҙың тағы ла бер ғорурлығы - Юлбарыҫов Таһир. Ул 2024-2025 уҡыу йылында 10-сы синыфты тамамланы һәм алдан БДИ биреү мөмкинлеге менән файҙаланып, урыҫ теленән 97 бал йыйҙы.

Йәйгеһен беҙҙең лицей матур сара уҙғарыу майҙансығы булды. Беҙ Өфө ҡалаһының Шайморатов кластары уҡыусыларынан торған 35 команда өсөн "Йәйге Шайморатов уйындары"н уңышлы ғына үткәрҙек. Сара юғары кимәлдә уҙҙы һәм баш ҡаланың бөтә белем усаҡтары өсөн әһәмиәтле ваҡиғаға әйләнде.

Ағымдағы уҡыу йылын да уңышлы ғына башлап ебәрҙек. Йәйгеһен лицейҙың кабинет һәм коридорҙарында косметик ремонт эшләнде, 1983 йылдан алып ремонтланмаған санитар бүлмәләрҙә ҙур төҙөкләндереү эштәре башҡарылды. Шулай уҡ яңы уҡыу әсбаптары һатып алынды. Ғөмүмән, балалар яҡты, таҙа, төҙөк мәктәпкә ашҡынып килде. Мәктәптең педагогик составының тулылығы ла белем биреү процесының төплө булыуын тәьмин итә, уҡыусыларҙың бар йәһәттән дә белем алыуҙарына нигеҙ булып тора.

Әйткәндәй, быйылғы уҡыу йылына 48 баланы 1-се синыфҡа ҡабул иттек. Һәм ҡала мәктәптәре араһында тәүгеләрҙән булып 1-се класс уҡыусылары өсөн "Тулы көн мәктәбе" астыҡ. Балалар дәрестән һуң тәрбиәсе ҡарамағында ҡала һәм атаәсәләре эштән бушап килеп алғанға тиклем дәрестәрен эшләй, төрлө түңәрәктәрҙә шөғөлләнә, саф һауала йөрөй. Әлбиттә, уларҙы ашатыу ҙа ҡаралған. Был ата-әсәләр өсөн бик тә ҡулайлы, сөнки кисә генә балалар баҡсаһынан сыҡҡан бәләкәстәрҙе дәрестән һуң өйҙә яңғыҙын ҡалдырып булмай, эшкә лә алып йөрөү мөмкинлеге юҡ. Барыһы ла ҡәнәғәт бындай мәктәптең эшләүенә.

Шулай уҡ быйыл лицейҙа спорт йүнәлешендәге класҡа балалар йыйҙыҡ. Был үҙенсәлекле проект мәктәптәр араһында толрмошҡа ашырыла. 25 бала аҙнаһына өс тапҡыр "Динамо" стадионынан килгән тренер менән икешәр сәғәт баскетбол менән шөғөлләнә. Был уҡыусыларҙа көс, сыҙамлылыҡты үҫтерә, физик яҡтан нығынырға мөмкинлек бирә. Шулай уҡ баскетбол тиҙ генә ҡарарҙар ҡабул итергә, тактика һәм стратегия өҫтөндә эшләргә өйрәтә, тимәк, логик фекерләү үҫешен нығыта, хәтерҙе яҡшырта.

Лицейҙа күп төрлө түңәрәктәр эшләй. Балалар бик теләп ҡурай, вокал, бейеү, футбол һәм карате менән шөғөлләнә, инглиз телен өйрәнә, рәсем, ҡул көрәше һәм башҡа түңәрәктәргә йөрөй. 2-се Башҡорт лицейы инновацион белем биреү практикаларын индереп, уҡыусыларҙың һәр яҡлап үҫеше өсөн бөтә кәрәкле шарттар булдырып, ышаныслы алға барыуын дауам итә. Башҡорт теленә, мәҙәниәтенә, тарихына иғтибар һәм ихтирам тәрбиәләүсе белем усағы булып ҡала килә.

***Азат АҠМАНОВ, Өфөнөң Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы директоры:*** Гимназия сифатлы белем биреү һәм шәхесте һәр яҡлап үҫтереү традицияларын дауам итеп, уңышлы эшләп килә. 2024-2025 йылғы уҡыу йылын тамамлаған һуңғы ҡыңғырау 11-се синыфтағы 67 уҡыусы һәм 9-сы синыфтағы 123 уҡыусы өсөн яңғыраны. 22 уҡыусының 11-енең синыфты миҙал менән тамамлауы уҡыу кимәленең, балаларҙың тырыш һәм белемгә ынтылыштарының юғарылығын асыҡ һөйләй. Шулай уҡ беҙҙең уҡыусылар химия, биология, физика фәндәре буйынса БДИ-ла юғары балдар йыйҙы.

Һәр уҡыу йылы барышында гимназия уҡыусылары төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа әүҙем ҡатнаша. Былтырғы уҡыу йылында төрлө фәндәр буйынса республика этабындағы олимпиадаларҙағы һөҙөмтәләр ҡыуаныслы булды. Атап әйткәндә, 5 гимназист еңеүсе исеменә лайыҡ булһа, 11 уҡыусыбыҙ призлы урындар яуланы. Улар Бөтә Рәсәй уҡыусылар олимпиадаһының йомғаҡлау этабында ҡатнашып, гимназияның, баш ҡаланың һәм, ғөмүмән, республиканың бәҫен күтәрҙе.

Ағымдағы уҡыу йылында гимназияла 1560 бала белем ала. Уларҙың һәр береһе үҙҙәрен һәләтле һәм әүҙем гимназист итеп таныта, уҡыуҙа, спортта, ижадта юғары һөҙөмтәләргә өлгәшә. Йыл һайын беҙҙең гимназияла "Мостай уҡыуҙары" традицион сараһы уҙа. Беҙҙең төп сарағa әйләнгән был матур, күркәм конкурс бөтә республиканан һәләтле уҡыусыларҙы йыя. Тикшеренеү эштәре, әҙәби ижад һәм художестволы уҡыу кеүек номинацияларҙан торған был конкурс барышында улар үҙҙәренең белемен, ижади һәләттәрен күрһәтә, тиңтерҙәре менән аралаша.

Гимназияла уҡыусыларға үҙ һәләттәрен асырға ярҙам иткән думбра, ҡумыҙ, ҡурай түңәрәктәре, мәктәп театры һәм вокал ансамбле, уҡтан атыу, милли спорт төрҙәре секциялары эшләй. Мәктәптә этнографик түңәрәктәр, фольклор ансамблдәре, милли байрамдар һәм саралар туған башҡорт телендә үтә. Уҡыусылар даими рәүештә туған тел һәм әҙәбиәт буйынса конкурстарҙа ҡатнашып, еңеүсе була.

Гимназияла заманса белем биреү - ул цифрлы технологияларҙы ҡулланыуҙы, профилле предметтар буйынса практик дәрестәрҙе, өлкән класс уҡыусылары өсөн монографиялар һәм ғилми эштәр яҙыуҙы, шулай уҡ интерактив уҡыу формаларын үҙ эсенә ала. Гимназияла цифрлы белем биреү үҙәге эшләй, унда уҡыусылар программалауҙы, робототехниканы һәм 3D-моделдәрҙе үҙләштерә. Бындай комплекслы ҡараш арҡаһында сығарылыш уҡыусыларының 98 проценты юғары уҡыу йорттарына уңышлы уҡырға инә, унда тәүге көндәрҙән үк юғары әҙерлек кимәлен күрһәтә. Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы юғары белем биреү стандарттарын һаҡлап, үҫеп килеүсе быуынды һәр яҡлап үҫтереү өсөн бөтә шарттар тыуҙырып, ышаныслы алға барыуын дауам итә.

***Венер САБАНЧИН, Күмертау ҡалаһындағы Республика политехник лицей-интернаты директоры:*** Республика политехник лицей-интернаты Башҡортостандың көньяҡ ҡапҡаһындағы мәртәбәле белем усағы һанала. Ул 1997 йылдың 3 июлендә ауылдан сыҡҡан һәләтле егет-

**✓ Булат Әбүбәкеровҡа Ҡатил батша ролен оҫта уйнағаны өсөн Розалия Солтангәрәева үҙенең махсус призын тапшырҙы. Ә инде эпосты яттан һөйләү турында Нургизә Әбделмәноваға "Киске Өфө" гәзитенең махсус призы бирелде.**



тәрҙе техник юғары уҡыу йорттарына, физика-математика факультеттарына уҡырға инергә әҙерләү маҡсатында асылда.

Уҡыу йортоноң эшлекле коллективын 2020 йылдан етәкләйем. 2024 йылда мәктәп пилотһыҙ һауа судноларҙы (БПЛА) эшләүсе инженер кластары булдырырға мөмкинлек биргән федераль программаға инде һәм ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уның талаптарын үтәп сыҡты. Кластарҙы йыһазландырып, техника алып, педагогтарҙы Ҡаҙан ҡалаһына ебәреп уҡытып алып, ошо йүнәлештә уҡыусыларға белем бирә башланыҡ. Балалар тиҙ арала үҙҙәре был аппараттарҙы программалай, йыя һәм уларҙы осороға өйрәнә башланы.

Быйылғы уҡыу йылында лицейҙа 322 бала уҡый. Уларҙың күбеһе - Көйөргәҙе, Ейәнсура, Сибай, Йылайыр яҡтарынан килгән балалар. Ырымбур өлкәһенән дә уҡыусылар бар. Интернатта 149 бала йәшәй.

Былтырғы сығарылыштың 38 уҡыусыһынан 17-һе уҡыу йортон миҙал менән тамамланы. Быйыл да яҡшы өлгәшкәндәр шул сама. Был лицейҙы тамамлап сыҡҡандар Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек Рәсәйҙең ҙур ҡалаларының юғары уҡыу йорттарына ынтыла һәм, уҡырға инеп, уны уңышлы тамамлап сығалар.

Балаларға уҡыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бар, йылдан-йыл лицейыбыҙҙы төрлө яҡлап йыһазландырып торабыҙ. Бында эшләгән 78 хеҙмәткәрҙең 20-һе уҡытыусы, етәүһе - тәрбиәсе. Барыһы ла юғары категорияға эйә.

Уҡытыусыларыбыҙ БР Мәғариф министрлығы тарафынан үткәрелгән төрлө конкурстарҙа ҡатнаша, үҙҙәренең алдынғы тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Уҡыусыларыбыҙ ҙа һынатмай, олимпиадаларҙа, ярыштарҙа үҙҙәрен тик яҡшы яҡтан күрһәтә һәм лицейыбыҙ данын күтәрә.

***Сәүиә БИКМӨХӘМӘТОВА, Салауат ҡалаһындағы 25-се Башҡорт гимназияһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Беҙҙең гимназия, ҡалалағы берҙән-бер милли уҡыу йорто. Әлеге көндә бында 784 уҡыусы уҡый, уларға балаларҙы ихлас яратҡан 45 юғары һәм беренсе квалификациялы, алдынғы ҡарашлы уҡытыусы белем бирә. Уҡытыу-тәрбиә эше юғары кимәлдә алып барыла. Сығарылыш уҡыусыларының белем сифаты, БДИ һөҙөмтәләре, балаларҙың олимпиадаларҙа һәм конкурстарҙағы еңеүҙәре ошо уҡытыусыларыбыҙҙың хеҙмәт һөҙөмтәһе булып тора ла инде. Дәрестәрҙе, өҫтәмә факультатив курстарҙы ҡыҙыҡлы итеп ойоштороуҙан тыш, улар тәрбиәләнеүселәре менән ҡала, республика, Рәсәй кимәлендәге сараларҙа әүҙем ҡатнаша, призлы урындар яулай.

Шуныһы ҡыуаныслы: беҙҙең сығарылыш синыф уҡыусыларыбыҙ Берҙәм дәүләт имтихандарын уңышлы тапшырып, Өфө, Ҡаҙан, Мәскәү, Санкт-Петербург һәм башҡа ҙур ҡалаларҙағы юғары уҡыу йорттарына бер ҡаршылыҡһыҙ уҡырға инә. Үткән уҡыу йылында 11-се класты 29 уҡыусы тамамланы, шуларҙың 3-һө алтын, 3-һө көмөш миҙал алыу бәхетенә иреште. Ә Кинйәбулатова Аделина урыҫ теленән Берҙәм дәүләт имтиханында 100 балл йыйып, гимназияның данын тағы ла юғарыраҡ күтәрҙе.

Өлкән синыфтар өсөн белем алыу профилле математика йүнәлешендә ойоштороla беҙҙә. 2022 йылда гимназия нигеҙендә "Мәғариф" милли проекты сиктәрендә булдырылған "IT-куб" һанлы белем биреү үҙәге асылды. "IT-куб"та белем 6 йүнәлеш буйынса алып барыла: роботтарҙы программалау, Python, Java телдәрендә программалау, кибергигиена һәм ҙур мәғлүмәттәр менән эшләү, VR/AR ҡушымталар әҙерләү, алгоритмика һәм логика. Үҙәк өҫтәмә белем биреүҙе, заманса һанлы технологиялар һәм информатика тематикаһы буйынса сараларҙы, яһалма интеллект технологиялары менән танышыуҙы, шулай уҡ һанлы грамоталылыҡ һәм һанлы хәүефһеҙлекте тәьмин итә. "IT-куб" кабинеттары иң заманса техника, компьютерҙар, программа комплекстары менән йыһазландырылған. Үҙәктә 5-сенән алып 11-сегә тиклемге класс уҡыусылары шөғөлләнә һәм иң мөһиме: балалар өҫтәмә белемде бушлай ала.

Башҡорт гимназияһы уҡыусылары физкультура һәм спорт менән әүҙем шөғөлләнә. Улар йыл һайын тиерлек ҡала кимәлендә үткәрелгән волейбол, мини-футбол, "Оранжевый мяч" һәм "КЭС-БАСКЕТ" баскетболы һәм саңғы уҙышы, "Зарница" уйындары буйынса еңеүселәр рәтендә.

Тарихын белгән, тыуған илен һөйгән быуындың нигеҙе лә ныҡ. Гимназияла 1998 йылдан алып этнография музейы эшләп килә. Бында гимназия тарихы тураһында бай мәғлүмәттәр тупланған. Шулай уҡ башҡорт халҡының боронғо тормош-көнкүреше хаҡында ла ҡыҙыҡлы экспонаттар һаҡлана. Музей 2009 йылда "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы мәктәп музейы" исеменә лайыҡ булды, ә 2023 йылда мәктәп музейҙарының Бөтә Рәсәй Федераль реестрына индерелде.

2022 йылда гимназия базаһында Рәсәй Федерацияһы Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шаймуратов исемендәге тәүге класс булдырылды, класта 27 уҡыусы уҡый башланы. 2023/24 уҡыу йылында йәнә бер класс асылды. Үткән уҡыу йылында V класта тағы ла 29 бала шаймуратовсылар рәтенә баҫты. Шулай итеп, быйылғы уҡыу йылында гимназияла өс шаймуратовсылар класы бар. Йәш шаймуратовсылар үҙ алдына "Шаймуратовсы" исемен лайыҡлы йөрөтөргә, Башҡортостанға һәм Рәсәйгә тоғро булырға, Тыуған ил өсөн һәләк булыусылар исеменә тап төшөрмәҫкә, төплө белем алырға тиген оло маҡсат ҡуйып йәшәй. Үткән уҡыу йылында Өфө ҡалаһында үткәрелгән "Кыштыкы Шаймуратов уйындары"нда ярышта ҡатнашҡан 36 команда араһында гимназияның бишенсе класс уҡыусыларынан торған шаймуратовсылар командаһы призер булды. Ошо уҡ синыф уҡыусыһы Хәсәнова Динара "Башҡортостан Республикаһы дәүләт телдәрен иң яҡшы белеүсе" номинацияһында еңеүсе булды.

Гимназия уҡыусылары халҡыбыҙҙың рухи мираҫы булған мәшһүр "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса йәш сәсәндәр бәйгеләрендә ҡатнашмай ҡалғаны юҡ. 2023-2024 уҡыу йылында үткән төбәк-ара бәйгелә эпостан өҙөк сәхнәләштереүҙә яҡшы һөҙөмтә күрһәтеп, гимназия командаһы Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы дипломына, иҫтәлекле бүләккә лайыҡ булды. Булат Әбүбәкеровҡа Ҡатил батша ролен оҫта уйнағаны өсөн ғалимә һәм сәсәниә Розалия Солтангәрәева үҙенең махсус призын тапшырҙы. Ә инде эпосты яттан һөйләү турында Нургизә Әбделмәноваға "Киске Өфө" гәзитенең махсус призы бирелде.

Шулай итеп, гимназиябыҙ һәр ваҡыт үҫеш юлында. Бөтә Рәсәй "Почет китабы" федераль реестрына ингән, "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проектын тормошҡа ашырыу маҡсатында үткәрелгән конкурста ҡатнашып, бер миллион һумлыҡ грант алыуға ирешкән инновацион белем йорто яңынан-яңы үрҙәр яулай. Тынғыһыҙ, эш тип янып йәшәгән директорыбыҙ Ильвира Ғилметдин ҡыҙы Фәхретдинова етәкселегендә белем усағының тағы ла ҙурыраҡ уңыштары, яулайһы ҡаҙаныштары алда булһын.

***Ләлә РАФИҠОВА, Мәләүез ҡалаһының Кинйә Арыҫланов исемендәге 9-сы Башҡорт гимназияһы директоры:*** Гимназия коллективы былтырғы уҡыу йылын ҙур уңыштар менән тамамлап, яңы уҡыу йылын яңы өмөттәр һәм маҡсаттар менән ҡаршы алды. Уҡыусылар төрлө олимпиадалар, конкурстарҙа һәм фәнни-ғәмәли конференцияларҙа әүҙем ҡатнашып, күпләп еңеү яулаңы. Мәҫәлән, 10-сы класс уҡыусыһы Иркә Иҫәнбирҙинә Төньяҡ-көнсығыш уҡыусылар олимпиадаһының призеры; 9-сы класс уҡыусыһы Азалия Маликова республика "Ғилем" ғилми-тикшеренеү эштәре һәм проекттары конкурсының призеры; 9-сы класс уҡыусыһы Билал Биков, 3-сө класс уҡыусыһы Илсур Абдрахманов - яҙыусы Булат Рафиҡовтың тыуыуына 90 йыл тулыуға бағышланған муниципаль шиғырҙар бәйгеһендә призлы урындар яулаусылар.

Уҡытыусылар уҡытыу һәм тәрбиәләү эшенә заманса алымдар индереп, балаларҙың белем биреү кимәлен күтәреү өсөн тырышып эшләнә. Башланғыс кластар уҡытыусыһы Нәфисә Ҡотлосурина - "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2025" төбәк-ара конкурсының республика этабында номинация еңеүсеһе.

Беҙҙең гимназия 1773-1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренең береһе, Кинйә Арыҫлановҡа арналған "Арыҫланов уҡыуҙары"н Мәләүез районы мәғариф идаралығы, Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығы менән берлектә быйыл дүртенсе тапҡыр үткәрҙе. Республика кимәлендәге был фәнни-ғәмәли конференцияла Башҡортостан Республикаһы дөйөм белем биреү ойошмаларының 3-11-се класс уҡыусылары ҡатнашты. 548 эшләнеү эше ҡабул ителде һәм 88 призлы урын билдәләнде.

Шулай уҡ гимназияның үҙенсәлекле яңылығы булған шаймуратовсылар кластарында уҡыу ҙа, тәрбиә лә юғары кимәлдә алып барыла. Был класта әхлаҡи ҡиммәттәргә, илһөйәрлек һәм рухи үҫешкә өҫтөнлөк бирелә. Шаймуратовсылар класының уҡыусылары ла төрлө район-ара һәм республика кимәлендә үткән сараларҙа үҙҙәренең һәләттәрен һәм белемен күрһәтеп, гимназияның данын күтәрәләр.

Дөйөм алғанда, 1997 йылда нигеҙ һалынған, белемгә, тырышлыҡҡа һәм йәмғиәткә яуаплы ҡараш тәрбиәләүсе был гимназия тотороҡло үҫеш юлында, үҙенең төрлө проекттары менән киң танылған. Уҡыу корпусында заманса лабораториялар, спорт залдары һәм кәрәкле техник йыһаздар бар, был уҡыусыларға яҡшы шарттар тыуҙыра. Яңы уҡыу йылына әҙерлек буйынса беҙҙең уҡыу йорто йыл һайын яҡшы яҡтан билдәләнә, был да белем биреү системаһының үҫешен күрһәтә.

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Борғандаҡ**
**(Вертишейка)**



Турғайҙан саҡ ҡына ҙурыраҡ. Ҡарап торһаң, тумырҡалар менән бер уртаҡлығы ла юҡ кеүек, турғайҙарға нығыраҡ оҡшаған. Арҡаһы һорголт-көрән, башы, муйыны буйлап арҡыры һыҙаттар үтә, ҡорһағы - һоро, еңелсә генә буй-буй һыҙаттар менән биҙәлгән, ҡойроғо, ҡанаттары ерәнерәк. Суҡышы һары, бер аҙ алға бөгөлөп тора. Ҡойроғо ярайһы оҙон ғына, буй-буй һыҙатлы, башҡа тумырҡҡаларҙыҡы кеүек ослайып тормай. Ағас олонона тотоноп тора алмай, башлыса ботаҡтарға ҡуна, ерҙән атлап, дөрөҫөрәге, һикереп йөрөй. Ҡош туйы ваҡытында ата ҡошто㇐н "кяй-кяй-кяй" тигән һағышлы йырын ишетергә мөмкин.

Илдең бөтөн урманлы зонаһында осрай. Беҙҙең тумырҡҡалар араһында берҙән-бер күсәр ҡош. Япраҡлы, ҡатнаш урманды ярата, унда ла ағастар ныҡ ҡуйы булмаҫҡа тейеш. Шулай уҡ парктарҙа, емеш баҡсаларында, ылыҫлы урмандың ситендә, йылғаярҙарындағы ҡуйы үләндә лә йәшәй. Ҡараңғы урманда борғандаҡты осратырмын тимәгеҙ.

Яҙын, май айында борғандаҡты осратыу мөмкинлеге бермә-бер арта. Ул был ваҡытта ныҡ тауышлана. Беҙ, мәҫәлән, Дим йылғаһы буйында, Ҡырмыҫҡалы районының Талпаҡ күлендәге уртауҙа һәм башҡа урындарҙа күргәнебеҙ булды.

Йылы яҡтарҙан һуң осоп ҡайта - апрель аҙағы-май башында. Ағас олонондағы ҡыуышлыҡтарҙы, ҡайһы бер ҡоштарҙан ҡалған ояларҙы, хатта сыйырсыҡ ояларын һайлай. Оя төбөнә түшәрлек әйбер ҙә ташымай, элекке хужаларҙан нимә тороп ҡалған, шуның менән риза була. Ҡайһы берҙә вағыраҡ ҡоштарҙы ояларынан ҡыуып сығарып та ебәрә. Уларҙың йомортҡаларын, бәпкәләрен йә ташлай, йә йомортҡаһын уларға өҫтәп һала. Йомортҡаларының һаны 14-кә етә, йышыраҡ 7-10 була. 12-14 көндән бәпкәләр сыға. Йомортҡаларҙы инә ҡош баҫа, ата ҡош уны ҡайһы берҙә генә алыштырып тора. Бәпкәләр 23-27 көн ояла ултыра. Өлкән ҡоштар уларға ризыҡ ташып ашата. Был улар үҙҙәренә ризыҡ табырға өйрәнгәнсе дауам итә.

Ниндәйҙер хәүеф янағанда борғандаҡ башындағы ҡаурыйҙарын туҙҙырып ебәрә, суҡышын аса, муйынын һуҙып, башын тирә яҡҡа борғолай - йыланға оҡшатып ҡылана. Йыртҡыстар яҡынайғас иһә ҡатып ҡала һәм ағас ботағы араһына йәшенә.

Ағас ҡайырыһын соҡомай. Төп ризығы - ҡырмыҫҡа. Ояны туҙҙырып, оҙон теле менән ҡырмыҫҡаның ҡурсаҡтарын да ала.

Август аҙағы-сентябрь башында яңғыҙ осоп китә. Ғалимдарға билдәле йәше - 10 йыл.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**



## 20 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
12.25 Х/ф "Добро пожаловать, или Посторонним вход воспрещен". [0+]
13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.40 "Время покажет". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
18.45 "Большая игра". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №11: Розыгрыш". [16+]
0.00 "Время героев". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Местное время.
9.55 О самом главном. [12+]
11.30 Вести. Местное время.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Т/с "Здесь все свои". [16+]
23.00 Д/ф "Никита Михалков. К юбилею". [12+]
0.40 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]**
**14.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Асыш. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [6+]**
**16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Формула здоровья. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 О чем молчат Памятники. [12+]**
**21.00 Специальный репортаж. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ.**
**0.00 Х/ф "Трудно быть мачо". [16+]**
**1.45 Спектакль "Ульмясбай". [12+]**
**3.30 Подкаст. Интонации. [12+]**
**4.00 Бәхет иле. [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**5.30 Территория счастья. [12+]**

## 21 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №11: Розыгрыш". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00, 3.30 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Здесь все свои". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10 "Белая студия. К юбилею Никиты Михалкова".
4.27 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Охота на Гауляйтера". [16+]**
**11.00 Специальный репортаж. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00 Подкаст. Интонации. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Креативный код. [12+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" - "Трактор" (Челябинск). КХЛ.**
**22.00 "Из жизни доктора". [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Башмачник". [12+]**
**1.45 Спектакль "Встреча с молодостью". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 22 ОКТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.35, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №11: Розыгрыш". [16+]
0.00 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Здесь все свои". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Охота на Гауляйтера". [16+]**
**11.00 "Дорога к храму". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 "Экологично". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 21.00 Деловая среда. [12+]**
**17.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Дустар. [16+]**
**19.00 Телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2025". [12+]**
**0.00 Х/ф "Принцесса на бобах". [12+]**
**1.45 Спектакль "Резной трон". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**

## 23 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 13.45, 14.15, 16.45, 17.15, 22.45 "Время покажет". [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45, 18.45 "Большая игра". [16+]
15.05 "Давай поженимся!" [16+]
15.55 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Мосгаз. Дело №11: Розыгрыш". [16+]
0.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Здесь все свои". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Охота на Гауляйтера". [16+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.00 Новости СВО (на рус. яз). [12+]**
**12.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Специальный репортаж. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Креативный код. [12+]**
**21.00 Формула здоровья. [12+]**
**22.00, 3.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Черная вуаль". [12+]**
**1.45 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 24 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.40, 11.20, 17.00 "Большая игра". [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
13.10, 14.15 "Время покажет". [16+]
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.25 Д/ф Премьера. "Меня зовут Альфред Хичкок". [18+]
1.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
23.55 "Истории Большой Страны". [12+]
0.55 Х/ф "Искушение наследством". [12+]
4.19 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Т/с "Охота на Гауляйтера". [16+]**
**11.00 "Йома". [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**14.00, 4.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей.**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 20.15 Квадратные метры. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 "Мама". [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2025". [12+]**
**22.00 Своих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 "Дуҫтар". [16+]**
**23.30 "Ҡурай-шоу". [12+]**
**0.00 Х/ф "Гигант". [16+]**
**1.45 Спектакль "Бәндәбикә һәм Ерәнсә Сәсән". [12+]**
**3.30 "Из жизни доктора". [12+]**
**5.00 Новости (на баш. яз). [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**

## 25 ОКТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Портрет в интерьере". К 80-летию Никиты Михалкова. [16+]
11.35, 12.15 Спецпроект. "30 лет вместе". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.00 Х/ф "Свой среди чужих, чужой среди своих". [12+]
14.50 Д/ф Премьера. "Никита Михалков. Портрет в интерьере". [16+]
16.15 Х/ф "Родня". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 Премьера. "Признание в любви". Концерт, посвященный 100-летию Михаила Танича. [12+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]
22.55 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2025. Этап I. Короткая программа. [0+]
0.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1
5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Юморина-2025". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.00 Х/ф "Виталя". [16+]
0.40 Х/ф "Наперекор судьбе". [12+]
4.07 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро, Республика!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Мосты. Михаил Чванов. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [12+]**
**9.00 "Сәләм представляет". [12+]**
**9.15 Своих не бросаем. [12+]**
**9.30, 6.30 Новости (на рус. яз). [12+]**
**9.45 "Читаем с Грамотейкой". [6+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.30 "Зерно". [6+]**
**11.45 "Курсак". [6+]**
**12.00 "Елкән". [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.50 Хоккей. "Нефтехимик" (Нижнекамск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**18.30 Новости (на баш. яз).**
**19.00 Специальный репортаж ГИБДД. [12+]**
**19.15, 4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 "Байык-2025". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2025". [12+]**
**0.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.30 Х/ф "Дежа вю". [12+]**
**2.15 Спектакль "Слуга двух господ". [12+]**
**5.15 Новости недели (на баш. яз). [12+]**

## 26 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Неоконченная пьеса для механического пианино". [12+]
14.10 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при России 2025. Этап I. Произвольная программа. Прямая трансляция. [0+]
15.10 Х/ф "Утомленные солнцем". [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 Премьера. "Две звезды". Семейный подряд. [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с Премьера. "Опасная близость". [18+]
0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1
5.20, 1.40 Х/ф "Жена моего мужа". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.17 Перерыв в вещании.

### БСТ
**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**8.15, 13.45 "Весело живем!" [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 "Мама". [12+]**
**9.15, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.45 "Читаем с Грамотейкой". [6+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей.**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Сулпылар". [6+]**
**12.00 "Асыш". [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 Креативный код. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [6+]**
**15.00 Честно говоря. [12+]**
**15.45 Формула здоровья. [12+]**
**16.00 Х/ф "Ласковый май". [16+]**
**18.00 Башкортостан#вместе. [12+]**
**18.30 Автограф. [12+]**
**19.00 "Елкән". [6+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15 Подкаст. Интонации. [12+]**
**22.45 Концерт Иделя Нургалина. [12+]**
**0.45 Х/ф "Серые волки". [12+]**
**2.45 Спектакль "Дорогая Памелла". [12+]**
**5.15 Письма солдатам. [12+]**
**5.30 "Дустар". [16+]**
**6.00 Новости недели (на рус.яз.). [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ
*1447 һижри йыл.*

| Октябрь (Рәбиғел ахыр - Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (28) дүшәмбе | 6:13 | 7:55 | 13:30 | 16:12 | 18:06 | 19:48 |
| 21 (29) шишәмбе | 6:15 | 7:57 | 13:30 | 16:10 | 18:04 | 19:46 |
| 22 (30) шаршамбы | 6:17 | 7:59 | 13:30 | 16:08 | 18:01 | 19:43 |
| 23 (1) кесе йома | 6:19 | 8:01 | 13:30 | 16:06 | 17:59 | 19:41 |
| 24 (2) йома | 6:21 | 8:03 | 13:30 | 16:04 | 17:57 | 19:39 |
| 25 (3) шәмбе | 6:23 | 8:05 | 13:30 | 16:02 | 17:54 | 19:37 |
| 26 (4) йәкшәмбе | 6:25 | 8:07 | 13:30 | 16:00 | 17:52 | 19:35 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✓ ***Борон "күлдәк кейеп" донъяға килгән балалар мотлаҡ бәхетле була һәм уңышҡа өлгәшә тип һаналған. "Күлдәктә тыуған" тигән әйтем дә шунан килеп сыҡҡан. Кемгәләр бәхет йылмайғанда шулай тиҙәр.***



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БАШҠОРТ МАТЕМАТИКТАРЫ




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**40-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ялҡын. Ребаб. Балауыҙ. Тула. Урғуян. Илғужа. Литр. Али. Наруто. Бабай. Кәрим. Утаусы. Бөйрәкәй. Афродита. Аҡыҡ. Анаҡ. Алым. Арыҡ. Алыш. Арал.

**Вертикаль буйынса:** Игебаев. Туғыҙбаева. Йәбер. Балаҡ. Олатай. Көй. Ҡоралай. Әсә. Тамаша. Урама. Кран. Ғәбиҙуллин. Уймаҡ. Ҡыл. Руанда. Умрау. Нил. Ышыҡ.

*ШУЛАЙ ҘА БУЛА*

# БӨРКӘНСЕК МЕНӘН ТЫУҒАН



**Көҙҙөң беренсе аҙнаһында Республика клиник перинаталь үҙәгендә 269 сабый, шул иҫәптән өс игеҙәк бала донъяға килгән. Был хаҡта медицина учреждениеһынан хәбәр иттеләр.**

Билдәләнеүенсә, йыл башынан Өфөнөң Республика клиник перинаталь үҙәгендә генә 7 меңдән ашыу сабый тыуған. Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың 8 айында Башҡортостанда 21 меңдән ашыу бала донъяға ауаз һалған.

Бала тыуҙырыу йорттарында иғтибарға лайыҡлы ғәҙәттән тыш хәлдәр ҙә булып тора. Мәҫәлән, Республика перинаталь үҙәгендә "күлдәк кейгән" сабый тыуған. Операция ваҡытында ҡыҙҙы ҡарын бөркәнсеге менән алғандар. Был хаҡта Республика клиник перинаталь үҙәге акушер-гинекологы Станислав Иваха үҙенең телеграм-каналында хәбәр итте. "Баланы ярып алғанда ғәҙәттә яралғы ҡыуығы иртәрәк шартлай. Был юлы бөркәнсек менән тыуҙы. Сабыйға - һаулыҡ, ата-әсәһенә бәхет теләйбеҙ", - тип яҙҙы табип.

Борон "күлдәк кейеп" донъяға килгән балалар мотлаҡ бәхетле була һәм уңышҡа өлгәшә тип һаналған. "Күлдәктә тыуған" тигән әйтем дә шунан килеп сыҡҡан. Кемгәләр бәхет йылмайғанда шулай тиҙәр.

Шулай уҡ Республика перинаталь үҙәгендә ошо көндәрҙә тешле сабый ҙа тыуғайны. Акушер-гинеколог Станислав Иваха әйтеүенсә, бындай күренеш һирәк осрай, ике-өс мең балаға бер тапҡыр. Бигерәк тә ул хәл ҡыҙҙарҙа йыш күҙәтелә. Ғәҙәттә, бер-ике теш үҫкән була. Табиптар ҡарағас, уны ҡалдырырға йәки алып ташларға тигән ҡарарға килә. Күбеһенсә икенсе вариантты һайлайҙар. Тыуғанда уҡ теше булған баланы генетиктар тикшерә, сөнки бының ниндәйҙер патологияға бәйле булыуы мөмкин. Өфөлә донъяға килгән сабыйҙың һаулығында бер ниндәй ҙә тайпылыш күҙәтелмәй.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**17 октябрь "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим, А.Абушахманов), драма. 12+

**18 октябрь "Ете быуын. Йәштәр"** (Р. Харисова), спектакль-вербатим. 16+

**19 октябрь "Заятүләк менән Һыуһылыу"** (М. Ғафури, М. Малухина, И.Ҡаҙаҡбаев). 6+

**22 октябрь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**17 октябрь "Солнце Муха Крокодил"** (К.Чуковский, М. Корнева), ғаилә спектакле. 11:00. 6+

**17 октябрь "Ромео и Джульетта"** (У. Шекспир, К. Яковлев), драма. 19:00. 16+

**18 октябрь "Бер ғүмер етмәй икән..."** (М. Ҡунафин, Р. Хакимов), ватансылыҡ тураһында драматик поэма. 16+

**20 октябрь "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), иҫтәлектәр. 12+

**21 октябрь "Волшебная мельница"** (М.Кәрим). 12+

**21 октябрь "Башҡорт туйы"** (М. Бурангулов, А. Йыһаншин), романтик драма. 6+

**22 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова, З. Давлетбаева, Р. Хакимов), мажара. 11:00. 6+

**22 октябрь "Дни Савелия"** (Г. Служитель, М. Күлбаев). 19:00. 12+

**23 октябрь "Пеппи длинныйчулок"** (А. Линдгрен, О. Пронин). 11:00. 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**18 октябрь "Три поросенка"** (Д.Гараева). 12:00 һәм 15:00. 0+

**19 октябрь "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12:00 һәм 15:00. 0+

**23 октябрь "Коллекция смеха"** (О.Куценко). 19:00. 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**18 октябрь "Һәнәк" журналы. 100 йыллыҡ юбилей кисәһе".** Башҡорт эстрадаһының сағыу йондоҙҙары ҡатнашлығында юбилей сараһы. 12+

**21 октябрь "Яркое солнце Мустая".** Әҙәби шишәмбе. 12+

**23 октябрь "Классиканан неоклассикаға. XX-XXI быуаттар музыкаһы".** Филармонияның камер оркестры концерты. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**17 октябрь "Һөйөү көсө"** (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама. 12+

**18 октябрь "Маугли. Книга джунглей"** (Р.Киплинг, Р. Гайнуллина), әкиәт. 6+

**20 октябрь "Беҙҙең Мостай"**, әҙәби-музыкаль спектакль. 6+

**21 октябрь "Ярлыҡау"** (М. Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев), баллада. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**17, 18 октябрь "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), фантасмагория. 12+

**22, 23 октябрь "Светофорный детектив"** (А.Кружков), әкиәт. 12:00. 0+

**22, 23 октябрь "Алты ҡыҙға бер кейәү"** (Т. Миңнуллин), драмеди. 16+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**17 октябрь "Фәрештә түгелмен"** Эдуард Хөснөтдиновтың концерты. 18+

**20 октябрь** Линар Белый ижадташ дуҫтары менән. Концерт. 18+

**21 октябрь** Гүзәл Әхмәтова менән Ян Лираның концерты. 18+

**23 октябрь "Ҡайтам әле"** Сәйет Билаловтың концерты. 18+

## БР Милли музейы

**17 октябрь "Атай менән донъяны танып беләбеҙ".** Атайҙар көнөнә арналған интерактив экскурсия. 15:00. 0+

**21 октябрь** Милли бейеү көнө саралары программаһы. 11:00 - 16:00. 0+

✓ *һәр бер кадр беҙҙе тамырыбыҙға алып ҡайтыусы бетеү ул. Был ябай клип түгел, ә һәр беребеҙҙең Башҡортостанға ҡарата булған һөйөү тураһындағы визуаль поэма.*



МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# БАШҠОРТ КОСТЮМЫ - ҠЫТАЙҘА

**Республика халыҡ ижады үҙәгенең "Селтәр" башҡорт халыҡ костюмы студияһы Ҡытайҙа үткән "Алтын майҙан" халыҡ-ара традицион мәҙәниәттәр фестивалендә I-се дәрәжә лауреат исеменә лайыҡ булды.**

"Алтын майҙан" халыҡ-ара фестивале Ҡытайҙың Циньхуандао ҡалаһында 8-13 сентябрҙә үтте. Ҡытай тарихында тәүге тапҡыр фестивалдә Рәсәйҙән 70 ижади коллектив ҡатнашты. Уларҙың ижады этностың мәҙәни кодин, халыҡтың тере хәтерен үҙ эсенә алған йырҙарҙы, бейеүҙәрҙе, йолаларҙы, халыҡ-ҡулланма сәнғәтен һаҡлауға йүнәлтелгән. Фестивалдең маҡсаты - сәнғәт һәм ижад аша халыҡтар араһында берҙәмлекте һәм гармонияны нығытыу. "Ҡытайҙағы фестиваль Рәсәй халҡының бай традицияларын һәм ҡытай мәҙәниәтенең башҡа мәҙәниәттәр менән бәйләнештәр булдырыуға асыҡ булыуын күрһәтте. Был бөгөн айырыуса көнүҙәк, сөнки тыныслыҡҡа һәм татыулыҡҡа ынтылыш халыҡ-ара көн тәртибендә өҫтөнлөклө урын биләй", - тип хәбәр итте студия етәксеһе Фатима Хәйретдинова.

Фестиваль Донъя халыҡтары ассамблеяһының мәғлүмәти ярҙамында Бисер Киров исемендәге "Алтын майҙан" интернациональ мәҙәни-ағартыу проекты сиктәрендә үтте.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

# ИҢ ЯҠШЫҺЫ, ТИП...

**Ошо көндәрҙә Коми Республикаһының Сыктывкар ҡалаһында фин-угыр халыҡтарының IX "Туйвеж" кинофестивале үҙҙы. Башҡортостанда төшөрөлгән "Бетеү" фильмы тәүге фестиваль наградаһы менән билдәләнде.**

Режиссер Руслан Юлтаев етәкселегендәге ижади төркөмдең ауылдан МХО-ға гуманитар ярҙам ебәреү башланғысы тураһында төшөргән картинаһы "Ватанды һаҡлаусылар йылына иң яҡшы фильм" призына лайыҡ булды.

Фестивалдә фильм менән Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы мөхәррире, сценарий авторы Анна Мырҙабулатова таныштырҙы. Уның һөйләүенсә, "Бетеү" фильмы - 2022 йылдың йәйендә булған хәл-ваҡиғалар тураһында. Сюжет буйынса героиня берҙән-бер ейәнен МХО-ға хеҙмәт итергә ебәрергә теләмәй. Уны был ҡарарынан һүрелдереү уйы менән нәҫелдән күсеп килгән бетеүен алып ҡала. Егеттең хәүефтә икәнлеген белеп, яҡындары бәләләрҙән һаҡлар бетеүҙе гуманитар ярҙам йыйыусылар аша ебәрергә уйлай, тик бөтәһе лә улар уйлағанса еңел генә килеп сыҡмай".

Ишембай районы Маҡар ауылының гүзәл урындарында төшөрөлгән фильмда ролдәрҙе Башҡорт драма театры һәм Салауат драма театры актерҙары башҡара.

Эксперт комиссияһы эше йомғаҡтары буйынса IX "Туйвеж" кинофестиваленең конкурс программаһына илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә төшөрөлгән 61 кино эше һайлап алынған булған.

# БЕЙЕҮ КӨНӨН БИЛДӘЛӘЙБЕҘ!

**21 октябрҙә, күренекле хореограф, башҡорт хореография сәнғәтенә нигеҙ һалыусы, башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамблен ойоштороусы һәм уның тәүге художество етәксеһе Фәйзи Ғәскәровтың тыуған көнөндә, республикала Милли бейеү көнө уҙғарыла.**

Байрам Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров инициативаһы менән үткәрелә. Был кисгә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында республикабыҙ бейеү сәнғәте оҫталары Башҡортостандың бейеү мәҙәниәте байлығын һәм төрлөлөгөн күрһәтәсәк. Программаға башҡорт хореографияһының алтын фондынан тарихи ваҡиғаларҙы һәм халыҡ йолаларын сағылдырған легендар бейеүҙәр индерелгән. Сәхнәгә Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре, Өфө "Мираҫ" йыр һәм бейеү, Учалы филармонияһының "Уралтау", Нефтекама филармонияһының "Түңгәүер", Сибай концерт-театр берекмәһенең "Сибай" халыҡ бейеүҙәре ансамблдәре, Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берекмәһенең Бейеү театры сыға.

# БЕҘҘЕҢ ҺӨЙӨҮ - ЕРЕБЕҘГӘ

**"Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Хазина" этно-проектының "Ерем" клибының һәм синглының премьераһы үтте. Заманса сәнғәт формаларын һәм милли традицияларҙы берләштергән сара Башҡортостан Республикаһы көнөнә бағышланды.**



- Был проект кешенең тамырҙары менән бәйләнеше, тыуған яҡтың илһам биреүе хаҡында, - тип белдерҙе проект авторы Земфира Рәшитова. - Башҡорт халыҡ уйын ҡоралдары һәм заманса ритмдар тәбиғәт тауышына әйләнә, ә һәр бер кадр беҙҙе тамырыбыҙға алып ҡайтыусы бетеү ул. Был ябай клип түгел, ә һәр беребеҙҙең Башҡортостанға ҡарата булған һөйөү тураһындағы визуаль поэма.

HAZINA - боронғо мотивтарҙы заманса ритмдарға әйләндергән ҡатын-ҡыҙҙар проекты. Халыҡ йырҙарының милли уйын ҡоралдары менән берлектәге тылсымлы яңғырашы. Тәүге ноталарҙан уҡ үҙенә ылыҡтырған музыка боронғо мәҙәниәттең энергияһы, яңы тарих булдырыуға илһам бирерсе. Үҙ ижадында төркөм башҡорт көйҙәренең һирәк осраған өлгөләрен оҫта ҡуллана. Уларҙың ижадын төрлө йәштәге кешеләр яратып тыңлай.

ТЕЛҺӨЙӘР

# КЕМ ҺЫҠМЫР?

**Көҙҙөң тәүге көндәрендә һыҡы ҡар яуа. Һыҡы ҡар ағастарға һырый.**

**"Һыҡы"** - "епшек" һүҙенең игеҙәге тиергә мөмкин, ләкин ниңәлер "һыҡы" һирәгерәк осрай. "Һыҡы" тип тағы ла татлаҡ булмаған ҡышҡы юлдың сифатын белдерәләр. *Ҡыш еткәс, һыҡы юлдан йөрөүселәр арта.*

**Һыҡмыр.** "Һаран" тигән һүҙгә тура килә. *Һыҡмыр әҙәм. Әкиәттә үтә һыҡмыр кешенең һаранлығы аркаһында отолоуы бәйән ителә.*

**Һыҡтырғыс.** "һыҡтырғыс" һүҙе бик һирәк ишетелһә лә, көнкүрештә уны белдергән әйберһеҙ ҡайһы бер кейемһалымды тотоноп та булмаҫ. Йомаҡ һүҙҙең яуабы - "резинка". Салбар йә итәк биллеген йә балаҡ, еҫ осон бөрөүгә, хатта ҡыҙ-ҡырҡындың сәсен йыйып ҡуйыу өсөн дә һыҡтырғыс кәрәк. *Модала - ҡаты һыҡтырғыстан яһалған билбау. Бала бейләйҙәрен юғалтмаһын өсөн, ең осона һыҡтырғыс менән беркетеп ҡуялар.*

**Һынығыу.** Эшләмәй йөрөп эшләгәндән һуң тәндең ныҡ ауыртыуы була һынығыу. *Байтаҡ бесән сапҡандан һуң тән һынығып алды.* Имгәнеү, биртенеү хаҡында һөйләгәндә лә "һынығыу" һүҙе тура килер. *Ауыр эшкә ҡыҙыу тотонма, һынығырһың.*

**Һыҡыу.** "Һыҡыу" - тимәк, тамаҡҡа аҙыҡ тығылыу. *Ашығып ашап, тамаҡҡа һыҡып ҡуймаһын.*

**Шулай итеп, йәйен - шыма, ҡышын һыҡы юлдарҙан йөрөргә яҙһын.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ОЛО МӨҒЖИЗӘЛӘР АЛДЫНАН...

## бәләкәйҙәрен күрергә өйрән

Ҡатын-ҡыҙҙар менән сағыштырғанда ир-егеттәргә йәшәүе еңелерәк: беренсенән, улар һуңыраҡ өйләнә, икенсенән, иртәрәк донъя ҡуя.

**(Генри Луис Меккен).**

Ҡатын-ҡыҙға аҡыл тигән нимә дөрөҫ йәшәү өсөн генә түгел, бәләкәй ахмаҡлыҡтарын аҡлау өсөн дә ярҙам итә.

**(Ф. Ларошфуко).**

Бизнесты ҡурҡыу түгел, хыял төҙөй.

**(Роберт Киосаки).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Өс кеше - тылсымға әйә аҡыл эйәһе, абруйлы бай һәм аҡыл эйәһенең укыусыһы - урам буйлап килә икән.**

**- Ишетеүемсә, һин тылсымға эйәһең, - тигән бай аҡыл эйәһенә. - Миңә мөғжизә күрһәтһәң, Аллаға ышанырмын.**

**- Бөгөн ҡояш ҡалҡтымы? - тип һораған ҡарт.**

**- Әлбиттә!**

**- Бына һиңә мөғжизә. Донъябыҙҙың бер мөғжизәһе.**

**- Юҡ... Миңә ысын мөғжизә күрергә кәрәк! Ҡояшты ҡапла, таштан һыу сығар... Ҡара әле! Ана, ҡыуаҡ аҫтында яраланған ҡуян ята. Дауала уны!**

**- Ҡатының бала тапҡан, тип ишеткәйнем?**

**- Эйе. Хәҙер малайым бар.**

**- Был бит ысын мөғжизә! Тормоштоң бер мөғжизәһе.**

**- Юҡ, минең үҙ күҙҙәрем менән ысын мөғжизәне күргем килә!**

**- Әле уңыш йыйыу мәле. Ҡара әле, япраҡ ҡына ҡап-ҡара булып ятҡан бынау баҫыуҙа дөгө һәм бойҙай ҡалай уңған?**

**- Йылдағыса инде!**

**- Бына һиңә өсөнсө мөғжизә!**

**- Мин дөрөҫ аңлата алманым шикелле. Минең бар теләгәнем...**

**- Һин барыһын да бик яҡшы аңлаттың. Мин үҙем күрһәтә алғанды һиңә күрһәттем. Әҙләгәнеңде тапмаһаң, ғәфү ит. Ярҙам итә алмайым.**

**Быны ишеткәс, бай боролған да китҡан. Бер сама ваҡыт үткәс, аҡыл эйәһе ҡыуаҡ эргәһенә барып, баяғы ҡуянды ҡулына алып, яраларына өргән. Ҡуян шундуҡ терелгән. Уҡыусы аптырашынан:**

**- Остазым, быңдай мөғжизәләрҙе һин көн һайын башҡараһың. Ни өсөн был рәхимле кешегә өрөүһен генә булһа ла күрһәтмәнең?**

**- Уға мөғжизә түгел, спектакль кәрәк ине. Батша булыр өсөн тәүҙә принц булырға кәрәк. Аҡыл эйәһе булыр алдынан уҡыусы тормошон татып ҡарау мотлаҡ. Ҙур мөғжизәләр күреү теләген тормошҡа ашырыр алдынан бәләкәстәрен күрергә өйрәнергә кәрәк. Уларҙы бит беҙгә һәр яңы атҡан таң үҙе менән алып килә..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 25041

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 16.10.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 16.10.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 17.10.2025 й.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2707
Заказ - 1936



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.